ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 декабрь (аҡъюлай) 2015

№50 (676)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Пионер булып...**



әрәм булманыҡ, әҙәм булдыҡ 3

**Тәнҡитләп йөрөгәнсе...**



тот та үҙең эшлә! 5

**Тыуып үҫкән илкәйемде...**



ташламам, тигән инем 8-9

**Төп тәнҡитсем - мин үҙем...**



11

**ТВ-программа** 14

***"Әгәр ҙә һин тиҙ һәм насар эшләһәң, һинең тиҙ эшләүеңде оноторҙар, ә насар эшләүең оҙаҡҡа хәтерҙә ҡалыр. Әгәр ҙә һин эште аҡрын һәм яҡшы башҡарһаң, һинең аҡрын эшләүеңде оноторҙар, ә яҡшы эшеңде оҙаҡ ваҡыт хәтерҙә ҡалдырырҙар".***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хоккейҙы ла, башҡа спорт төрҙәрен дә яратабыҙ, "Салауат Юлаев" уйындарын да ҡалдырмайынса ҡарап барабыҙ, янабыҙ-көйәбеҙ, тик ниңә һуң ҙур спортта үҙебеҙҙең егеттәр юҡ?

***Сәмәрә ХӘЛИТОВА, гер күтәреү буйынса 5 тапҡыр донъя чемпионы, Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәй:*** Ауыл мәктәбендә 32 йыл физкультуранан уҡытып, әле хаҡлы ялдамын. Уҡыусыларым араһынан чемпиондар сыҡмаһа ла, улар һәйбәт кешеләр булып үҫтеләр. Күптәре ниндәйҙер һөнәргә эйә булып, эшләп йөрөһәләр ҙә, спорттан айырылмайҙар. Даими рәүештә район ярыштарында ҡатнашыусылар ҙа бар хатта. Ауыл шарттарында спортҡа ылығып китеүселәр бик һирәк күренеш инде ул. Ҙур спортҡа килер өсөн бала кәмендә район үҙәгендә йәшәргә, юғары квалификациялы тренерҙа шөғөлләнергә тейештер, тип уйлайым. Унан һуң, баланың үҙенең физик мөмкинлеге, һәләте булған ихтыярҙа ғына ул киләсәккә ныҡлы маҡсат ҡуйып шөғөлләнә ала. Үҙ-үҙеңә ышаныс та бит күп нәмәгә өлгәшергә ярҙам итә. Үҙемдең бала саҡты хәтерләйем дә, 8-се класта уҡығанда еңел атлетика буйынса нисек итеп район чемпионы булыуымды, аҙаҡ, әсәйем бик риза булмаһа ла, атайымдың мине дәртләндереп, хуплап ебәреүе арҡаһында, физкультура уҡытыусыһы булам, тип, тиҫтерҙәрем - 4 егет менән бергә Күмертау училищеһына барып уҡырға инеүемде, аҙаҡ ошо уҡ йүнәлеш буйынса юғары белем алыуымды иҫкә төшөрҙөм. Әлегесә, балаға тейешле йүнәлеш биреп ебәреүҙә атай-әсәйҙең дә роле бик ҙур. Әгәр улар спорт һөйгән балаһына: "Ҡуй, балам, юҡ менән булма, ана экономист йә юрист һөнәренә уҡы", - тип ныҡышһалар, уларҙы тыңламай ҙа булмайҙыр. Был осраҡта, тимәк, унын хыялы ла шул тиклем генә - тәүге ҡаршылыҡ алдында селпәрәмә килерлек дәрәжәлә генә булған, тигән һүҙ. Ә бит ҙур спортҡа табан илткән юлында ҡаршылыҡтар тыуған һайын, уны еңерлек сәм дә тыуа. Улар һине, киреһенсә, сыныҡтыра, характерыңды тәрбиәләй.

Ошо тәңгәлдә легендар хоккейсы Валерий Харламовтың яҙмышы күҙ алдына баҫа. Уның бөтөн тормошо, ысынлап та, легенда. Тәҡдире шулай булғанмылыр - Харламовтың спорттағы һәр аҙымы ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу булғанын беләбеҙ. Ләкин асылы менән оптимист, көрәшсе, иҫ киткес ныҡышмал егет һынмай, киреһенсә, бая әйткәнемсә, ихтыяр көсө ныгына ғына бара. Фәҡәт шундай кешеләр генә килә ала ҙур спортҡа. Спорт - ул характер. Шуға өҫтәп, туҡтауһыҙ күнекмәләр, әлбиттә. Былдай спартандар тормошо менән йәшәргә теләүселәр аҙым һайын тип әйтә алмайбыҙ. Берәү, ләкин берәгәйле улар. Ҙур спорт ҙур хеҙмәт, фанатиклыҡ талап итә. Ә беҙҙең балалар хәҙер, нисектер, теплицала үҫәләр һымаҡ тойола миңә...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# БЕРГӘ-БЕРГӘ ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!




**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 3 декабрҙән 13 декабргә тиклем республиканың бөтә почта бүлексәләрендә лә 2016 йылдың тәүге яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә арзанырак хаҡҡа яҙыла алаҫаҡһығыҙ: Д0665 индексы менән - 469 һум 02 тин, Д0673 индексы менән (юридик берәмектәр өсөн) - 499 һум 02 тин. Ә 13 декабрҙән һуң хаҡтар элеккесә була: 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (юридик берәмектәр өсөн) - 575 һум 76 тин.**

Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләкле булыу мөмкинлеген дә ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Йыл аҙағына тиклем квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ"**, **Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре"**, **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**, **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**, **Нияз Мәжитовтың "История Башкортостана"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, **башҡортса "Дини календарь"**, **2016 йылға "Мәктәп календары"**, **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып шатланыуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ТАШҠА БАҪЫЛҒАНДЫҢ...

## һүҙе үтемлерәк

**"Киске Өфө" гәзитен хәҙер күптән уҡыйым. Китапханасы булараҡ, уның төрлө йәштәге уҡыусылар өсөн дә ҡыҙыҡлы икәнен беләм. Аҙналыҡ гәзит тап "Киске Өфө" һымаҡ булырға тейештер ул. Үҙемә унда материалдарҙың урынлаштырылыуы ла, дизайны ла, гәзиттең биҙәлеше лә оҡшай. Ҡулға тотоп ҡарауы ла күңелле был гәзитте.**

"Киске Өфө" донъя күрә башлаған ғына сағынан алып халҡыбыҙҙың тарихына күп урын биреүе менән күңелдәрҙе яулағайны. Бөгөн дә тарихыбыҙҙың яңынан-яңы биттәрен асыуы, уны халыҡҡа еткереүе маҡтауға лайыҡ. Боронғо Өфө ҡаласығы хаҡында "Киске Өфө"нән башҡа ентекләп яҙыусы ла юҡ хатта. Уның беҙҙең өсөн ни тиклем әһәмиәтле булыуын аңлау кәрәк ине барыһына ла. Быларҙан тыш, мәҙәниәт ҡомартҡылары, башҡорттоң көнкүреш әйберҙәренең тарихы тураһында уҡырға яратам.

Онотола төшкән йолаларҙы хәтерҙәргә төшөрөп ебәрҙе гәзит. Хәҙер инде башҡорт милли кейеме, ул борон нисек булған, ниндәй биҙәк нимәне аңлатҡанлығы хаҡында һөйләшеп алырға ваҡыт етте, юғиһә, был эшкә белмәйенсә тотоноусылар бар.

Ҡатын-ҡыҙҙар менән гүзәл зат тураһында матур диалогтар ҡораһығыҙ, әлегерәк ҡыҙыҡлы мәҡәләләре менән һөйөндөргән "Ир-азамат" тигән рубрикағыҙҙы ла яңыртһағыҙ ине.

Беҙҙең халыҡ ҡыҙыҡ бит ул, телевизорҙан ишеткәнгә ҡарағанда, ташҡа баҫылғанға нығыраҡ ышана. Шуға ла яңы сыҡҡан ҡанундар, үҙгәрештәр тураһында күберәк яҙыуығыҙҙы һорайым.

Баҫма һүҙгә, тимәк, гәзит-журналға мохтажлыҡ һәр ваҡыт буласаҡ. Уны интернет алыштыра ла алмай. Кино сәнғәте барлыҡҡа килгәс, театрға халыҡ йөрөмәҫ, тигән ҡараштар булған. Видеомагнитофондар булғас, кешеләр кинотеатрҙарға йөрөмәй башлар, тип тә уйлағандар. Был фараздар тормошҡа ашмаған кеүек, гәзит уҡыусылар ҙа һәр заманда ла табыласаҡ.

Әлбиттә, матбуғат ул - тере организм. Ваҡытлы матбуғат саралары баҙар конкуренцияһын да үтергә тейеш бөгөн. Шулай ҙа, заманалар ауыр, тип, бер башҡорт гәзит-журналы ла юҡҡа сыҡманы, шуға ҡыуанайыҡ та, уларҙы үҫтереүгә, артабан йәшәтеүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәйек, тип өндәшәм милләттәштәремә.

**Мәҙинә ҒӘСКӘРОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Хоккейҙы ла, башҡа спорт төрҙәрен дә яратабыҙ, "Салауат Юлаев" уйындарын да ҡалдырмайынса ҡарап барабыҙ, янабыҙ-көйәбеҙ, тик ниңә һуң ҙур спортта үҙебеҙҙең егеттәр юҡ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Вәкил ИШБУЛАТОВ, БР Мәғариф отличнигы, Баймаҡ районы Темәс мәктәбе уҡытыусыһы:*** Ни өсөн башҡорт спортсылары юғары лигаларға, донъя кимәлендәге ярыштарға сыға алмай, тигән һорауға ҡыҫҡа ғына итеп, йә булмаһа, бер-ике сәбәпте асыҡлап ҡына ла яуап биреп булмайҙыр. Минеңсә, бында бер нисә йүнәлештән сығып фекер йөрөтөү кәрәк. Беренсенән, башҡорттарҙың күпселеге ауылда йәшәй. Шунлыҡтан, тарихтан килгән ғәҙәт буйынса, Рәсәйҙә ауыл кешеһенең матди хәле ҡала халҡы менән сағыштырғанда ҡайтышыраҡ. Ауыл кешеһе бер туҡтауһыҙ ана шул аҡса табыу хәстәре менән яна, балаларын спортҡа ылыҡтырыуға уның ваҡыты ла ҡалмай. Икенсе сәбәп: милли үҙенсәлегебеҙҙер - бошоноп бармау. Битарафлыҡ, моңһоҙлоҡ та юҡ түгел беҙҙең халыҡта. Шуға ла, күрәһең, спорт күп осраҡта кәрәкмәгән нәмә һымаҡ ҡабул ителә. Беҙҙең ауылда сит милләт вәкилдәре бихисап. Уларҙа спортҡа мөнәсәбәт икенсе төрлөрәк. Мәҫәлән, бер генә миҫал: башланғыс синыфта уҡыған улын бер атай кеше ауылдан 55 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан район үҙәге Баймаҡҡа аҙнаһына ике тапҡыр машина менән көнсығыш һуғыш төрҙәре түңәрәгенә йөрөтә. Әлеге ғаилә күсеп килгәне бирле ауылда бындай хәлдең булғанын хәтерләмәйем. Бына бит, ауылда йәшәгән хәлдә лә, теләһәң, сараһын табырға була, тигән аҡыл аңлашылалыр.

Өсөнсөнән, ни өсөн башҡорт балалары спорт буйынса Рәсәй, донъя кимәленә һирәк сыға? Беҙ ауылда үҙебеҙҙең ҡулдан килгәндең барыһын да эшләйбеҙ ҙә бит, тик районда, республикала спорт буйынса етәкселектә милли кадрҙарыбыҙ һирәк, хатта юҡ кимәлендә булғанлыҡтан, балаларыбыҙ ҙа артабанғы ярыштарҙа ҡатнашыу мөмкинлегенән ситтә тора ла ҡала. Беҙҙең башланғысты артабан дауам итер кадрҙарыбыҙ юҡ. Юғары даирәләрҙәге спорт етәкселәре, судьялар һәр береһе үҙенекен тарта - быныһы көн кеүек асыҡ күренеп тора.

Хоккейҙа, футболда, волейболда, үҙегеҙгә мәғлүм булыуынса, легионерҙар һатып алына. Был, бер яҡтан, һәйбәт тә - беҙҙең республика командалары Рәсәй, донъя кимәлендәге ярыштарҙа уйнай ала. Икенсе яҡтан, бик үк яҡшы ла түгел - әлеге лә баяғы, милли кадрҙарға урын да, ихтыяж да ҡалмай...

Үҙем оҙаҡ йылдар физкультуранан уҡыттым, әлеге көндә "Тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре" дәрестәрен алып барам. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтөн тормошом спорт менән бәйле. Балаларым да спорт һөйөп үҫте, матур ғына уңыштарға ла өлгәштеләр: өлкән улым Илгиз еңел атлетиканы үҙ итте: ҡыҫҡа дистанцияға йүгереү буйынса республика беренселегенә лә сыҡтыҡ заманында. Тик аҡса юҡ, тип, унда ебәрмәнеләр. Ҡыҙым Айгөл полиатлон буйынса спорт мастерлығына норманы үтәне. Кесе улым Иҙел гер күтәреү менән мауыҡты, ләкин береһе лә спорт юлынан китмәне. Уҡыусыларым булған башҡа балалар хаҡында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин. Ни тиһәң дә, ауыл мәктәптәренең ҙур спортсылар әҙерләү буйынса базаһы ла, кимәле лә, программаһы ла юҡ. Һәләтлеләр етди, ҙур спортҡа бәләкәй йәштән, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн махсус спорт мәктәптәрендә маҡсатлы рәүештә әҙерләнә. Ә ауыл мәктәптәрендә физик әҙерлектең тәүге баҫҡысына нигеҙ һалына ғына. Ә бының өсөн бөтөн тейешле шарттар булдырылған. Беҙҙең Темәс мәктәбе ҙур ғына, балалар һаны күп, шуға ла физкультуранан махсус белемле 4 уҡытыусы эшләй, улар төрлө спорт секциялары алып бара.

***Йәлил ЙОСОПОВ, Рәсәйҙең спорт мастеры, Башҡортостандың атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре, БР мәғариф отличнигы:*** Нишләп булмаһын беҙҙең егеттәр ҙур спортта? Бар! Спорт ул хоккей ҙа футбол, тип кем әйткән? Ә ауыр атлетика, бокс, көрәш спорт түгелме ни? Һәр халыҡтың үҙенә күрә килешеп торған, менталитетына, характерына хас спорт төрө була инде, был хаҡта "Киске Өфө" гәзитендә бик төплө әңгәмәләр баҫылып сыҡҡанын хәтерләйем. Башҡорт халҡы борондан көрәшселәре менән дан тотҡан, әле лә бер генә һабантуй ҙа көрәшселәр бәйгеһенән башҡа үткәне юҡ. Донъя аренаһына сыҡҡан боксерҙарыбыҙ Динис Шафиҡов, Хәбир Сөләймәновтар, көнсығыш алыш төрҙәре буйынса чемпиондарыбыҙ үҙҙәре ни тора! Ғөмүмән, беҙҙең уртаса кәүҙәле, яҫы яурынлы баһадирҙарға олпат көрәш төрө хас. Ә бына Италия, Бразилия, Испания кеүек илдәрҙең еңел кәүҙәле, ҡыҙыу ҡанлы егеттәре туп артынан йүгерһендәр, әйҙә! Тырыштырғанда, беҙҙең егеттәрҙән дә хоккейсылар, футболсылар тәрбиәләргә була, әлбиттә, тик бының менән маҡсатлы шөғөлләнгән кешеһе генә юҡ. Ә беҙ үҙебеҙҙең ҡулдан килгәнде эшләйбеҙ. Әле генә бына Ҡаҙандан көрәш буйынса донъя чемпионатынан ҡайтып торабыҙ. Ике егетебеҙ - Дим Хәйруллин (80 кг) менән Наил Мөхәмәтйәров (90 кг) донъя чемпиондары исемен яуланы. Ҙур спорт түгелме ни был? Төрлө илдәрҙән 20 команда көрәшселәре бил һынашты. Һуғыштар барыуға ҡарамаҫтан, Сириянан да килгәндәр хатта. Таиланд, Һиндостан, Монголия һәм башҡа илдәр спортсылары ҡатнашты. Мин тренер булып эшләгән Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназияһында уҡып сыҡҡан өмөтлө генә йәш көрәшселәр бар. Шуларҙың икәүһе - Зиннур Әлибаев менән Ридан Хажиморатов - Рәсәй йыйылма командаһы ағзалары. Европа беренселегендә ҡатнашырға иҫәп тотабыҙ. Башҡортостанда, ғөмүмән, көрәшселәребеҙ бик күп, улар республиканың спорт ғорурлығы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов Волга буйы федераль округындағы Рәсәй Федерацияһы Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Совет ултырышында ҡатнашты. Киров ҡалаһында үткән ултырыш медицина ярҙамының сифатын күтәреү темаһына арналды. Волга буйы федераль округындағы Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич белдереүенсә, март айында Һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцова ҡатнашлығында үткән ултырышта күтәрелгән күп мәсьәләләр Рәсәй Президентының Рәсәй Федераль Йыйылышына Мөрәжәғәтендә сағылыш тапты. Ултырышта тиҙ ярҙам хеҙмәтенең матди-техник базаһын нығытыу, һирәк осрай торған сирҙәр менән ауырыусыларҙы дарыу менән тәьмин итеү, медицина берлектәре төҙөү мәсьәләләре күтәрелде.

✓БР Башлығы Рөстәм Хәмитов ВГТРК иғлан иткән "Война и мир. Читаем роман" әҙәби марафонында ҡатнашты. Проект сиктәрендә республика етәксеһе Лев Толстой романынан дәүләт хеҙмәтенә арналған өҙөк уҡыны. Был проект Әҙәбиәт йылын тамамлай һәм тәүге китап баҫылып сығыуға 150 йыл тулыуға арнала. Әҙәби марафонда ҡатнашырға теләк белдереүселәр иҫәбе 5372-гә еткән. Редакторҙар 1300 кешене роман уҡыу өсөн һайлап алған. Улар араһында актерҙар, режиссерҙар, алып барыусылар, сәйәсмәндәр, спортсылар, дәүләт эшмәкәрҙәре бар. Проектта 16 Башҡортостан вәкиле ҡатнаша.

✓Рәсәй Президенты Указы менән киләһе йыл Рәсәй киноһы йылы тип иғлан ителде. Уның сиктәрендә төбәктәрҙә һәм тәү сиратта халҡы 100 мең кешенән артмаған бәләкәй ҡалаларҙа кино күрһәтеү системаһын үҫтереүгә айырым иғтибар биреү күҙ уңында тота. Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы Рәсәй киноһы йылының рәсми логотибын тәҡдим итте. Унда йыртмалы билет һәм Рәсәй флагы төҫөндәге өс дүртмөйөш һүрәтләнгән.

✓Башҡортостанда уртаса айлыҡ хеҙмәт хаҡы һәм пенсия күләме билдәле булды. Яҡынса баһалауҙар буйынса, халыҡтың йән башына уртаса килеме айына 30 595,5 һумға тиң. 2015 йылдың III кварталында хеҙмәткәрҙең уртаса айлыҡ эш хаҡы 25 496,6 һум тәшкил иткән. 2015 йылдың 1 октябренә уртаса айлыҡ пенсия күләме 11 430,0 һумға тиң.

*✓ Бысраҡ материалдар авторҙары һәм уларға заказ биреүселәр, күрәһең, халҡыбыҙҙың һәм Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеген емерергә иҫәп тота йә булмаһа йәштәрҙе һәр төрлө провокацияларға этәрә.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

**Осраҡлы тап килдеме, әллә махсус эшләндеме, октябрь аҙағында, комсомолдың тыуған көнөндә, ил Президенты Владимир Путин "Рәсәй уҡыусылары хәрәкәте" дөйөм Рәсәй ижтимағи-балалар һәм үҫмерҙәр ойошмаһын булдырыу тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы. Был күптән көтөлгән ҡарар ине, әлбиттә. Уны көтә торғас, һуңғы пионер һәм комсомолдар менән бөгөнгө йәштәр араһында бер ниндәй йүнәлеш тәьҫире татымаған тотош бер быуынды "юғалттыҡ". Үҫмерлек йәшен күптән уҙып, утыҙын тултырҙы улар хәҙер.**

# ПИОНЕР БУЛЫП...



## әрәм булманыҡ, әҙәм булдыҡ

Ҡайһы берәүҙәр әлеге утыҙҙағыларҙы, ысынлап та, "юғалған быуын" тип атай. Бында дөрөҫлөк барҙыр, бәлки. Ләкин был ярлыҡты тотош бөтәһенә лә тағыу дөрөҫ тә булмаҫ. Белем генә түгел, тәрбиә биреүҙе лә бурысы тип һанаған энтузиаст уҡытыусылар, төплө ғаилә тәрбиәһендә үҫкәндәре үҙҙәрен бына тигән шәхестәр һәм һөнәр эйәләре сифатында раҫлап, илгә файҙа килтерә. Урта йәштәрҙәге эшҡыуарҙар ҙа байтаҡ. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең тәғәйенләнешен, маҡсатын таба алмай йүңкегәндәре лә күп. Уларҙың күбеһе осраҡлы һөнәргә эйә булып, күбеһе күңеленә ятҡан эш таба алмай, һаман үҙ асылын эҙләү юлында аҙашып йөрөй. Ә бит киләсәккә йүнәлеш, ғәҙәттә, бала, үҫмер саҡтан уҡ күңелгә төйнәлә. Тик бөгөн беҙҙең балалар тыуғандан башлап көнбайыш яғына йөҙ бороп үҫә: сит ил музыкаһы тыңлай, уларҙың фильмдарын ҡарай, уларҙың ризыҡтарын ашай, сит идеология йоғонтоһона бирелеп, шикле ойошмаларға ла барып эләгә. Билдәле режиссер Станислав Говорухин яңыраҡ бөгөнгө үҫмерҙәр хаҡында шулай тип әйткәйне: "Жан-Жак Руссо 250 йыл элек, цивилизацияның юғары формаһы ҡырағайлыҡҡа алып киләсәк, тип яҙған. Бөгөн беҙ ана шул күренештең шаһитыбыҙ ҙа инде. Террорсылар 16-18 йәшлек үҫмерҙәр булыуына иғтибар иттем. Бына шундай балалар үҫеп килә. Был Рәсәйҙә лә һиҙелә. Техник прогресс, компьютер, текә телефондар... Йәштәр тормош "энциклопедияһын" кеҫәләрендә генә йөрөтә хәҙер, ә баштарында хәтер ҙә, белем дә юҡ".

Указда әйтелеүенсә, бөгөн балалар һәм үҫмерҙәрҙең "Рәсәй йәмғиәтенә хас ҡиммәттәр нигеҙендә шәхес булып үҫеүенә йоғонтолоҡ итеү" төп маҡсат итеп ҡарала. Пионерия тураһында һүҙ ҙә юҡ әле, яңы проекттың маҡсаты бик дөйөм, ә барыбер был документ илдең үткәнен күрә алмаусы ҡайһы берәүҙәрҙең ҡотон осорҙо. "Улар яңы проект хаҡында ишеткәс, хафаға ҡалды: пионерияны хәтергә төшөрөү совет системаһын тергеҙеүгә аҙым булмаҫмы?" - тип яҙа "АиФ" күҙәтеүсеһе В. Костиков (№46). Әйткәндәй, автор үҙе лә ҡайһы бер совет традицияларының тормошобоҙға әйләнеп ҡайтыуына ҡырҡа ҡаршылығын белдереп, уны хәүефле күренеш тип атай һәм ни өсөндөр үҙенең быуат төпкөлөндә ҡалған батша империяһы заманының да вариҫы булыуын иҫенә төшөрә.

Кем әйтмешләй, бөтәбеҙ ҙә пионер, комсомол мәктәбен үткәнбеҙ, тик беребеҙ ҙә әрәм булманыҡ, ә әҙәм булдыҡ. Киләсәккә маҡсат ҡуйып йәшәнек, шуға өлгәшергә ынтылдыҡ. Әлеге абитуриенттарҙы алып ҡараһаң, ҡайҙа балл йыя ала, шунда инә лә, ошо уҡыуын тамамлағас, бөтөнләй икенсе профиль буйынса эшләп йөрөй. Дөрөҫөн әйткәндә, тамаҡ аҫырау өсөн генә эшләй улар. Совет идеологияһы, тиҙәр ҙә - ҡоттары оса. Идеология йоғонтоһо, сәйәсиләштереү тигән нәмә булманы түгел булды, ләкин идеологияһыҙ йәмғиәт буламы? Бер ниндәй ҙә идеология юҡ икән, тимәк, ул маңҡорттар һәм дә ҡулланыусылар төйәгенә әйләнәсәк бит. АҠШ йә булмаһа көнбайыш илдәре идеологияһыҙ ғына көн күреп ятамы ни әллә? Башҡа илдәрҙең эске эштәренә ҡыҫылыу, баҫып алыу, һуғыш асыу, йә булмаһа, тыныслыҡ өсөн көрәшеү, милләтара килешеп йәшәүгә өндәү, граждандарға етеш, матур тормош тәьмин итеү - былар барыһы ла ахыр сиктә ниндәйҙер кимәлдә барыбер шул уҡ идеология бит.

Совет идеологияһы беҙҙе аламалыҡҡа өйрәтте, тип әйтә алмаҫ инем. Ҡанәскес Сталин заманын иҫәпләмәгәндә. Шәхес культы әйләнеп ҡайтыр, тип ҡурҡалармы? Улай тиһәң, диктаторлыҡ социализм ҡоролошона ғына хас нәмә лә түгел (Гитлер, Муссолини кеүек палачтарҙы иҫләгеҙ). Социализмдың кешелекле, позитив тәжрибәләрен дә онотоорға хаҡыбыҙ юҡ. Һәр хәлдә, ул саҡта йәш быуынды хеҙмәтте һәм Ватаныбыҙҙы һөйөүсе, әхлаҡ кодекстарына ярашлы шәхес итеп тәрбиәләргә ынтылыш беренсе урында торҙо. Яңылыҡ - ул үткән тәжрибәләрҙең фәҡәт яҡшы яҡтарын ғына алыуҙа һәм уны артабан үҫтереүҙә лә кәүҙәләнә бит.

Рәсәй Президенты В. Путин 3 декабрҙә Федерация Советына Мөрәжәғәтнамәһендә тап шул турала бик асыҡ итеп әйтте лә: "...элекке пионерҙар һарайы, йәш техниктар эшендәге тәжрибәләрҙең иң һәйбәттәрен алырға һәм эште тамырынан яңыса, заманса нигеҙҙә, бизнес, юғары уҡыу йорттары ҡатнашлығында" ойошторорға ҡушты. Быныһы инде мәғариф һәм йәштәр эштәре буйынса чиновниктарҙың бурысы. Ҡулдарынан килерме - әйтеүе ҡыйын. Сәйнәп биргәнде генә көтөп ултыралар юғиһә. Өр- яңы проект уйлап сығарһындар, әйҙә: пионерҙы ла, комсомолды ла телгә алмаһындар, коммунизм төҙөргә лә саҡырмаһындар, тик был балалар һәм үҫмерҙәрҙе белемгә, изгелеккә, ижади хеҙмәткә әйҙәүсе, уларҙы илебеҙ патриоттары итеп тәрбиәләүсе хәрәкәт булһын һәм ул балаларҙы ҡыҙыҡтыра, үҙенә йәлеп итә алһын. Юғиһә, бөгөнгө баланы виртуаль донъя һәм компьютерҙан айырып алыуы бик ауырға төшәсәк. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*КӨНАУАЗ*

# НӘЖЕСКӘ БЫСРАҠ ЙОҠМАЙ

### "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары берлеге белдереүе

**Һуңғы йылдарҙа Рәсәй киң мәғлүмәт саралары, төрлө эксперттар, намыҫһыҙ сәйәсмәндәр тарафынан Әхмәтзәки Вәлиди, йәнәһе, фашистик Германия менән хеҙмәттәшлек иткән, тигән ҡотҡо таратыла. 2015 йылдың 5 декабрендә РЕН-ТВ телеканалынан күрһәтелгән "Военная тайна" тапшырыуында шулай уҡ ошо тема ҡуйыртылды.**

Тапшырыу өсөн сюжеттың яһалма рәүештә ҡоршап бирелеүе ябай тамашасыға ла аңлашылғандыр: ниндәйҙер документтарҙан өҙөктәр килтерелә, әммә архив эштәренә, фонд номерҙарына һылтанмалар юҡ. "Эксперттар" үҙҙәре генә һөйләй, дәлил булырҙай бер ниндәй документтар телгә алынмай. Беҙҙең уйыбыҙса, журналист был эшкә объектив ҡараһа, "Военная тайна" тапшырыуы авторҙары абруйлы тарихсыларға һәм белгестәргә мөрәжәғәт итер ине.

Оҙайлы йылдар дауамында Германия Федератив Республикаһында, Австрияла, Венгрияла, Финляндияла, АҠШ һәм Төркиәлә урынлашҡан архивтарҙы, шулай уҡ Мәскәүҙә һәм Ҡаҙанда ҡасандыр йәшерен булған документтарҙы өйрәнгән тарихсылар (тарих фәндәре кандидаты М.Н. Фархшатов (Өфө), тарих фәндәре докторы И.А. Ғиләжев (Ҡаҙан), Партик Цюр Мюлен (Германия), СССР КГБ-һы генерал-майоры Л. Соцковтың "Неизвестный сепаратизм. На службе СД и Абвера" (2003 й.) тип аталған монографияһы) башҡорт ғалимы-эмигрант Әхмәтзәки Вәлидиҙең фашистик Германия властары менән хеҙмәттәшлек уйҙырмаһын кире ҡаға. Быларҙан тыш, Ә. Вәлиди ҡайһы бер Рәсәй эмигранттары ошаҡлауы һөҙөмтәһендә гестапоның күҙ уңына бер нисә тапҡыр эләгә. Киң мәғлүмәт сараларында быға тиклем баҫылған "Әхмәтзәки Вәлидиҙең 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында СС рәттәрендә хеҙмәт итеүе, шулай уҡ Гитлерҙың консультанты булыуы, офицер дәрәжәһе алыуы, Тимер Тәре менән бүләкләнеүе тураһындағы фекерҙәр" бөтөнләй нигеҙһеҙ һәм уйлап сығарылған.

Башҡортостан Республикаһы буйынса Хәүефһеҙлек хеҙмәте федераль идаралығы етәксеһе Виктор Палагин мәғлүмәте буйынса, архив документтарында Әхмәтзәки Вәлидиҙең фашистар хәрәкәттәрендә ҡатнашыуы раҫланмай. Уның әйтеүенсә, Әхмәтзәки Вәлиди совет власына хәүеф менән янаһа, уны "нейтралләштерерҙәр ине, ә ундай мөмкинлектәр булған". Тимәк, бындай кеше ил етәкселегенә кәрәк булған һәм "уны ни өсөн һаҡлап ҡалдырыуҙарын асыу өсөн мәл етмәгән".

Ә.З. Вәлидиҙең шулай уҡ Рәсәй Федерацияһында тәүге автономиялы республикаға нигеҙ һалыусы икәнлеге бер кем тарафынан да кире ҡағыла алмай торған тарихи факт. Рәсәйҙә федерализм тап шунан башланып китә лә инде. Уның донъя күләмендә күренекле шәрҡиәтсе, Көнсығыш мосолмандары тарихы буйынса бик күп мөһим тәү сығанаҡтарҙы, шул иҫәптән "Ибн Фаҙландың юл яҙмалары"н беренсе булып асыусы, тарих, төркиәт буйынса нигеҙле хеҙмәттәр авторы булыуы ла бәхәсһеҙ.

"Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы" Халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары берлеге башҡорт халҡының лидерҙарына яла яғырға, тарихты боҙоп күрһәтергә маташыуҙарҙың барып сыҡмаясағы хаҡында бер нисә тапҡыр белдерҙе инде. Экрандарҙан ниндәй генә "эксперттар" хәбәр һатмаһын, улар Ә.З. Вәлиди кеүек бөйөк шәхестәрҙең тырнағына ла тормай. Башҡорт халҡы данлы тарихы, тәрән традициялары менән билдәле, һәм беҙ ата-бабаларыбыҙ васыятына тоғро буласаҡбыҙ. Бысраҡ материалдар авторҙары һәм уларға заказ биреүселәр, күрәһең, халҡыбыҙҙың һәм Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеген емерергә иҫәп тота йә булмаһа йәштәрҙе һәр төрлө провокацияларға этәрә. "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы" (конгресы) Халыҡ-ара йәмәғәт ойошмаһы һәр кемде тыныслыҡ һаҡларға, фәҡәт закон нигеҙендә эш алып барырға саҡыра.

**Әмир ИШЕМҒОЛОВ,**
**Ҡоролтай Башҡарма комитеты рәйесе, профессор, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан аграрийҙары сит ил ауыл хужалығы продукцияһын үҙебеҙҙекенә алмаштырыу буйынса эште әүҙемләштерә. Айырыуса теплицала йәшелсә үҫтереүселәрҙең эштәре һәйбәт бара. Туймазы районында берҙәм логистик үҙәк булдырыласаҡ, уның функцияларын "Туймазы" крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары ассоциацияһы ағзалары ойошторған кооператив үтәйәсәк. Туймазы продукцияһы әлеге көндә "Полушка", "Байрам", "Челны-хлеб", "Молния" сауҙа селтәрҙәрендә һатыла.

✓Физик мөмкинлектәре сикләнгән балалар һәм үҫмерҙәр тәрбиәләнгән ғаиләләр араһында "Быуын" II республика фестивале үтте. Сараны "Әсә йөрәге" төбәк йәмәғәт ойошмаһы үткәрҙе. Конкурста Өфө, Бәләбәй ҡалаларынан, Илеш, Миәкә, Нуриман һәм Әлшәй райондарынан алты ғаилә ҡатнашты. Һәр командала - бер юлы өс быуын вәкиле бар ине. Театр фойеһында шәжәрә күргәҙмәһе ойошторолдо, ҡатнашыусылар ғаилә йолалары, йәшәйештәре хаҡында һөйләне, жюри ағзаларын милли ризыҡтар менән һыйланы.

✓Башҡортостанда дарыуҙар, тәмәке һәм кейем-һалым ҡимммәтләнгән. Йылдың 11 айы йомғаҡтары буйынса инфляция кимәле 2014 йылғы күрһәткестән 1,6 процентҡа юғарыраҡ. Был аҙыҡ-түлек тип һаналмаған тауарҙарға хаҡтарҙың тиҙ артыуына бәйле. Дарыуҙарға, таҙартыу сараларына, алтын биҙәүестәргә, тәмәкегә хаҡтар 1,2-1,3 тапҡырға, электр тауарҙарының ҡайһы бер төрҙәренә - 15,1-37,8, кейем-һалымға, аяҡ кейемдәренә 11,1-27,1 процентҡа күтәрелгән. 2015 йылдың ноябрендә аҙыҡ-түлек тип һаналмаған тауарҙарға хаҡтарҙың артыуы уҙған айҙың кимәленә тап килгән (0,6 һәм 0,8 процент).

✓Башҡорт дәүләт филармонияһының фойеһы бер көнгә Шүлгәнташ мәмерйәһенә, тамашалар залы тирмәгә әүереләсәк, тип хәбәр иттеләр ойошманың матбуғат хеҙмәтендә. 17 декабрҙә бында "Урал батыр төнө" тип аталған ҙур этнобайрам уҙғарыла. Проект "Урал батыр" эпосына нигеҙләнгән. Иң яҡшы профессиональ һәм үҙешмәкәр коллективтар, солистар үҙҙәренең һәләтен күрһәтәсәк. Улар араһында "Арғымаҡ", "Әссәләм", "Ятаған" төркөмдәре, Рәмил Ғәйзуллин етәкселегендәге Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры, Башҡортостандың йәштәр симфоник оркестры бар.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТЕЛ ТУРАҺЫНДА...

## етди һөйләшеү булды

**Үткән аҙнала Өфөлә Халыҡ-ара Евразия гуманистик форумы үтте. Был сара фән, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү, Евразия киңлеге контексында мәғрифәтселек идеяларын популярлаштырыу, гуманитар өлкәлә уртаҡ фәнни-тикшеренеү программаларын һәм проекттарын тормошҡа ашырыу, студенттарҙы, йәш ғалимдарҙы Евразияның тарихын, мәғарифын һәм мәғрифәтселек йолаларын өйрәнеүгә йәлеп итеүгә йүнәлтелгән.**

Форум сиктәрендә уртаҡ идеология менән берләшкән ҙур бер нисә сара ойошторолдо. Өфө ҡала округы хакимиәтендә лә телдәр сәйәсәтенә арналған бәхәс ҡоро эшләне. Унда ҡала хакимиәте, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вәкилдәре, республикабыҙҙың фән, мәғариф өлкәһе хеҙмәткәрҙәре һәм Саха, Мордовия, Сыуашстан республикаларынан саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты.

"Мәҙәни аралашыу контексында тел сәйәсәте" тип аталған түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыусылар бөтөн халыҡтар өсөн дә уртаҡ булған проблемалар тураһында фекер алышты. Күрше республика вәкилдәре үҙ дәүләттәрендәге тел сәйәсәте тураһында ла һөйләне. Башҡортостанда һәм шул иҫәптән Өфөлә башҡарылған эштәр менән Өфөнөң Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисаметдинова таныштырҙы. Сығышында ғалимә Рәсәйҙә йәшәгән милләттәрҙең телдәрен үҫтереү, һаҡлау буйынса федераль законлдарға үҙгәрештәр индереү зарурлығын билдәләне. Уның сығышының тос өлөшө башҡорт теленең бөгөнгө хәленә арналды. Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы башҡорт теленең ҡулланыу даирәһе өсөн борсолоуын йәшермәне.

М. Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры, педагогика фәндәре докторы Рәйсә Ғәбәйҙулла ҡыҙы Дәүләтбаева башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға ҡағылышлы тәҡдимдәре менән уртаҡлашты. Уның телмәрендә дәүләт телдәрен уҡытыуҙың дөйөм концепцияһы яңғыраны, тиһәк тә хата булмаç. "Тәү сиратта дәреслектәрҙе башҡорт теле буйынса докторлыҡ диссертациялары яҡлаған методист-ғалимдар төҙөргә тейеш. Ул дәреслектәр ҡыҙыҡлы булырға тейеш. Уҡытыусылар ҙа дәрестәрҙе төрлө ҡыҙыҡтырғыс алымдар менән уҙғарырға бурыслы. Шул саҡта ғына телде дәүләт теле булараҡ өйрәнергә теләүселәр һаны артасаҡ", - тине абруйлы педагог. Ул шулай уҡ: "Һеҙҙә башҡорттар бармы ул? Һеҙ үҙ сығышығыҙҙа башҡорт телен уҡытыу буйынса ниндәй эштәр атҡарылыуы тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәнегеҙ", - тигән һорау бирҙе күрше республикаларҙың береһенән килгән вәкилгә. Ҡунаҡ уға яуап итеп республикала башҡорттар барлығын әйтеүҙе генә кәрәкле тапты.

Был кәңәшмәлә Башҡортостандың, Өфөнөң тел сәйәсәтен атҡарыу буйынса Рәсәйҙә алдынғылар рәтендә булыуы, хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләр иһә тотош Рәсәй өсөн хас булыуы билдәләнде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ВӘКӘЛӘТТӘР БҮЛЕНДЕ



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Хөкүмәтендә бурыстарҙы билдәләү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, республика Башлығы Башҡортостан Хөкүмәте эшмәкәрлегенә етәкселек итә, Рәсәйҙең башҡарма власть органдары менән мөнәсәбәттәрҙә, Рәсәй төбәктәре, шулай уҡ тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙә Хөкүмәт исеменән сығыш яһай, хөкүмәт-ара килешеүҙәр төҙөй. Башҡортостан Хөкүмәте вәкәләттәре сиктәрендә Рөстәм Хәмитов Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы, Рәсәйҙең Оборона министрлығы ойошмалары, Рәсәй Юстиция министрлығының Башҡортостан буйынса идаралығы, Рәсәй Граждандар оборонаһы эштәре, ғәҙәттән тыш хәлдәр һәм бәлә-ҡазалар эҙемтәһен бөтөрөү буйынса министрлығының баш идаралығы, Рәсәй Федераль имендек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы, Рәсәй Наркотиктар әйләнешенә контроль буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы, Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы, Федераль таможня хеҙмәтенең Башҡортостан таможняһы, Рәсәй Сит ил эштәре министрлығының Өфөләге вәкиллеге, Рәсәй Тәфтиш комитетының Башҡортостан буйынса идаралығы, Суд департаментының Башҡортостандағы идаралығы эшмәкәрлегенә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә ҡарай. Төбәк Башлығы судтар һәм прокуратура органдары менән үҙ-ара килешеп эш итә, шулай уҡ Башҡортостан ҡануниәтендә билдәләнгән башҡа вәкәләттәрҙе тормошҡа ашыра. Бынан тыш, республика етәксеһенең бурыстары исемлегенә Башҡортостанда мобилизация әҙерлегенә һәм мобилизацияға етәкселек итеү өҫтәлде.

# МӘСКӘҮҘӘ КҮРҺӘТЕЛДЕ



**Рәсәй Халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһында Бөтә Рәсәй Иң яҡшы муниципаль тәжрибәләр конкурсы сиктәрендә "Граждандарҙы урындағы үҙидаралыҡҡа йәлеп итеү: көнүҙәк муниципаль тәжрибә" форумы үтте.**

Сарала Өфөлә тормошҡа ашырылған башҡа проекттар менән бер рәттән "Яңы тыуған балаларҙан баш тартыуҙы профилактикалау" тәжрибәһе лә тәҡдим ителде. 2013 йылдың майында Өфө ҡала округы хакимиәте Социаль етемлекте иҫкәртеү фонды менән ҡала территорияһында социаль етемлекте иҫкәртеүҙең комплекслы моделен индереү тураһында килешеү төҙөлә. Уға ярашлы, ғаиләлә имендек булмауын һәм бала хоҡуҡтары боҙолоуҙы иртә стадияла асыҡлауҫы яңы технологиялар индерелә. Бөгөн баш ҡалала ата-әсәләр ҡарауынан мәхрүм ҡалған һәм махсус учреждениеларға урынлаштырылған балаларҙы үҙ ғаиләләренә ҡайтарыу күренеше арта (2013 йылда - 55 бала, 2014 - 84, 2015 - 75). 15 ғаилә менән (24 бала) балаларҙы интернаттарҙан ҡайтарыу буйынса эш башланған.

Статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, социаль етемлектең дөйөм статистикаһында яңы тыуған балаларҙан баш тартыу билдәле бер урын алып тора. Рәсәйҙә йыл һайын бала табыу йорттарында 6000 бала ҡалдырыла. Был тема илдең барлыҡ төбәктәре өсөн дә көнүҙәк. Былтыр майҙа Өфөлә "Саторис" психология-педагогик үҙәк базаһында яңы тыуған балаларҙан баш тартыуҙы булдырмау буйынса берҙәм ҡала хеҙмәте ойошторолa. Ул башҡа ҡыҙыҡһыныусы хеҙмәттәр, коммерция булмаған мәрхәмәтлек фондтары менән бер төптән эшләй һәм шуға ла һөҙөмтәләр ҙә ҡыуандыра: яңы тыуған балаларҙан баш тартыу кәмей, был күренеште иҫкәртеү һаны арта. Быйыл баш тартыуҙарҙан иҫкәртеү 2013 йыл менән сағыштырғанда 25 процентҡа артып, 65 процентҡа еткән.

# АТАЙҘАР КӘҢӘШ ҠОРҘО



**Дим районында "Орион" балалар-үсмерҙәр ижады йортонда Атайҙарҙың төбәк-ара конференцияһы уҙҙы.**

Унда атайҙар ғына түгел, ғаилә мәсьәләләре буйынса бөтөн илдән килгән белгестәр ҙә ҡатнашты. Бындай ҙур күләмле сара Аңлы рәүештә ата-әсә булыу мәктәбе сиктәрендә беренсе тапҡыр ойошторолa. Дим районы хакимиәте инициативаһы буйынса был мәктәп халыҡҡа ғаилә проблемаларын хәл итеүҙә ярҙам ҡулы һуҙып, 15 йыл эшләй. Бының өсөн дүрт: атайҙарға, әсәйҙәргә, буласаҡ әсәйҙәргә һәм йәш ғаиләләргә диалог майҙансығы булдырылған. Һәр кем ҡатнаша алған сара консультациялар форматында үтә, белгестәр ата-әсәләргә кәңәштәр бирә.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында үткәрелгән конференцияла халыҡтың мәғлүмәткә һыуһауы асыҡлана һәм бындай сара йыл һайын ойошторолa. Мәктәптең 15 йыллыҡ эшмәкәрлеге осоронда барлығы 200 осрашыу үткәрелгән. Дөйөм алғанда республикала айырылышыуҙар күләме 52 процент булһа, Дим районында был һан - 39.

# ӘҘӘБИӘТ ЙЫЛЫН ЙОМҒАҠЛАП




**Илебеҙҙә тамамланып барған йыл Әҙәбиәт йылы булараҡ тарихта ҡаласаҡ. Уны матур ҙа, үҙенсәлекле лә итеп оҙатыу маҡсатында Өфө ҡала хакимиәте 16 декабрҙә сәғәт 4-тә Ҡала мәҙәниәт йортонда үҙенсәлекле "Һөҡланғыс биттәрҙе аҫҡанда..." тип аталған сара ойоштора.**

Әҙәбиәт йылын уҙғарыу юҡтан ғына килеп тыуманы, ул йәмғиәттең иғтибарын әҙәбиәткә һәм китап уҡыуға йәлеп итте. Йыл дауамында яҙыусылар, нәшриәтселәр, китап магазиндары, китапханалар, мәғариф учреждениелары төрлө тематик саралар менән ҡыуандырып торҙо. Әҙәбиәт йылын оҙатыуҙа ла төп урында китап һәм китап уҡыусы торасаҡ. Мәҙәниәт йортоноң беренсе ҡатында яңы китаптар күргәҙмәһе ойоштороласаҡ, шулай уҡ "Китап уҡыусы Өфө" фотокүргәҙмәһе урын аласаҡ. Икенсе ҡатта "Мәңгелек китаптар" тематик майҙансыҡтары урынлашасаҡ. Һәр күргәҙмә театрлаштырылған тамаша менән оҙатыласаҡ. Йәш Өфө шағирҙары "Шиғри микрофон" тип аталған майҙансыҡта үҙҙәренең шиғырҙарын уҡыясаҡ, ә билдәле шағирҙар һәм яҙыусылар автографтар бирәсәк.

Төп ваҡиғалар Ҡала мәҙәниәт йорто сәхнәһендә барасаҡ. Тамашасыларға Әҙәбиәт йылының иң яҡшы һәм әһәмиәтле мәлдәре күрһәтеләсәк. Бынан тыш, республика марафонының символы - Йылъяҙма китабы Башҡортостандың Әҙәбиәт музейына һаҡлауға тапшырыласаҡ.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Киләһе йылда Өфөнөң Ҡулса урамында тротуарҙар төҙөкләндереләсәк. Тендер документтары буйынса ремонт Ҡулса урамының Тыныслыҡ урамынан алып Александр Невский урамына тиклемге участкала планлаштырылған. Тыныслыҡ урамынан алып Ульяновтар урамына тиклемге участкала - таҡ яҡ, Рыбаков урамынан Боткин урамына тиклем йоп яҡ, Боткиндан А. Невский урамына тиклем ике яҡ та яңыртыласаҡ.

✓18 декабрҙә Өфөлә сәсәнлек сәнғәте буйынса республика семинары үтә. Уның сиктәрендә сәсәниә Асия Ғәйнуллина башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары костюмының бер өлөшө - һаҡал эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрә. Ҡобайыр әйтеү, өҙләү нигеҙҙәренә, ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнергә була, шулай уҡ этно төркөмдәр сығышы ҡаралған. Сара Кустарная урамы, 17 адресы буйынса үтә.

✓Башҡортостандан 114 уҡыусы Дәүләт Кремль Һарайында үтәсәк дөйөм Рәсәй Яңы йыл байрамында ҡатнашасаҡ. Делегация уҡыу алдынғылары, бәйгеләр, олипиадалар еңеүселәре, спортсылар, балалар йорто һәм интернаттары тәрбиәләнеүселәренән тора. БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, уҡыусылар өсөн экскурсия ла ҡаралған.

✓Республиканың 10 йәш эшҡыуары 250 мең һум күләмендәге грантҡа лайыҡ булды. 5 бәйгесе 95 мең һум күләмендә ярҙам аласаҡ. Грант "Һин - эшҡыуар" федераль программаһының йомғаҡлау форумында тапшырылды. Унда Өфөнән, Нефтекаманан, Салауаттан, Стәрлетамаҡтан, Ҡырмыҫҡалынан, Бөрйәндән, Сибайҙан 200 йәш эшҡыуар ҡатнашты. "Һин - эшҡыуар" программаһы республикала 2011 йылдан эшләй.

✓Башҡортостанда Яңы йыл каникулдары мәлендә республика территорияһы буйлап экскурсия программалары, туристик турҙар төҙөлдө. Туристарға Ишембай районында урынлашҡан Ҡыш Бабайҙың тирмәһенә сәйәхәт, шулай уҡ һыбай, сана маршруттары, Өфө һәм Ишембай ҡалалары буйлап, тауҙар һәм мәмерйәләргә экскурсиялар тәҡдим ителә. Өфөнән Ҡыш Бабайҙың тирмәһенә экскурсия мең һум тирәһе торасаҡ, унда төшкө аш һәм мәҙәни программа ла инә. Башҡортостан буйлап өс көнлөк тур яҡынса 10 мең, биш көнлөк тур 13-14 мең тора.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ТӘНҠИТЛӘП ЙӨРӨГӘНСЕ...

## тот та үҙең эшлә!

**IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында йәштәр ҙә бик әүҙем ҡатнашты. Уларға ниндәй уй-ниәттәр менән янып йәшәүе, үҙҙәре ниндәй эштәр башҡарыуы, өлкән быуынға мөнәсәбәте тураһындағы һорауҙарыбыҙҙы төбәнек һәм ошондай яуаптар алдыҡ.**



***Вадим АБДУЛЛИН, "Салауат" башҡорт йәмәғәт ойошмаһы рәйесе, Магнитогорск ҡалаһы:*** Тураһын әйткәндә, ололарҙың эш эшләгәндәге һөлпәнлеге оҡшамай миңә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, отчет биргәндә, шуны эшләнек, быны эшләнек, тип шаштырып һөйләргә яраталар, тик башҡарған ғәмәлдәре артыҡ күренмәй. Улар йәш саҡтарында беҙҙән кеүек әүҙем булғандар ҙа, бәлки, әммә ғаилә, эш менән баҫылып, ҡыҙыҡһыныуҙары үҙгәргәндер, тип уйлайым. Шуға күрә, Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе башҡорт йәштәрен туплап, үҙебеҙ айырым Йәштәр ҡоролтайына берләштек. Ойошмабыҙҙа тик йәштәр генә, ололарҙың кәңәштәренә ҡолаҡ һалабыҙ ҙа, үҙебеҙсә эшләйбеҙ. Эште мәҙәни саралар үткәреүҙән башланыҡ. Башҡортса концерттар, айыҡ дискотекалар уҙғарҙыҡ, телгән кешеләр өсөн ҡурай һәм бейеү түңәрәктәре асып ебәрҙек. Артабан йәштәрҙе сәләмәт йәшәү рәүешенә әйҙәп волейбол, боулинг, йүгереү буйынса ярыштар үткәреүҙе яйға һалдыҡ. Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса акцияларҙа даими ҡатнашып торабыҙ.

Урыҫ ҡалаһында тыуып үҫкән башҡорттарға туған телде өйрәтеү өсөн Магнитогорск ҡалаһының "Халыҡтар дуҫлығы йорто" етәксеһе Зөлфирә Зиннәт ҡыҙы менән һөйләшеп, дәрестәр үткәрҙек. Быға тиклем үҙенең ниндәй милләттән булыуына артыҡ әһәмиәт бирмәй, ҡул һелтәп йөрөгән йәштәр, дәртләнеп, әүҙемләшеп киттеләр. Бөгөн улар беҙгә яңы тәҡдимдәр менән килеп, һәр эштә ихлас ҡатнашып йәшәй. Йәштәрҙең тарихи уҙаңын үҫтереү мөһим. Сөнки Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе йәштәр уның боронғо башҡорт ерендә урынлашыуын белмәгәнлектән, үҙҙәрен сит милләттәр араһында иркен тотмай. Хатта ололар ҙа Урал йылғаһының боронғо атамаһы Яйыҡ булыуын белеп етмәй. Шуға күрә, Салауат Хәмиҙуллинды саҡырып, ошо төбәк тарихына арнап, форум үткәрҙек. "Башҡорттар араһында Ислам дине" темаһына ла форум ойоштарҙоҡ. "Салауат" башҡорт йәмәғәт ойошмаһы оло йәштәге милләтташтәр тураһында ла онотмай, күптән түгел улар өсөн Радик Вәлмөхәмәтовты саҡырып, концерт ойоштарҙоҡ. Силәбе ҡалаһынан төрлө гәзиттәр яҙҙырып алып, ололарға таратып сығабыҙ.

***Ләйсән СОЛТАНҒОЛОВА, Баймаҡ халыҡ ижады үҙәге художество етәксеһе:*** Халҡыма хеҙмәтем минең башҡорт телендә һөйләшеүемдән башлана, тип уйлайым. Дуҫтарым, туғандарым балаларын башҡорт класына уҡырға бирһен өсөн аңлатыу эштәре алып барам. Сөнки үҙем дә башҡорт класында белем алдым, юғары уҡыу йортон тамамланым. Сәхнә өсөн сценарийҙар яҙғанда, концерт һәм төрлө байрамдар ойошторғанда уларға рух, халыҡсанлыҡ һалырға тырышам. Халҡым өсөн ниндәйҙер зур эштәр башҡарҙым, тип әйтә алмайым. Шулай ҙа, "Мин - башҡорт", тип ҡысҡырып йөрөгәнсе, көндәлек тормошта, үҙ урынында яйлап ҡына ниндәйҙер эштәр башҡарып, үҙенде халҡыңдың лайыҡлы ҡыҙы итеп күрһәтеп йәшәү дөрөҫөрәктер. Ә оло быуын кешеләренә мөнәсәбәткә килгәндә, уларҙың бер ҡылығы менән генә килешмәйем. Ул да булһа, киләсәк йәштәр ҡулында, тип һөйләп тә, уларға тейешле эш урындарын буштатырға ашығып бармауҙары оҡшамай. Киләсәк йәштәр ҡулында түгел, бөгөнгө көн йәштәр ҡулында. Шуға күрә, ошондай йыйындарға ла йәштәрҙе күберәк ылыҡтыуҙарын теләр инем. Бер-беребеҙҙе күреп-белеп, аралашып, кәңәшләшеп йәшәр инек.

***Айгөл ХАФИЗОВА, "Башҡортостан Республикаһының Йәш яҡташтар берлектәре ассоциацияһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе:*** Ололарҙан низер талап итер һәм уларҙың кәмселектәрен тикшереҙән алда, халҡыбыҙҙың тарихи үткәнен өйрәнеп, тәүҙә үҙебеҙҙең кемлекте асыҡлап алырға кәрәк. Беҙҙең йәштәргә милләт мәнфәғәтендә эштәр эшләү, ниндәйҙер үрҙәр яулау, белемен камиллаштырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Пикеттар үткәреү, талаптар ҡуйыу заманы түгел хәҙер, буштан-бушҡа тамаҡ йыртып, ҡысҡырып йөрөүҙән файҙа юҡ. Беҙҙең йәштәр һәр яҡлап үҙен үҫтерергә, ғилемле, зыялы булырға һәм аҡыл менән уйлап эш итергә тейеш.

Беҙҙең төбәк йәмәғәт ойошмаһына килгән милләттәштәргә лә ошо талапты ҡуябыҙ. Баш ҡалаға уҡырға килгән ауыл егеттәре-ҡыҙҙары ваҡытын бушҡа уҙғармай, дәрт-дарманын ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөмәһен өсөн уларҙы үҙебеҙҙең эшкә ылыҡтырырға, дөрөҫ йүнәлеш бирергә тырышабыҙ. Был маҡсатта йәштәргә төрлө спорт ярыштары, мәҙәни саралар, форумдар үткәрәбеҙ. Күреүегеҙсә, төрлө райондарҙан килгән йәштәргә бер-береһе менән танышып, фекер алышып һәм берләшеп, ниндәйҙер үҙ проекттарын тормошҡа ашырыу өсөн ҡулайлы майҙансыҡ булдырғанбыҙ. Әйткәндәй, хәҙер йәштәр бизнес, үҙаллы үҫеш, практик әһәмиәте юғары булған кәңәшмәләрҙә, ултырыштарҙа әүҙем ҡатнаша. Ойошма ошоно иҫәпкә алып эшләй. Быйыл Баймаҡ районында I Башҡорт этнофорумын үткәрҙек. Ҡатнашыусылар башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, йолалары өйрәнеп, төрлө эшҡыуарҙар, билдәле шәхестәр үткәргән оҫталыҡ дәрестәрендә фекер алышып, тәжрибә туплап ҡайтты. Әйткәндәй, бөтә ерҙә лә йәштәр йәмәғәт ойошмаларының яҡшы ниәттә ҡоролған пландарын тормошҡа ашырыу өсөн һәр яҡлап ярҙам итергә әҙер торалар. Тик мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алып, көрсөк заманында йәшәүебеҙҙе иҫтән сығармай, реаль проекттар тәҡдим итеү мөһим.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

## ЕТЕ РАЙОН

**Дим районы.** Башҡорт гимназияһында Ватан ҡаһармандары көнөнә бағышланған "Ҡаһарманлыҡ дәресе" үтте. Сарала Дим районы Ветерандар советы рәйесе, граждандар авиацияһы ветераны Ришат Туғыҙбаев, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Кәшиф Ғиниәтов һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты. Улар үҙ сығыштарында хәрби биографияларының ҡаһарманлыҡ биттәре хаҡында һөйләне, уҡыусыларҙы, кеше тормошонда ҡаһарманлыҡҡа урын бар икән, тимәк, батырҙар ҙа буласаҡ, Ватан ҡаһармандары көнөнөң билдәләнеүе лә юҡҡа түгел, тигән һығымтаға килергә булышлыҡ итте.

**Киров районы.** Райондың һәләтле моделдәре "Өфө уттары" күнел асыу комплексында үткән балалар модаһы фестивалендә ҡатнашты. Унда республиканың мода театры, дизайнерҙар, кейем студиялары, ижади оҫтаханалар һәм модель агентлыҡтары үҙ коллекцияларын күрһәтте. "Ровесник" үҫмерҙәр клубының "Fashion Kids" мода һәм матурлыҡ студияһы "Палитра" номинацияһында "Барби стилендә" тип аталған коллекцияһын тәҡдим итте.

**Совет районы.** Өфө ҡалаһы ҡоштарының атлаһын эшләүсе активистар төркөмө Урмансылар паркында теләүселәр өсөн экскурсия ойоштороҙо. Унда 12 кеше ҡатнашты һәм билдәләнгән квадраттар буйынса 3 километр үтеп, ҡоштарҙы иҫәпкә алыу методикаһы менән танышты, Башҡортостанда ҡышлаусы 15 төр ҡошто күҙәтте һәм уларҙың тауышын тыңланы. Бөгөнгә был проектта ҡатнашырға 17 кеше теләк белдергән, уларҙың 4-һе -профессиональ орнитолог.

**Ленин районы.** 39-сы гимназияла 6-сы синыф уҡыусылары "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмғиәт хәрәкәте етәксеһе Роберт Дәүләтшин менән осрашыу үткәреп, алкоголь ҡулланыуҙың зарары һәм сәләмәт тормош алып барыуҙың өҫтөнлөктәре тураһында лекция тыңланы. Бөтә донъя Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, донъя буйынса алкоголь йыл һайын 6 миллион кешенең ғүмерен өҙә. Лекциянан һуң үҫмерҙәр документаль фильм ҡараны һәм ирекмән-воркауттарҙың күрһәтмә сығыштары менән танышты.

**Октябрь районы.** Грек-рим көрәше һәм милли көрәш спорт мәктәбендә милли һәм халыҡ спорт уйындары төрҙәре фестивале үтте. Унда райондың 5 уҡыу йортонан 50-нән ашыу студент ҡатнашты. Программаға армспорт, гер спорты һәм көрәш индерелгәйне.

**Орджоникидзе районы.** "Өфө" футбол командаһы "Нефтсе" спорт комплексында мини-футбол буйынса турнир уҙғарҙы. Унда "Өфө" ҡатын-ҡыҙҙар командаһы, фанаттар, БР-ҙың Футбол ветерандары, "Өфө" ФК мәктәбе тренерҙарының йыйылма командаһы ҡатнашты. Шулай уҡ стадиондың төп майҙанында "Өфө"ФК-һы етәкселеге һәм БР Хөкүмәте командаһы "Башнефть" АНК халыҡ акционерҙар йәмғиәте командаһы менән осрашты.

**Калинин районы.** "Виктория" балалар-үҫмерҙәр үҙәгендә "Бергәләп уҡыйбыҙ" тип аталған әҙәби фестиваль үтте. Ижади берекмәләр Рәсәй яҙыусыларының билдәле әҫәрҙәрен сәхнәләштерҙе, Сергей Есениндың хәтер кисәһен үткәрҙе, үҙҙәренең ижад емештәре менән таныштырҙы. Шулай уҡ балалан әкиәттәре, шиғырҙары буйынса төшөрөлгән, әҙәби әҫәрҙәрҙең персонаждары һүрәтләнгән рәсемдәр күргәҙмәһе лә ойошторолдо.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үпкәгә һалҡын тейһә…

❖ Йылдың һәр миҙгелендә лә үпкәгә һалҡын тейеп бара, хатта пневмония - үпкә шешеүенә килтерә. Шул саҡта 200 грамм алоэ япрағын иҙеп, шуға 1 балғалаҡ тоҙ һалып, һәйбәтләп болғатырға һәм һалҡын ҡаранғы урында 12 сәғәт тәнәтергә. Ошо ҡатнашманы ашарҙан 1 сәғәт алда көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Дауаланыу, ғәҙәттә, 2-3 тәүлек дауам итә. Алоэ менән дауаланғанда бал менән массаж яһау ҙа файҙалы. 1 ҡалаҡ самаһы балды ике усҡа һөртөп, арҡаға устарҙы ҡуйырға һәм тартып алғандай хәрәкәттәр яһарға һәм һәйбәтләп уранып ятырға.

### Бутҡа аша

❖ Тары бутҡаһы - йөрәк ауырыулы кешеләр өсөн иң файҙалы дарыу.

Сөнки тары калий элементына бай, ә был йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта. Дауаланғанда тары бутҡаһын һыуҙа бешерергә кәрәк.

### Осҡолоҡ

❖ Осҡолоҡтоң (сиҡаҡлау) үҙенең сәбәптәре лә бар, мәҫәлән, күп көлһәң, ауыҙ гел асыҡ йөрөһә, аҙаҡтан осҡолоҡ тота. Был мәлдә телгә һеркәле горчица (горчица) ҡатнашмаһы һөртөргә һәм 4 минуттан ауыҙҙы сайҡатырға.

### Бутҡанан компресс

❖ Йүтәл башланһа, киҙеү менән ауырыу хәүефе булһа, бурттерелгән бойҙай, арпа ярмаһынан ҡуйы итеп бешерелгән бутҡаны дуртҡә бөкләнгән таҫтамалға һыларға ла, 2-3 сәғәткә күкрәккә ҡуйырға. Төнгөлөккә ҡалдырһаң да була.

### Баш мейеһе тамырҙары

❖ Анар (гранат) һуты эсегеҙ, яҡшы ярҙам итә. Шулай уҡ балан, мышарҙы йышыраҡ ашарға, алма, кишер һутын эсергә кәрәк.

### Үт ҡыуыу

❖ Бауыр һәм үт ҡыуығы юлдары ауырыуҙарынан: ярты литр алма һутына 3 ҡалаҡ бал өҫтәп, 1 ай дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Һуңынан ял итеп алығыҙ һәм тағы ла ҡабатлағыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✔ *Икенсе бер осраҡта Айгиз: - Был ат башҡортмо? - тип тә һорағайны. Тимәк, ул был донъяла милләттәрҙең булыуын, үҙенең башҡорт икәнен дүрт йәшендә белеп тә алған. Хәҙер был өлкәләге мәғлүмәтен арттырыу өҫтөндә "эшләй".*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺОМАЙ... аҡҡош культына бәйле

**Башҡорттарҙа аҡҡош культы Һомайҙы хөрмәтләү менән бәйле. Халыҡ ижадында Һомай мифик ҡош булараҡ һүрәтләнә. "Урал батыр" эпосында Һомай - ҡоштар батшаһы Самрау менән Ҡояштың ҡыҙы, ул аҡҡошҡа ла, һылыу ҡыҙға ла әйләнә ала.**

Һомай ерҙә лә, әсәһе эргәһендә күктә лә йәшәй ала. Бер ваҡыт ул аҡҡош кейемендә "донъя күрергә" осоп сығып китә. Әммә Урал, уның өлкән ағаһы Шүлгән һәм уларҙың ата-әсәләре тарафынан ҡоролған ауға эләгә. Һунарсылар башын сабырға йыйынғанда ул кешесә һөйләшеп, уларға өндәшкән:

*"Илһеҙ етем түгелмен.*
*Ерҙә һис кем тыумаҫтан,*
*Берәү аяҡ баҫмаҫтан,*
*Ҡуш булырға йәр эҙләп,*
*Ерҙә һис кем тапмағас...*
*Күккә осоп йәр эҙләп,*
*Айҙы, Ҡояшты күҙләп,*
*Үҙенә йәр һайлаған,*
*Икеһен дә арбаған,*
*Бар ҡоштарға баш булған,*
*Самрау атлы атам бар...*
*Ҡояш тигән әсәм бар...*
*Һомай тигән ҡыҙымын".*

Аҡҡош үҙен иреккә ебәреүҙәрен һораған. Етмәһә, уның ите ашарға яраҡһыҙ, әсәһе Ҡояш уны сабый сағында Йәншишмәнең һыуында йыуған икән. Һомай Йәншишмәгә юлды күрһәтергә лә вәғәҙә бирә, тик аҡҡоштар осоп килеп, уны алып китеп бара.

Һомай-аҡҡош - Хоҙай ҡошо. Ул Ҡояш һәм соляр алла Самрауҙың ҡыҙы ғына түгел, үҙе лә ҡояшты һынландыра. Был хаҡта түбәндәге юлдар белдерә:

*"...Алтын сәсем таратһам,*
*Нурға илде күмәмен,*
*Көндеҙ ергә нур һибәм,*
*Кисен айға нур бирәм".*

Һомайҙың ҡояш асылы Зәркүмдең ҡыҙҙы йәтоу эпизодында ла күренә:

*Зәркүм ҡыҙын ҡарпыған,*
*Күктә ҡояш тотолған...*
*Һомайҙың да юҡлығын,*
*Барыһы ла аңлаған.*

Боронғо ышаныу буйынса, уның ут булып һауанан осоп барғанын күргән кеше бәхетле була. Бында ла Һомайҙы ҡояш һәм утҡа оҡшатыу күренеше ята.

"Урал батыр" эпосында Һомай әүҙем персонаж. Ул атаһының иленең хужаһы, имәнес иблиси заттар менән көрәшә: ерҙе шылдырып, упҡын булдыра, унда Шүлгән менән Зәркүмде ташлай. Шүлгән менән Зәркүм унан сығып килгәндә уның ҡарары менән упҡын һыу менән тула. Йәғни, Һомай ерҙе ярыу, космик масштабта туфан һыуы ҡалҡытыу (кешеләрҙең файҙаһына) көсөнә эйә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТАЙ ҺҮҘЕ

**Ата-әсә өсөн сабый баланы бағыу, уны тәпәй баҫтырып, кеше араһына сығарыу мәле татлы ла, үтә йонсоткос та. Тамағын хәстәрләү, аҫтын бер туктауһыҙ ҡоротоп алыу, тәнен һылап тороу, йоҡоһоҙ төндәр, ҡабатланып торған сырхауға ҡаршы көрәш - ата-әсәнән сабырлыҡ талап иткән, бер нисә йылға һуҙылған көндәлек бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәр. Баланың йылмайыуы, ятҡан урынынан аяҡ-ҡулын сабыулап талпыныуы, тәпәй баҫып китеүе, тәүге һүҙе, һөйләшә башлауы - былар инде шул ыҙаларың өсөн мул бүләк, йәненә ягылған бал һәм май. Мин үҙебеҙгә һәм уландарыма тағы бер бүләк эшләгәнмен: балаларымдың шул ҡабатланмаҫ бала сағының ҡайһы бер мәлдәрен ҡағыҙға теркәп барғанмын. Шул яҙмаларымдан өҙөк тәҡдим итмәксе булдым әле "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар иғтибарына.**

# УЛАНДАР ТӘРБИӘҺЕ ТУРАҺЫНДА ҺӘМ...



## ул турала ғына ла түгел

### Һүгенеү насар ҙа бит...

Бер көн балалар баҡсаһынан ҡайтып килгәндә, Айгиз әңгәмә башланы:

- Атай, беҙ бөгөн Илшат менән хәбәр һөйләштек (хәбәр һөйләшеү Айгиздең телендә һүгенеү һүҙҙәрен аңлата).

- Хәбәр һөйләшергә ярамай бит, тәрбиәсе апайың ишетһә, әрләй, - тим.

- Беҙ йәшенеп кенә һөйләштек, - ти улым.

Ысынбарлыҡ баланы үҙе теләгәнсә әүәләй шул инде. Һүгенеү һүҙҙәрен Айгиз менән Илшат үҙҙәре уйлап сығармаған, әлбиттә. Ҡайҙандыр ишеткәндәр, отоп алғандар.

Бала һүҙ байлығын үҙенең мохтажлығына ҡарап арттыра бара. Иң элек ул: "Мәм-мәм", - тип ашарға һорай башлай. "Әссә, атта", - тип иң яҡын, иң ҡәҙерле кешеләре менән "бәйләнеш" булдыра. "Бир" һүҙен дә балалар иң тәүгеләрҙән булып өйрәнә. Талап итеү, һорап ала белеү ҙә тереклеккә ынтылып ятҡан йәндең зарурәты. Үҫә, донъяны киңерәк таный барған һайын бала һүҙлек запасын да, белемен дә арттыра.

Айгиз менән урамдан китеп барабыҙ. Егелгән атты күреп ҡалды. Ғәҙәте буйынса, хәҡиҡәттең төбөнә төшөргә, аттың ҡайҙан яратылыуын белергә теләне:

- Атай, анау бабай атты ҡайҙан алған?

- Баҙарҙан һатып алған.

- Баҙарҙа уға кем һатҡан?

- Икенсе бер бабай һатҡан.

- Ә ул бабай атты ҡайҙан алған?

- Уның аты ҡолонлаған - атының бәпәйе булған, ул ҙурайған, ат булып үҫкән. Ике ат бабайға кәрәкмәй бит, береһен һатҡан.

- Юҡ, тейем, атай! Иң беренсе, иң беренсе атты ҡайҙан алған бабай? - Айгиз аттың был донъяла, гөмүмән, нисек һәм ҡайҙан хасил булыуын белергә теләй ине. Сабыйға мин Дарвиндың эволюция теорияһын һөйләй алмайым бит инде. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәтен, бар нәмәне юҡтан бар ҡылыуын дә аңлап етмәҫ ине ул. Шуға:

- Алла бабай атты балсыҡтан эшләгән дә, йән өргән, - тип кенә әйттем дә, иғтибарын башҡа нәмәгә йүнәлттем.

Икенсе бер осраҡта Айгиз:

- Был ат башҡортмо? - тип тә һорағайны. Тимәк, ул был донъяла милләттәрҙең булыуын, үҙенең башҡорт икәнен дүрт йәшендә белеп тә алған. Хәҙер был өлкәләге мәғлүмәтен арттырыу өҫтөндә "эшләй". Ошо рәүешле, баланың ныҡышмалы зиһене, һәр нәмәнең төбөнә төшөп, барыһын да һендереп алғыһы килә.

Һүҙлек запасының төп өлөшө уның шәхсән мохтажлығы булып, тормошоноң һәр этабында тулылана бара. Кеше йәмғиәттә йәшәй, уның ҡанундарын, үҙен уратып алған мөхиттең "мәҙәниәтен" үҙләштерә. Һүгенеү һүҙҙәренең донъяны таныуға бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, бала бер мәл уларҙы ла "үҙләштерә" башлай.

Араҡы эсмәгән кеүек үк, һүгенмәгәндәр ҙә һирәк арабыҙҙа. Һүгенеү һүҙ ҡеүәтен арттырыу, биҙәү, көйәфендә белдереү, ҡаты итеп - үҙәккә үткәреп әйтеү өсөн һәм, әлбиттә, күпселек осраҡта әрләү, кешене кәмһетеү маҡсатында ҡулланыла. Баланы тәрбиәләгәндә уларға, һүгенеү насар ғәҙәт, тип төшөндөрөлә, һәм алама һүҙҙәрҙе ҡулланыу ярамағанлығы аңына һеңдерелә. Тыйылған нәмә һәр саҡ татлы. Урамда малайҙар рәхәтләнеп һүгенә, "тос" лексикалары ололарҙыҡын тулыһынса ҡабатлай. Улар үҙҙәренең тәрбиә "эшен" дә алып баралар - бәләкәстәргә яман һүҙҙәрҙе өйрәтәләр.

Айнурға дүрт йәш самаһы. Шаяра, әйткәндә ҡолағына ла элмәй. Тыңламағас, малайҙарса "разборкаға" саҡырам, йәнәһе лә, уның телендә аңлашам:

- Нимә, әллә махаться итәйекме? - тигән булам.

- Атай, ты сто, аху...мы әллә? - тип малайым һикереп китте лә, ике йоҙороғон төйөп, боксер позаһына баҫты.

- Эй, улым, һүгендең дә ҡуйҙың бит, - тим бәләкәс кенә баланың шундай итеп "һоғондороуына".

- Юҡ, атай, ул һүгенеү булмай. Махаться иткәндә гел шулай тип әйтәләр, - ти Айнур иҫе лә китмәй. Был урам тәрбиәһенең классик миҫалы.

Айнурға биш йәштән ашыу. Кислаүгә барған йәйге көн. Эштән ҡайттым да, кухняла нимәләр эшләп йөрөйөм. Айнур тыштан йүгереп килеп инде лә, күҙҙәре йылап минең яныма килде:

- Атай, сикес, сикес, - тей был. Үҙе минең күҙҙәремә текләгән, шуҡ йылмая.

- Ул нимә була, улым, - тигән булам. Белеп торам: өлкәнерәк малайҙар өйрәтеп индереп ебәргән. Айнур минең реакциямды көтә. Әгәр әрләһәм, тыйһам, ҡасып кире сығып китәсәк тә, урамдағы малайҙарға минең, ысынлап та, асыуланыуымды һөйләйәсәк. Шуға бер ни булмағандай, тыныс ҡына һорайым.

- Девочкалар була, атай, - ти Айнурым, үҙе атай булып шуны ла белмәй, тигәндәй көлә.

Өйрәнгән "һөнәрен" бала, әлбиттә, ҡуллана ла.

Айгизгә прививка эшләтергә кәрәк ине. Әсәһе поликлиникаға алып барған. Бала аңын-тоңона төшөнөп тә өлгөрмәгән, алдаштырып, уколды ҡаҙап та ҡуйғандар. Быңдай мәкерлекте көтмәгән Айгиз булған һүгенеү һүҙҙәре запасын медсестраға яуҙырған.

Араҡыны татып ҡарауҙан йәш кешене ҡурсалап булмағандай, яман һүҙҙәрҙән дә баланы аралап алып ҡалыу мөмкин түгел. Бөгөн телевизор экранынан, "пипелдәү" менән баҫһалар ҙа, һүгенеү асыҡтан-асыҡ яңғырай. Әйтәйек, ТНТ каналында барған, йәштәр араһында бик популяр "Комедиклап" тапшырыуында. Залда ултырған эстрада йондоҙҙары, төрлө "тусовкалар" аша билдәлелек яулаған йыйын әтрәгәләм уға рәхәтләнеп көлә.

Тимәк, рөхсәт. Артабанын һәр кем үҙе хәл итә - ни миҡдарҙа һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланырға. Әйтәйек, Аҡъярҙа Юра исемле күршебеҙ балаларын - ҡыҙ менән малайҙы - һүгенеп әрләй ҙә ҡуя ине. Моғайын, хәҙер ҙурайған ул ике йәш кеше тоҙло һүҙ өсөн кеҫәгә төшөп тормайҙыр...

**Айбулат ҒАФАРОВ.**
**(Дауамы. Башы 48-49-сы һандарҙа).**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ЙӨРӘК ТИБЕШЕҢ ДӘ...

## үҙеңә иптәш

- Юҡ-барға ғәҙәтләнмә, ғәҙәт ул бөтә бәләгә сәбәп.
- Яңғыҙмын тимә, йөрәк тибешең үҙе ҙур иптәш.
- Ҡаныҡҡан - ҡанға, ҡарун малға туймаҫ.
- Аяҡ аҫтыңдағы бәләне үҙ аяғың тыуҙыра - аяҡҡа ла "эш" кәрәк.
- Бурҙың ҡулы, ғәйбәтсенең теле, ҡомһоҙҙоң нәфсеһе оҙон.
- Байлығына түш һуҡма - күкрәгеңдә таш үҫер, һылыулыҡтан маһайма - йөҙөңдә сөйәл баҫыр, сәсәнлектән ирәймә - телеңә төйәр сығыр: көлләһө лә Хоҙай яҙғаны.
- Иленә илекмәгән көн күрмәҫ, еренә ерекмәгән тәғам еймәҫ.
- Рәтһеҙгә рәт күрһәтмә, барыбер өҫтө биш тиер.
- Аш күрмәгән ашын йәлләр, ат күрмәгән атын аяр.

✓ **Баймаҡтағы ғәскәрҙәребеҙ ҙә рус алтын рудниктарында конфискацияланған өс йөҙ кило самаһы көмөш һәм йөҙ ҙә утыҙ алты кило алтын, күп миҡдарҙа аҙыҡ, ҡорал туплаған, беҙҙе азат итеүҙе һорап, Мәскәүгә телеграмма ебәргәндәр.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# ХӘТИРӘЛӘР

## (әҫәрҙән өҙөк)



### Ырымбурҙың большевиктар тарафынан баҫып алыныуы һәм Башҡортостан хөкүмәтенең ҡулға алыныуы

Ике айҙан ашыу Өфө, Һамар виләйәттәрен ҡулында тотҡан большевиктарға ҡаршы Ырымбур казактары генерал Дутов етәкселегендә көрәшә ине. Казактар араһында ла Каширин исемле офицерҙар ғаиләһе коммунистар булған һәм Башҡортостандың Верхнеуральск ҡалаһын үҙ йоғонтоһо аҫтына алған, Ырымбурҙа ла байтаҡ абруйлы казактар Советтар менән йәшерен бәйләнеш урынлаштырған. Шул сәбәпле ҡаланың таянысы ышаныслыҙ ине. Ғәскәребеҙ әҙер булмағанлыҡтан, хәл мөшкөл дә күренгәс, беҙ был эштәргә ҡыҫылманыҡ. Ниһәйәт (Советтарҙың ошо йыл башында ҡабул иткән Европа календары буйынса 18 ғинуарҙа), большевиктар Ырымбурҙы баҫып алды. Турғай виләйәте вәлийе Ғәлихан Бүкәйхан һәм башҡа ҡаҙаҡ менәүәрҙәре шәрҡи Ҡаҙағстанға, Семипалатинск ҡалаһына күсте. Беҙ Ырымбурҙа ҡалдыҡ. Ғәскәр ойоштороу һәм мөхтәриәт тәьмин итеү эштәребеҙгә ҡамасаулай ҡалһалар, Баймаҡҡа китеп, өлкә менән шунан идара итергә ҡарар иттек. Рәйестәре Цвиллинг булған большевиктар тәүҙә беҙҙең менән мөләйем мөғәмәлә итте. Совет хөкүмәтенә ҡаршы сыҡмаһағыҙ, үҙ өлкәгеҙҙә үҙ аллы идара итерһегеҙ, тик сит илдәр менән сәйәси эштәрҙе Советтарға тапшырырһығыҙ, Коммунистар партияһы доктринаһын ҡабул итеүегеҙ шарт түгел, тип аңлатып, быны яҙыу аша ла белгертте. Ойоштора башлаған полкты ла шул уҡ төп шарттарға яраҡлаштырыу маҡсатында, мине үҙҙәренә саҡырҙылар. Унда Аллабирҙе Йәғәфәр улы менән бергә киттем. Офицерҙарыбыҙ Үҫәргән кантонындағы Ҡаҙырша ауылына киткәйне. Беҙ, ҡаҙаҡтар кеүек, Ҡытай сигенә китмәҫкә булдыҡ, сөнки Советтар унда ла барып етәсәк. Полк төҙөп, эске эштәребеҙ менән үҙ аллы шөғөлләнергә мөмкинлек биреү шарты үтәлһә, Советтарҙың юғары хакимиәтен ҡабул итеүебеҙҙе белдереп, 27 ғинуарҙа Мәскәүгә телеграмма ебәрҙек. Башҡортостанда инҡилаб тарихын яҙған коммунист Ш. Типеев, йәнәһе, беҙ Мәскәүгә янау телеграммаһы ебәргәнбеҙ, тип яҙып сыҡты. Ул саҡта кеше ҡурҡытыр хәлдә түгел инек. Ғәскәребеҙгә сабыр һәм һаҡ эш итергә кәңәш биреп, Советтарҙың саҡырыуы буйынса улар менән күрешеү өсөн Ырымбурға киттек. Цвиллинг бик ихтирамлы күренде. Бер нисә мәжлескә саҡырҙылар. Был мәжлестәрҙә иҫке Дума ағзаһы булған татарҙар Кәлимулла Хәсәнов менән Борһан Шәрәф большевиктар янында иҫке дуҫтары кеүек урын алғандар һәм беҙгә ҡарата прокурор кеүек ҡыланалар ине.

Биш көн ваҡыт үтте. 3 февраль көнө беҙҙе ҡулға алдылар. Ҡулға алыусылар татар һалдаттары икән, улар беҙгә Советтар исеменән эш итеүҙәрен танытҡан ялған ҡағыҙ күрһәткәс, төрмә начальнигы, быларҙы ҡулға алыу хаҡында беҙгә әмер килмәне, ваҡытлыса ғына алып ҡалам, тине. Беҙҙе бында бикләмәүҙәрен талап итеүгә ҡолаҡ һалманылар, һуңынан аңлашылды, был хаҡта: "Ҡалалағы Мосолман Хәрби комитетының талабы буйынса улар тарафынан ҡулға алынған башҡорттарҙы совет төрмәһенә бикләүгә рөхсәт бирелде", - тип яҙҙылар. Ырымбур виләйәт Советы комитеты был ҡарарын 4 февралдә (яңы иҫәп буйынса 18 февралдә) Ырымбур "Известия"һында иғлан итте. Аллабирҙе Йәғәфәр, Сәғит Мираҫ - бөтәһе һигеҙ кеше ҡулға алындыҡ. Бер-ике көндән мине һорау алырға саҡырҙылар. Ғәйепләү досьеһында Камил Кәримов менән Ибраһим Бикчәнтәев исемле ике татар зыялыһы Ырымбурҙа большевик казактар нәшер иткән "Казачья Правда" газетаһында "Башҡорт контрреволюционерҙары" исеме аҫтында беҙҙе монархист һәм ер биләүсе реакцион капиталист итеп күрһәтеп яҙған ике мәҡәләне һалып ҡуйыуҙарын күрҙем. Баштан-аяҡ ялған булыуы большевиктарға ла мәғлүм был мәҡәләнән бер ни ҙә килеп сыҡманы. Әммә ул саҡ большевиктар кеше атыуға шул тиклем күнеккән, секретарь вазифаһын үтәгән йәмһеҙ бер ҡатынға тиклем, комиссарға мөрәжәғәт итеп: "К стенке что ли?" - тип һорап тора. Комиссар бик етди рәүештә: "Погоди", - тип туҡтатты һәм мине кире төрмәгә яптылар.

Ул арала беҙҙең эштәр нығыраҡ ҡатмарлашты. Сөнки беҙҙе төрмәгә ябыу айҡанлы халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ башланған. Баймаҡтағы ғәскәрҙәребеҙ ҙә рус алтын рудниктарында конфискацияланған өс йөҙ кило самаһы көмөш һәм йөҙ ҙә утыҙ алты кило тирәһе алтын, күп миҡдарҙа аҙыҡ, ҡорал туплаған, беҙҙе азат итеүҙе һорап, Мәскәүгә телеграмма ебәргәндәр. Орскиҙағы рустар ойошторолған полкыбыҙҙы юҡ итергә булған. Баранов исемле комиссар Баймаҡтағы башҡорт ғәскәре комитетына осрашырға саҡырып, абруйлы кешеләр аша хат ебәргән. Билдәләнгән күрешеү урынында йәшерен засада ойоштороп, ҡыҙыл ғәскәр беҙҙән килгән комитет ағзаларын көтмәгәндә ҡулға алып, кисенә атып үлтергәндәр. Беҙҙең иң хөрмәтле офицерҙарыбыҙҙан Ғимран Магазов, Ғабдулла Иҙелбаев яуыздарса үлтерелде. Бынан һуң һәр тарафтан ҡыҙыл ғәскәрҙәр Баймаҡҡа ебәрелгән, полк сардары Әмир Ҡарамыш, мөхәррир һәм шағир Хәбибулла Ғәбитов, шөбһәләнеп, осрашыу еренә бармағандар. Ғәскәрҙе туплап, үҙҙәрен юҡ итергә килгән рустарға һөжүм иткәндәр, бер нисәһен үлтереп, ҡалғандарын Орск яғына ҡыуғандар. Әммә улар күберәк көс менән кире килгәнсе, беҙҙекеләр, ғәскәрҙе таратып, үҙҙәре аҙ ғына көс менән Бөрйән улусының таулы ерҙәренә йәшеренгән. Уларҙың иң ҡурҡҡаны - төрмәлә ултырған хөкүмәт ағзаларын атып ҡуйырҙар тигән уй була. Беҙ төрмә һаҡсыларының ҡайһы береһен бүләк биреп һатып алдыҡ, икенселәре беҙгә ыңғай ҡараштa ине. Ҡыҫҡаһы, мин иректән һәр саҡ хәбәр алып, шифр менән хәбәр оҙатып торҙом. Шул арала Әмир Ҡарамыштың үҙ ирке менән килгән егеттәрҙән тауҙарҙа ғәскәр туплауы һәм Ырымбурға һөжүм өсөн казактарға ҡушылырға тырышыуы хаҡында хәбәр килде. Бер көн мине дөйөм бүлмәнән алып сығып, айырым бикләнеләр. Мин төрмәлә 1915 йылда уҡ яҙа башлаған "Нуғай тарихы" исемле әҫәремде тамамлау менән мәшғүл булдым. Бер көн Мөхәммәт Таһиров исемле татар егете килде. Миңә ашарға ризыҡ, ҡағыҙ һәм ҡул сәғәте килтергән. Ул элек Ҡаҙанда минең шәкертем булған икән, коммунистарға ҡушылған һәм Ҡаҙандағы "Мосолман Хәрби шураһы" уны Башҡортостан хөкүмәтен таркатыу маҡсатында Ырымбурҙағы Советтар менән бергә шөғөлләнергә хеҙмәткәр итеп ебәргән. Төрмәгә минең янына килеп, был зат: "Остазым, беҙ һеҙҙе ул саҡ ҡурҡытыр өсөн һәм мөхтәриәт фекеренән ваз кистермәк булып ҡулға алғайныҡ, әммә эш ҙурайҙы, һеҙҙе ҡотолдорорға тырышабыҙ, ҡотҡара алмайбыҙ. Хәҙер һеҙ Советтарҙың дошманына әүерелдегеҙ, сөнки тауҙарҙа башҡорттар үҙ теләктәре менән ғәскәр төҙөй, шуның өсөн һеҙҙе аманат итеп тоталар, эштең ни менән бөтөүенән ҡурҡам", - тип иланы, һуңынан Раимов исемле берәү "Башҡортостан Йөмһүриәтенең ҡоролош тарихы" исемле русса ҙур бер әҫәрҙә "Татар хәрби шураһы"-ның, Ырымбурҙағы Советтар менән бәйләнештә булып, беҙҙең менән мәшғүл булыуы хаҡында яҙғанын уҡығас, Мөхәммәт Таһировтың һүҙҙәре дөрөҫ булһа кәрәк, тип уйланым. Мин, ни булһа ла булыр, тип "Нуғай тарихы" китабымды яҙыуҙы дауам иттем. Халыҡ араһындағы ҡуҙғалыш беҙҙең өсөн хәйерле булмаясағын башҡорттоң күренеклеләренә хәбәр итһәм дә, был тулҡынланыу тынманы, һәр яҡтан "ҡулға алынғандарҙы сығарығыҙ", тип Мәскәүгә лә, Ырымбур виләйәт комитетына ла телеграммалар, хатта махсус делегациялар ебәрелде, һөҙөмтәлә беҙҙең хәлебеҙ көндән-көн хәүефлерәк була барҙы.

Бер көн (ихтимал, 27 март булғандыр) төрмә коменданты миңә, Ырымбур виләйәт комитеты рәйесе Цвиллинг киләсәк, тип хәбәр итте. Янымдағы китаптарҙы түшәк аҫтына йәшерергә ҡушты. Сөнки ҡәләмдәрҙе, китаптарҙы тартып алырға әмер килгән икән. Цвиллинг миңә төрмәлә ятҡан килеш Башҡортостан тауҙарында доброволец отрядтары төҙөүҙе туҡтатырға, бер аҙна эсендә ҡоралдарын тапшырырға, тип ғәскәргә әмер бирергә ҡушты. Ҡорал тапшырылмаһа, беҙҙе язаға тарттырасаҡтарын әйтте. Мин уға: "Төрмәнән ебәрелгән әмерҙең ни тәьҫире булһын", - тип яуапланым. Ул да: "Үҙегеҙ беләһегеҙ", - тип сығып китте. Бынан һуң режим бик ҡырҡыулашты. Минең архивымды, китап, ҡағыҙҙарымды алдылар, һәр ун-ун биш минут һайын береһе килеп, ишек тишегенән ҡарап китә ине.

**(Аҙағы. Башы 48-49-сы һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

## XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ошо тауҙан саҡрым ярым тирәһендә тәбәнәк, әммә киң булған Ҡыҙҙар тауы тип йөрөтөлгән ҡурған бар. Башҡорттар һөйләүенсә, ошо ҡурғанда Нуғай хан күмәк күңел асыу һәм һый мәжлестәре ойошторған. Башҡорттар тарафынан изге тип хөрмәтләнгән Тура Тау беҙҙе мул тотонорға һәм башҡорттарҙың ҡурҡыуға бирелмәүен шарап менән ҡуҙғытырға мәжбүр итте: уларҙан бер кем дә, үҙҙәренең тауға бирелгән нәҙерҙәренең әлегә үтәлмәүенә һылтанып, беҙҙең менән ошо тауға барырға теләмәне, сөнки үтәлмәгән нәҙере булған кеше тауға менә алмай; быны үҙенә үҙе яуызлыҡ теләгән кеше генә башҡара алыр ине. Башҡорттарҙың яңылышыуына үкенеп, эстән уларҙың тауға менеү ауыр булғанлыҡтан ғына ҡарышыуы хаҡында уйлап, уларға һуңынан тауҙан бер ниндәй ҙә зыян булмаясағын, уның бер ниндәй нәҙергә лә тормауын күрһәтергә тырыштым. Әммә үҙҙәренең тәбиғи булмышы менән шөһрәт ҡаҙанырға яратыусы башҡорттар, бигерәк тә улар араһында күпте белеүсе булып танылғандары, беҙҙең дәлилдәребеҙҙе артыҡ күңелләнеп тыңламаны һәм, ахырҙа, ошо тау тураһында күп яҙылған Сыңғыҙ китабын иҫкә алып тормайынса, ошо ерлектә тыуған миҫал сифатында ике ваҡиға тураһында һөйләүҙе кәрәк тапты. Ошо изге урынға ерәнеп ҡараусы бер татар кешеһе, башҡорттарҙың хөрәфәти ҡарашына үс итеп, тауҙа ярау иткән; әммә был ғәмәл уның өсөн буш ҡалмаған: ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уның бөтә нәҫел-нәсәбе ҡырылып бөткән. Үләт уның улынан башланған, ул үлер алдынан тауҙан төшөп килеүсе төрлө йыртҡыстарҙың уның һәм бөтә ғаилә ағзаларының кәүҙәләрен өҙгөсләп ташларға әҙер булғанын күргән. Икенсеһе, бер ниндәй ҙә нәҙер бирмәйенсә, төлкө артынан ҡыуып барып, бөтөнөһөн дә көлкөгә ҡалдырам тип, тауға барып менеү менән һоро айыу тарафынан ботарланып ташланған.

Шул арала хәмер быуы башҡорттарҙың башына сыҡты; беҙ изге тауҙың уларға аҙ ғына булһа ла асыуы килмәйәсәге хаҡында ҡабатлап әйттек. Быны ярҙам йөҙөнән эшләмәһәләр, беҙҙе барыбер мәжбүри рәүештә оҙатып йөрөйәсәктәре тураһында белдерҙек. Белмәйем, шарап тәьҫиренәнме, әллә беҙҙең әйткәндәрҙәнме, башҡорттар ҡаушабыраҡ ҡалды һәм улар беҙҙе тауға алып барырға үҙ теләге менән ризалашҡандай тойолдо.

Тауҙың бейеклеге һәм дә текәлеге арҡаһында уның түбәһенә менеп еткәнсе хәл алыу өсөн ун биш тапҡырлап туҡтарға тура килде. Тау түбәһе түңәрәгерәк киң майҙандан ғибәрәт булып, унда йөҙләп башҡорт йортон урынлаштырырға булыр ине. Көнбайыш тарафтан тау күпкә һөҙәгерәк, һәм унда тауға менерлек юл төҫмөрләнә, башҡорттар уны бик борондан, хан замандарынан ҡалған, тип ышандырырға тырыша. Тауға илтеүсе юл башындағы уйһыулыҡта ур ҡалдыҡтары бар, күрәһең, ул ошо уңайлы тау юлын һаҡлау өсөн яһалған булғандыр. Шулай ҙа был тауҙа башҡа ниндәй ҙә булһа боронғолоҡ ҡалдыҡтары күренмәне.

***✓ Шуныһы ғәжәп, үҙебеҙҙекеләр Себер, сит ил тарафтарын тапағанда, нимә өсөн башҡалар беҙгә ағыла һәм тамырҙарын нығыта һуң? Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 2010 йылдан алып сәнәғәтебеҙ 4 тапҡырға үҫкән.***

# ТЫУЫП ҮҪКӘН

## ташламам,

**Олораҡ быуын вәкилдәренән "Әҙәм балаһын ризыҡ йөрөтә, ейәһе ризығының ҡайҙа сәселгәнен берәү ҙә белмәй", йәки "Яҙмыш бәндәне ҡайҙа ғына ташламай" тигән һүҙҙәрҙе йыш ишеткәнебеҙ бар. Был һүҙҙәрҙе әйткәндә, моғайын да, ситкә кейәүгә бирелгән ҡыҙҙар, йәиһә тыуған илен һаҡлап, яу сапҡан ир-егеттәр яҙмышы күҙ уңында тотолғандыр. Тыныс, имен тормошта тыуған ереңде ташлап, үҙ теләгең менән ҡайҙалыр сит илгә сығып китеүҙе башына ла индермәгәндер өләсәй-олатайҙарыбыҙ.**

### Ниңә ситкә китәләр?

Бөгөн ситкә сығып китеүҙең төрлө сәбәптәре бар. Берәүҙәрҙе, бигерәк тә йәштәрҙе, заманса белем алыу уйы ылыҡтырһа, икенсе берәүҙәре - балалар үҫтереү һәм уҡытыу, өсөнсөләре матди байлыҡ арттырыу йәки сәйәхәт итеү, донъя күреү уйы менән ситкә юллана. Ситкә эшкә йөрөүселәрҙең йылдан-йыл арта барыуын уйлаһаң, ирекһеҙҙән сит ил тормошон үҙебеҙҙеке менән сағыштыра башлайһың. Ысынлап та, ситтә барыһы ла яҡшымы һуң, әллә инде "Фәлән ерҙә алтын бар, барһаң, баҡыры ла юҡ", тигән һүҙ дөрөҫөрәкме? Хәйер, нимәнелер баһалар өсөн бөгөнгө тормошто 90-сы йылдар менән сағыштырып ҡарау ҙа етә. Үҙгәрештәрҙе танымау мөмкин түгел. Зарланырға ратыу әллә ҡаныбыҙға һеңеп бара, әллә кешенең нәфсе тигәне йылдан-йыл аҙа барамы? Аҡса юҡ, тигән һүҙҙе өс ҡатлы һарайҙай йорт төҙөп ултыртҡаны ла, диңгеҙ буйынан ҡайтып инә белмәгәне лә, атай-олатайҙарҙың төшөнә лә инмәгән затлы машинала елдергәне лә ҡабатларға ярата. "Уй-й, аҡса юҡ та ул", "Ваҡыт юҡ бит", тиеүҙең дә ғәҙәтебеҙгә инеп киткәнен һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Шуныһы ғәжәп, үҙебеҙҙекеләр Себер, сит ил тарафтарын тапағанда, нимә өсөн башҡалар беҙгә ағыла һәм тамырҙарын нығыта һуң?

Республикабыҙҙың социаль-иҡтисади хәле лә бер урында ғына тормағандай. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 2010 йылдан алып сәнәғәтебеҙ 4 тапҡырға үҫкән, эре-эре инвестицион проекттар тормошҡа ашырыла, улар арҡаһында яңы эш урындары асыла. Киләһе йылға уртаса эш хаҡының 28 мең 400 һумға етеүе фаразлана. Хәлебеҙ артыҡ мөшкөл, тиһәк, Ҡырымға, Луганск халҡына ярҙам иттек, әллә күпме гуманитар йөк оҙаттыҡ, Белогорск районын шефлыҡҡа алдыҡ.

Илебеҙгә төрлө ҡурҡыныстар йыш янап торған. Тик бындай ауырлыҡтарға ла хәҙер иммунитет барлыҡҡа килгән. Шуға күрә, банан, әфлисун урынына картуф менән балан ашап өйрәнгән ватандаштарыбыҙҙың санкцияларға ла артыҡ иҫе китмәне. Кем өсөндөр бер тәмен тойған ризыҡтан баш тартыу ҡыйыныраҡ булыр, әлбиттә. Тик артыҡ зыян юҡ, киреһенсә, сит илдекенә алмашҡа үҙебеҙҙекен үҫтереү өсөн хөкүмәт тә ауыл хужалығына йөҙ менән боролдо. Мәҫәлән, 2010 йылда агросәнәғәт комплексындағы инвестициялар 4 млрд һум тәшкил итһә, былтыр ул 7,3 млрд-ҡа барып баҫҡан. Аграрийҙарға ярҙам йөҙөнән йыл һайын 6 млрд һум бюджет аҡсаһы бүленә. Был аҡса техника алыуға, фермерҙарға ярҙам итеүгә, кредиттарҙың ставкаһын кәметеү, фермаларҙы модернизациялау һәм башҡалар өсөн тотонола. Айырыуса ҙур иғтибар ауылдарҙы үҫтереүгә, төҙөкләндереүгә йүнәлтелеүен иҫәпкә алһаң, (быйыл был маҡсатҡа 420 млн һум бүленгән. 3 меңгә тиклем халҡы булған биләмәләр 500 мең һум, унан эрерәктәре 600 мең һум ярҙам ала) халыҡтың оҙон аҡса артынан ситкә китеүенә тағы бер ғәжәп итәһең. Кем ғәйепле һуң быға? Бөтә тармаҡтарҙы ла тиерлек үҙ ҡулына алып, халыҡты бушҡа эшләтергә тырышҡан намыҫһыҙ эшҡыуарҙармы, әллә инде эш хаҡы түләүҙәрен көйләй алмаған хөкүмәтме? Сығыштарҙан, рәсми һандарҙан сығып фекер йөрөтһәң, тормошҡа зарланырлыҡ урын да юҡ кеүек...

### Берәүҙәр китә, икенселәр килә

Күп кенә ир-егеттәрҙең сит ерҙә төҙөлөштә эшләгәнен дә беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙә лә төҙөлөштө үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә. Мәҫәлән, былтыр ғына 2,6 млн квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән. Был республиканың төҙөлөш тарихында иң ҙур күрһәткес. Торлаҡ йорттарҙы файҙаланыуға тапшырыу буйынса Башҡортостан Волга буйы Федераль округында - беренсе, илдә бишенсе урында тора. Йорт төҙөүҙә тәүге урында килгәс, тимәк, уны һатып алыусылары ла бар, тигән һүҙ был. Ә бит Өфө торлаҡ хаҡы буйынса иң ҡиммәт ҡалалар иҫәбендә. Хаҡтар Екатеринбург һәм Түбәнге Новгородтан ғына ҡалыша. Торлаҡ шарттарын яҡшыртырға теләгәндәр исемлегендә - 80 мең кеше. Тимәк, әле төҙөргә лә төҙөргә, әллә күпме эшсе ҡулдар, табырға кәрәк. Шуныһы ҡыҙыҡ, беҙҙекеләр фатир һатып алыу өсөн ситкә китеп аҡса эшләй, ситтекеләр аҡса эшләү өсөн беҙгә килеп фатир төҙөй.

Һандарға күҙ һалһаң, беҙҙә халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыуға ғына түгел, сәләмәтлеген һаҡлау өсөн дә тырышалар. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа 34 эре спорт ҡоролмаһы, күбеһенең бассейны булған 20 физкультура-һауыҡтырыу комплексы, боҙ һарайҙары, тау саңғыһы комплекстары төҙөлгән. Был хаҡта Республика Башлығы үҙенең Республика көнөнә арналған тантаналы кәңәшмәләге сығышында ла белдергәйне: "Бөтә дауалау учреждениеларының эшен шәхсән үҙ контролемә алам. Халыҡ үҙенә квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтелеүенә ышанырға тейеш. Оптималләштереү һәм модернизациялау һылтауы менән дауаханаларҙың ябылыуына, койка-урындарҙың ҡыҫҡарыуына юл ҡуймаҫҡа тейешбеҙ", - тигәйне. Хәйер, был өлкәлә проблемалар етерлек инде ул. Бөгөн халыҡтың врачҡа инеү өсөн һыу буйы сиратта ултырыуын, сиратҡа эләгеү өсөн дә ай ярым алдан яҙылып ҡуйыуын, ауылдарҙа участка дауаханаларының күпләп ябылыуын иҫәпкә алһаң, иҫәп хисапҡа тура килмәгәнен дә аңлайһың. Ләкин ситкә китеүселәрҙе унда ла ошондай уҡ проблемалар көтөп тороуы билдәле бит инде...

***Был хаҡта Республика Башлығы үҙенең Республика көнөнә арналған тантаналы кәңәшмәләге сығышында ла белдергәйне: "Бөтә дауалау учреждениеларының эшен шәхсән үҙ контролемә алам. Халыҡ үҙенә квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтелеүенә ышанырға тейеш. Оптималләштереү һәм модернизациялау һылтауы менән дауаханаларҙың ябылыуына, койка-урындарҙың ҡыҫҡарыуына юл ҡуймаҫҡа тейешбеҙ", - тигәйне. Хәйер, был өлкәлә проблемалар етерлек инде ул. Бөгөн халыҡтың врачҡа инеү өсөн һыу буйы сиратта ултырыуын, сиратҡа эләгеү өсөн дә ай ярым алдан яҙылып ҡуйыуын, ауылдарҙа участка дауаханаларының күпләп ябылыуын иҫәпкә алһаң, иҫәп хисапҡа тура килмәгәнен дә аңлайһың. Ләкин ситкә китеүселәрҙе унда ла ошондай уҡ проблемалар көтөп тороуы билдәле бит инде...***

### Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Мәғлүмәттәрҙән мәғариф системаһында ла яҡшы үҙгәрештәр булыуын беләбеҙ. Мәҫәлән, һуңғы дүрт йылда балалар баҡсаларында 50 мең өҫтәмә урындар булдырыуға өлгәшелгән, 84 балалар баҡсаһы төҙөлгән, тиҙҙән тағы ла 26-һы төҙөлөп бөтәсәк. Шулай уҡ 38 мәктәп, 10 мең уҡыу урыны артҡан, быйыл тағы өс мәктәп, 2017 йылға 5500 уҡыусыға ете мәктәп төҙөләсәк. Улар юғары конкурентлыҡ ҡеүәһенә, уҡытыуҙың сифат дәрәжәһенә эйә буласаҡ. Был учреждениеларҙа балалар лайыҡлы белем аласаҡ. Тик бындай шарттарҙа белем алған уҡыусыларыбыҙ бәхет эҙләп ситкә китмәй, үҙ республикабыҙҙың үҫешен арттырыу өсөн тырышлыҡ һалһа, ярай ҙа ул...

Башҡортостандан былтыр 50 мең тирәһе кеше күсеп киткән. Улар араһында күбеһе - йәштәр. Яҡташтарыбыҙҙың кемеһелер - белем (халыҡтың 15 проценты башҡа төбәктәрҙә белем ала), икенсе береһе аҡса эҙләп ситкә китергә ынтылғанда, былтыр Башҡортостанда 2674 сит ил студенты белем алған. Был студенттар Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡытай, Тажикстан, Вьетнам, Төркмәнстан һәм Һиндостандан килгән. Уларҙың күбеһе Өфө дәүләт нефть-техник, Башҡорт дәүләт медицина, Башҡорт дәүләт университетында уҡый. Үҙебеҙҙең бынамын тигән белгестәр, аҡса эшләйем, тип, ситтә йөрөгәндә, былтыр сит илдән виза менән килгән 23 уҡытыусы студенттарға белем биргән. Рус телен өйрәнеү буйынса 302 кеше курс үткән. Быйыл йыл башында бындай курстарға 54 кеше яҙылған. Шулай уҡ Төркиәнән - 496, Вьетнамдан - 328, Ҡытайҙан - 216, Германиянан - 144, Мысырҙан - 129, Ҡытай Халыҡ Республикаһынан 114 кешегә беҙҙә эшләү өсөн саҡырыу ебәрелгән. Был хәс тә "Аҡ тирәк, күк тирәк" уйынындағы кеүек, үҙебеҙҙекеләрҙе ситкә ебәрәбеҙ, ситтәгеләрҙе саҡырып алабыҙ...

### "Ҡунаҡ"тар ҡайҙа эшләй?

Сит илгә киткән юғары белемле яҡташтарыбыҙҙы кем тип әйтәләрҙер, ә бына беҙгә эшкә килгәндәрҙе кәмһетеберәк, гастарбайтерҙар, тип йөрөтәләр. Был немец һүҙе, Gast - ҡунаҡ, Arbeiter - эшсе тигәнде аңлата, йәғни үҙ теләге менән ҡырҙан эшләргә килгән "ҡунаҡ". Гастарбайтерҙар - иҡтисади яҡтан ярлы, үҫешмәгән илдән килә. Шуға күрә лә был кешеләр арзан эшсе ҡулдар һанала. Ғәҙәттә, бындайҙарҙың белеме булмай. Бөгөн Рәсәй гастарбайтерҙар иҫәбе буйынса Европала - беренсе, донъяла икенсе урында тора. Америка иһә Мексиканан, Латин Америкаһынан килгән гастарбайтерҙары менән донъяла беренсе урынды биләй. Йыл башында беҙҙең республикала эшләү өсөн 13096 гастарбайтерға рөхсәт бирелгән. Иң күп патент Үзбәкстандан - 70,6 процент, Таджикстандан - 15,5 процент, Әзербайджандан - 5,5 процент, Әрмәнстандан - 5,2 процент килгән эшсе ҡулдарға бирелә. Сит ил граждандарын эшкә урынлаштырыу структураһы оҙаҡ йылдар үҙгәрмәй, бер төрлө ҡала. Улар иң түбән эш хаҡы булған, ауыр эштәрҙә - төҙөлөштә, коммуналь, урман һәм ауыл хужалығында эшләй.

### Шөкөр итһәң, әҙ ҙә етәме?

2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса республикала иҡтисад өлкәһендәге 618560 кеше, шәхси хужалыҡтарҙағы 15-72 йәштәрҙәге 408275 кеше - үҙе йәшәгән ерҙә, 43522 кеше - башҡа төбәктәрҙә, 163298 кеше республиканың төрлө райондарында эшләй. 2012 йылда Башҡортостандан иҡтисад өлкәһендә шөғөлләнеүселәрҙең 7 проценты сит төбәктәргә ваҡытлыса эшкә киткән. Был күрһәткес буйынса беҙҙең республика Рәсәйҙең башҡа төбәктәре араһында уртансы урында, тәүге урынды Адыгей (18 процент), һуңғы урынды Татарстан (1 процент тирәһе) республикалары биләй.

2011-2012 йылдарҙа Башҡортостандан ситкә китеп эшләүселәр һаны 113140-тан 136171 кешегә тиклем артҡан. Был кешеләрҙең яртыһынан күбеһе Төмән өлкәһенә һәм Ханты-Манси, Ямал-Ненец автоном округына, Силәбе, Свердловск өлкәһенә, Мәскәүгә киткән. Шулай итеп, 2012 йылда республика халҡы Рәсәйҙең 44 субъектында ваҡ-

✓ ***Етешһеҙ донъяға ҡул һелтәп, улын әсәһенә ҡалдырып, Себер яғына сығып китте. 7 йыл буйы күскенсе кеүек, унда-бында йөрөүҙән, бер ниндәй шарттар булмаған вагондарҙа йәшәүҙән тамам ялҡҡан.***



# ИЛКӘЙЕМДЕ...

## тигән инем

ытлыса эшләгән. Шуларҙың 25 проценты - төҙөлөштә, 13,75 проценты - сауҙа өлкәһендә, 13,3 проценты - транспорт һәм элемтә өлкәһендә, 10,4 проценты - күсемһеҙ милек буйынса төрлө эштәрҙә, 9,1 проценты эшкәртеүсе производстволарҙа бил бөккән. 2013 йылда илдең башҡа төбәктәренә тағы ла күберәк кеше киткән.

Башҡортостанстаттың 2013 йылғы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Башҡортостан эшкә рөхсәт биргән патент нигеҙендә эшләүсе сит ил граждандары иҫәбе буйынса Түбәнге Новгород һәм Һамар өлкәһенән, Татарстандан ҡала дүртенсе урында тора. Халыҡ-ара мигранттарҙы күпләп ҡабул итеү Өфө, Стәрлетамаҡ, Октябрьский ҡалаларында һәм Өфө, Туймазы, Иглин, Шишмә, Бәләбәй райондарында күҙәтелә.

Социологтар тикшереүе буйынса, сит ергә күсеп йөрөүгә насар йәшәү кимәле, эшһеҙлек, һөнәри яҡтан үҫеп булмауы һ.б. сәбәпсе. Күберәк ауыл һәм бәләкәй ҡалалар халҡы ситтә йөрөргә мәжбүр. Бишбүләк, Салауат, Ейәнсура, Асҡын райондарында юғары миграцион кимәл булһа, республиканың төньяҡ, төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнсығыш райондарында кире миграцион хәл күҙәтелә. Объектив сәбәптәр арҡаһында Яңауыл, Баймаҡ, Мәләүез, Белорет районы халҡын күпләп юғалта. Социаль-иҡтисади яҡтан үҫешкән Өфө, Иглин, Стәрлетамаҡ райондарында, Өфө, Стәрлетамаҡ, Октябрьский ҡалаларында миграцион хәл тотороҡло. Бөтөнләй күсеп киткән Башҡортостан халҡы башлыса Мәскәү һәм Санкт-Петербургта төпләнә. Күсеп китеүселәрҙең күбеһе республиканың көньяҡ-көнсығыш райондарына тура килә.

Рәсми һандарға таянһаҡ та, сағыштырыуҙар үткәрһәк тә, яҡташтарыбыҙҙың күпләп ситкә эшкә йөрөүе факт булып ҡала. Илебеҙҙә байҙар, урта хәллеләр һәм ярлылар ҡатламы барлығын иҫәпкә алһаң, бының сәбәптәрен еңел генә аңлата ла алмайһың. Кемдер айына 10-15 мең эш хаҡына ла шөкөр итеп, уны барыһына ла еткереп йәшәй, икенсе береһенә 100-әр мең һум түләнгән эш кәрәк, ә өсөнсө берәүҙәре бөтөнләй эш урыны таба алмай. Ошо хаҡта бөгөн ситтә эшләгән яҡташтарыбыҙҙың үҙҙәре менән әңгәмәләштек.

### Рус түгелмен, ләкин россиян мин…

***Сәйфулла Ғайсин:*** Бер кем дә тыуып үҫкән еренән ирекһеҙҙән үҙ теләге менән сығып китмәй. Теләйһеңме, юҡмы, ҡай саҡта Хоҙай баҫмаған ерегә баҫтырып, асмаған ишегендә лә астырта. Мин дә вахта тигән һүҙҙе ишетеп кенә белә инем, ә ҡасандыр үҙем дә сумкалар тултырып, эш эҙләп сығып китермен тип башыма ла индермәнем. Башта 4 ай буйы Ямал яҡтарында уңышлы ғына йөрөп ҡайттым. Күпмелер ваҡыттан һуң Мәскәүгә сығып киттем. Әлбиттә, донъя күреү, ял итеү өсөн түгел. Әҙме-күпме булһа ла аҡса табып, балаларға ярҙам итеү уйы менән. Мәскәүҙә төҙөлөш ойошмаһына урынлаштым. Халыҡ төрлө яҡтан килгән. Үзбәктәр, ҡырғыҙҙар, әрмәндәр күп. Донецкиҙан, Луганскиҙан, Ҡырымдан килеүселәр ҙә етерлек. Күптәр элекке СССР-ҙы, ил сиге булмаған ваҡытты һағынып иҫкә ала һәм Рәсәйҙә эш, аҡса табыу мөмкинлеге булыуына ҡыуана.

Ямалда йөрөгән саҡта эшләү, йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа бар ине. Мәскәүҙә бөтөнләй икенсе мөнәсәбәт менән осраштыҡ. Түшәк кәрәк-яраҡтары - үҙеңдеке, йылы һыу юҡ, иртәнсәк бәҙрәфкә һыу буйы сират. Һәр кем хәленән килгәнсә үҙ тамағын үҙе ҡайғырта, йылы һыу төнөн генә булғанлыҡтан, душты ла ошо ваҡытта ғына инергә мөмкин. Халыҡ күп, уның аныҡ ҡына иҫәбе лә билдәле түгел, берәүҙәр 1500, икенселәре 2000-дән ашыу, ти. Ситтән килеүселәргә патент алыу айға һалынмаған. Йыш ҡына документтары булмағандарҙы аулау ойошторола. ОМОН килеүен ишетеү менән эшкә рөхсәте булмағандар төрлөһө-төрлө яҡҡа ҡасып бөтә. Төҙөлөш урманға яҡын урынлашҡан, шуға күрә барыһы ла эшен, ҡоралдарын ташлап, шунда йәшенергә тырыша. "Ҡасаҡтар" йәшенһә, төҙөлөш майҙаны бушап ҡалғандай була. Күп осраҡта ОМОНдар килеү тураһында ялған хәбәр тараталар, сөнки документһыҙҙарҙың ҡайһы берәүҙәре эш урынына кире килеп тормай. Ул ваҡытта уларға тәғәйен эш хаҡы ла икенселәрҙең кесәһенә китә.

Шул тиклем халыҡ йыйып та, патент биреү эшен тәртипкә һала алмауҙары ғәжәпләндерә. Ныҡлабыраҡ уйлаһаң, бында хөкүмәтте ғәйепләп тә булмай, сөнки ойоштороу эшен аралашсылар алып бара. Бына шул намыҫһыҙ аралашсылар арҡаһында күптәр тейешле аҡсаһын ала алмай ҙа инде. Хөкүмәт был эште көйләргә, эш биреүселәр менән аралашсылар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тәртипкә һалырға тырыша тырышыуға. Әле ваҡытлыса палаткалар янында ике ҡатлы ҙур бина төҙөлөп ята. Яңы бинала ситтән эшкә килеүселәргә ҡабул итеү өсөн бөтә шарттар ҙа ҡаралған, теркәү, медицина тикшереүе, ятаҡ һ. б. Бөтәһе лә бер урында буласаҡ. Үҙәкләштерелгән ошо миграция хеҙмәте төҙөлөп бөтһә, эшкә 8 меңләп кешене ҡабул итергә фаразлайҙар. Быны конверттарҙағы эш хаҡын булдырмау, аҡсаны ситкә ебәрмәү өсөн эшләйҙәр.

Көньяҡ халҡы беҙҙе баҫып алып бара, тиһәләр ҙә, уларҙы ла аңларға була. Һәр кем йәшәргә, балалар үҫтерергә тырыша. Бер генә халыҡ та үҙ традицияларынан, ғөрөф-ғәҙәтенән айырылып, сит ерҙә йәшәргә теләмәйҙәр. Йылдар буйы яттар араһында йөрөү һәр халыҡтың үҙенә генә хас рухи донъяһына ла йоғонто яһамай ҡалмай. Бушҡа ғына "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул", тимәйҙәр бит.

Ситтә йөрөгәндә "Һеҙ ҡайҙан?" тип йыш һорайҙар. Шул саҡта Мостай ағайҙың һүҙҙәре менән: "Рус түгелмен, ләкин россиян мин", - тип яуап бирәм. Башыма кейеп йөрөгән каскама ла "Башҡортостан" тип яҙып ҡуйҙым. Сит илдән килгәндәр: "Һеҙгә рәхәт, һеҙ үҙ илегеҙҙә, бөтә нәмәгеҙ ҙә, иң мөһиме, эшегеҙ бар", - тип көнләшә. Бындай һүҙҙәр ишетеү, үҙ Ватаныбыҙҙа була тороп та, донъябыҙҙы, ғаиләбеҙҙе ҡалдырып, гастарбайтерҙар рәтендә йөрөүебеҙ күңелһеҙ уйҙарға төшөрә...

> ***Мәскәүҙә төҙөлөш ойошмаһына урынлаштым. Халыҡ төрлө яҡтан килгән. Үзбәктәр, ҡырғыҙҙар, әрмәндәр күп. Донецкиҙан, Луганскиҙан, Ҡырымдан килеүселәр ҙә етерлек. Күптәр элекке СССР-ҙы, ил сиге булмаған ваҡытты һағынып иҫкә ала һәм Рәсәйҙә эш, аҡса табыу мөмкинлеге булыуына ҡыуана. Ямалда йөрөгән саҡта эшләү, йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа бар ине. Мәскәүҙә бөтөнләй икенсе мөнәсәбәт менән осраштыҡ. Түшәк кәрәк-яраҡтары - үҙеңдеке, йылы һыу юҡ, иртәнсәк бәҙрәфкә һыу буйы сират. Һәр кем хәленән килгәнсә үҙ тамағын үҙе ҡайғырта, йылы һыу төнөн генә булғанлыҡтан, душты ла ошо ваҡытта ғына инергә мөмкин. Халыҡ күп, уның аныҡ ҡына иҫәбе лә билдәле түгел, берәүҙәр 1500, икенселәре 2000-дән ашыу, ти.***

***Әлфирә Сәлимова:*** Әхирәтем бухгалтерға уҡып сыҡһа ла, һөнәре менән улын, үҙен ҡарарлыҡ аҡса еткерә алманы. Ире менән дә айырылышҡас, етешһеҙ донъяға ҡул һелтәп, улын әсәһенә ҡалдырып, Себер яғына сығып китте. Әлбиттә, бер ҙә ҡыуанып, шатланып йөрөмәй. 7 йыл буйы күскенсе кеүек, унда-бында йөрөүҙән, бер ниндәй шарттар булмаған вагондарҙа йәшәүҙән тамам ялҡҡан. Тик бер хәл дә итеп булмай, йәшәргә, баланы үҫтерергә кәрәк. Бында эш эҙләп ҡарай, иң күбе 11-12 мең һум тәҡдим итәләр. Был ғына аҡсаға ипотекаһын түләһенме лә, балаһын уҡытһынмы? Унда ул 30-40 мең һум алып эшләй, был кредиттарын ҡаплауға, фатир түләүҙәренә, улын ҡарауға етә. Әхирәтем быйыл үҙе менән пенсионер атаһын да эшкә алып китте, сөнки ҡала ерендә бәләкәй генә пенсияны еткереүе лә бик ҡыйын бит...

***Татьяна Новикова:*** Эшләгәнең өсөн тейешле хаҡ алып, тапҡан аҡсаңа матур итеп йәшәп тә, ял итеп тә булмаҫас, нимә эшләйһең инде, башҡа юлдар эҙләйһең. Хәҙер мәғлүмәт күп, интернет үҫешкән заман. Артыҡ аптырарға түгел. Башыңды әҙерәк эшләтеп, һөйләшә белергә генә кәрәк. Ошо сифаттарым арҡаһында 8 йылдан ашыу Италияла йәшәй һәм эшләй алдым. 8 йыл буйы унда ғына йәшәмәнем, республикаға килеп-китеп йөрөнөм. Ситтә йөрөүемә быға тиклем бер ҙә үкенгәнем булманы. Үҙем теләгәнсә йәшәйем, туғандарымдың һәр береһенә тиерлек фатир, машина алырға ярҙам иттем. Италияла оло йәштәге ике өбейҙе ҡараным. Кесе йома - төштән һуң, шәмбе тулыһынса ял көнө иҫәпләнә. Буш ваҡытымда диңгеҙҙә ял итәм. Эш ауыр түгел, ғөмүмән, итальяндар алсаҡ халыҡ, кеше менән яҡшы мөнәсәбәттәләр. Үҙҙәре эшләргә яратмай. Барыһы ла ата-әсәләренән айырым йәшәй, уларҙы ҡарау, тәрбиәләү өсөн кеше яллайҙар. Мин ҡараған әбейҙең улы адвокат ине, ул Италия гражданлығын алырға ярҙам итте. Ҡараған әбейем йәш сағында уҡытыусы булған, шуға күрә телде лә бик тиҙ өйрәндем. Ул таҙа итальян теленә төшөндөрҙө, уның нескәлектәрен аңлатты. Мине күбеһенсә итальянкаға оҡшаталар. Шуғамы, транспортта йөрөгәндә бер тапҡыр ҙа билетымды тикшергәндәре булманы. Кеше ҡайҙа ғына эшләһә лә, уның уңышҡа ирешеүе күп осраҡта үҙенән тора. Рәсәйҙән килеп, эскегә һалышып, фәхишә булып йөрөгән ҡыҙҙарҙы ла беләм. Ҡара һаҡалын артынан эйәреп йөрөй икән, бында ла ҡолас йәйеп көтөп тормайҙар...

**Бына ошондай фекерҙәр ишеттек әңгәмәселәребеҙҙән. Ситтә йөрөүҙең ыңғай һәм кире яҡтары буйынса төрлө дәлилдәр, һандар килтерҙек. Яҡташтарыбыҙҙың ни өсөн ситкә тартылыуының сәбәптәрен һәр кем үҙенсә аңлар һәм һығымтаны ла дөрөҫ яһар, тип уйлайбыҙ. Ғөмүмән, ошо сетерекле тема буйынса гәзит уҡыусыларҙың үҙҙәренән дә фекерҙәр ишетергә теләр инек.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

МӘКТӘП ТАМАШАҺЫ

**Йәмле итеп биҙәлгән зал. Уртаға ҡупшы шыршы ҡуйылған. Бер яҡ ситтә бүләктәр өйөп һалынған. Шыршы эргәһендә ултырғыста һарыҡ ултыра, ҡулында бесән, ул көйшәп-көйшәп ала. Малай менән ҡыҙ килеп инә. Улар алып барыусылар. Малай менән ҡыҙ башта һарыҡты күрмәй, шыршыны ҡарап, урап сығалар.**

# ЯҢЫ ЙЫЛДЫ - ЯҠТЫ УЙ МЕНӘН!



**Ҡыҙ:** Быйыл шыршы бигерәк матур инде, ҡалай балҡып ултыра!

**Малай:** Оҡшамай миңә шыршы ла, шыршы байрамы ла, минең хоккей уйнағым килә, ә һеҙ мине байрам алып барырға мәжбүр итәһегеҙ!

**Ҡыҙ:** Ярар инде, Айнур, тиҙҙән каникулдар башлана, хоккейҙы көн дә уйнай алырһың, ә Яңы йыл байрамы йылына бер генә тапҡыр була.

**Малай:** Ике тапҡыр булһа, мин был байрамдан бөтөнләй ҡасып китер инем - күпме сценарий ятларға кәрәк булыр ине.

*Шыршыны уратып ҡарап сыҡҡас, һарыҡты күреп ҡалалар. Һарыҡ быларға иҫе китмәй генә көйшәп ултыра.*

**Ҡыҙ:** Бәй, һарыҡ, һин нишләп бында?

**Һарыҡ:** Ә ҡайҙа булайым? Мин бына үҙемдең тәхетемдә тапшырырға килдем.

**Малай:** Ниндәй тәхет?

**Һарыҡ:** Йыл тәхетен тапшырам, һарыҡ йылы бөттө бит инде, артабан икенсе януар-кейектәр йылы башлана.

**Малай:** Кемдең йылы быйыл?

**Ҡыҙ:** Маймыл йылы, буғай.

**Һарыҡ:** Буғаймы-түгелме, миңә йыл тәхетен тапшырып, тыныс ҡына ҡураға инеп ятырға кәрәк. Юғиһә, быйыл йыл буйына тыныслыҡ булманы. Саҡ бер нәмә булһын - һарыҡ гәйепле, саҡ бер нәмә булмаһын - шулай уҡ һарыҡ минаҡат. Арытты!

**Малай:** Ә һинән йыл тәхетен ҡабул итеп ала торған маймыл ҡайҙа һуң? Беҙҙә маймылдар йәшәмәй ҙәһә!

**Ҡыҙ:** Эйе шул, маймылды ҡайҙан алабыҙ?

**Һарыҡ:** Ҡайҙан алғанығыҙҙа эшем юҡ, сәғәт 12 тулһа, мин китәм.

**Ҡыҙ:** Туҡта, һарыҡ, ашыҡмай тор, йылды хужаһыҙ ҡалдырып китә алмайһың да инде.

**Һарыҡ:** Ә ниңә ҡалдырып китә алмай, ти. Әйҙә, һин алып ҡал! Булһын әйҙә Ҡыҙ йылы йәки Айгөл йылы.

**Малай:** Ха-ха, Айгөл йылы! Киләһе йыл Гөлнур йылы, унан Әсмә, унан Кәмилә, Зилә йылдары!

**Ҡыҙ:** Юҡ-юҡ, улай була алмай! Хәҙер мин Ҡарһылыуға шылтыратып алайым әле.

*Телефонын сығарып шылтырата башлай.*

**Ҡыҙ:** Ҡарһылыу! Хәйерле көн! Һеҙ юлға әҙерләнәһегеҙме? Беҙ һеҙҙе көтәбеҙ! Тик беҙҙә бер бәлә килеп сыҡты бит әле: маймыл юҡ! Һарыҡ йылы тәхетен тапшырырға маймылыбыҙ юҡ! Хәҙер киләһегеҙме? Хәл итәһегеҙме? Ярай, ярай, көтөп ҡалабыҙ!

**Малай:** Маймыл тапмаһағыҙ, Яңы йыл булмай инде! Ур-ра! Мин хоккей уйнарға китәм!

**Ҡыҙ:** Тороп тор, Айнур, табабыҙ хәҙер маймылды.

**Һарыҡ:** Табығыҙ-табығыҙ, ваҡытығыҙ һынаулы ҡалды. Минең дә маймылды күреп киткем килә.

**Малай:** Мин барыбер аңламайым, ниңә беҙҙең яҡта йәшәмәгән йәнлекте йылдың хужаһы итәбеҙ әле беҙ? Башҡортостанда маймылдар йәшәмәй ҙә инде?

**Ҡыҙ:** Хәҙер Ҡарһылыу килер, берәй нәмә уйлап табыр, борсолмағыҙ.

*Шул ваҡыт Ҡарһылыу килеп инә, ул маймыл етәкләп алған. Барыһы ла аптырашып, маймылға төбәлә. Уныһы һис тик тора алмай, йә Ҡарһылыуҙың итәгенән тартҡылай, йә толомонан тарта, килеп ингәс тә йүгереп барып шыршының уйынсыҡтары менән уйнай, һарыҡтың бесәнен тартып алып, ауыҙына ҡабып ҡарай ҙа, төкөрә.*

**Ҡарһылыу:** Һаумыһығыҙ, балалар! Һауми, Айнур, Айгөл!

**Малай, ҡыҙ:** Һаумы, Ҡарһылыу!

*Үҙҙәре һаман аптырашып маймылды күҙәтә. Маймыл йүгереп йөрөп эш боҙоуҙы дауам итә. Малай менән ҡыҙ уның артынан йөрөп, ул боҙған-болартҡанды йыйып, рәтләп йөрөй.*

**Ҡарһылыу:** Бына, цирҡка барып, маймыл һорап алып торҙом. Бигерәк ҡулсыр инде. Байрамды үткәргәнсе, нисек тә ҡарап ҡына торорға кәрәк булыр.

*Үҙҙәре һаман маймыл артынан йүгерешә.*

**Һарыҡ:** Бә-әй! Һеҙ ошо ғәләмәткә йылды ышанып тапшырырға уйлайһығыҙмы? Байрамығыҙҙы ла, йылығыҙҙы ла пыранзыран килтерә бит ул хәҙер.

**Ҡарһылыу:** Былай изгелекле, аҡыллы ғына йәнлек тә ул...

**Ҡыҙ:** Уйнап туйһа, тынысланыр, моғайын...

**Малай:** Ох! Маймыл менән күңелле булырға оҡшаған! Әйҙә, маймыл, шыршының өҫкө уйынсыҡтарына ла үрелеп ҡара әле, йә, йә, менә алырһыңмы икән?..

*Малай күңелләнеп, маймыл менән шаяра, йүгерешә башлай.*

**Һарыҡ:** Белмәйем, белмәйем, ҡалайтырҙар былар был йәнлек менән... Барыһын да бөлдөрә бит был хәҙер...

*Залға Ҡап-ҡара кейемдәге бер кеше килеп инә. Уның башына ҡара япма ябылған, күҙҙәре генә янып тора. Ул инә лә, Малайҙың маймыл артынан ҡыуып йөрөгәненә ҡарап көлөп тора. Ҡарһылыу уны күреп ҡала.*

**Ҡарһылыу:** Ҡара уй! Һин нишләп балалар байрамына килдең? Кем саҡырҙы бында һине?

**Ҡара уй:** Ә мине саҡырырға кәрәкмәй. Мин үҙем хаҡында уйлағандарын беләм дә, килә һалып етәм.

**Ҡарһылыу:** Кем уйлай әле һинең хаҡыңда!

**Ҡара уй:** Ҡара уй уйлаусылар аҙмы ни? Бына ошо залда ла бар ул күңелһеҙ, ауыр уйҙарға солғанып ултырғандар (Маймылға өндәшә) Бигерәк кенә лә ҡыҙыҡ йәнлек, бигерәк шуҡ. Тыймағыҙ, ниңә баҫтыраһығыҙ уны! Кил, кил, яныма, мин һине улар кеүек тыйырға йыйынмайым!

*Маймыл уның янына йүгереп килә.*

**Маймыл:** Мин ошо кеше менән китәм, ул миңә туйғансы уйнарға рөхсәт итә!

**Ҡарһылыу:** Ул кеше түгел, ә ҡара уй! Ул кешеләрҙең баштарына инеп, уларҙың күңелен төшөрә, төрлө күңелһеҙлектәргә, бәләләргә дусар итә торған көс!

**Ҡыҙ:** Ә мин ни өсөн Айнур киреләнеп, асыуланып аптырата, тим. Ҡара уй яҡынлашып килгәнгә икән дә!

**Һарыҡ:** Был Ҡара уй йыл буйына мине лә йонсотто инде, саҡ ҡына онотолоп торһаң, килә лә инә башҡа. Унан китә бәләләр! Маймылды ла эләктереп алһа, бөттө инде!

*Маймыл йүгереп барып, Ҡара уйҙың артына ҡаса, Ҡарһылыу һәм балалар уны тотоп алмаҡсы булып йүгерешә. Ҡара уй итәктәрен йәйеп, Маймылды ышыҡларға итә. Музыка, баҫтырыш. Шул ваҡыт залға эркелешеп балалар килеп инә. Улар төрлө костюмдарҙа. Маймыл менән Ҡара уй балалар араһына инеп йәшеренә. Ҡарһылыу, Малай, Ҡыҙ, Һарыҡ шыршы уратып йүгереп йөрөгән урындан балалар алдына килеп сыға. Улар тамам аптырап ҡалған. Тиҙ генә өҫ-баштарын рәтләйҙәр. Алан-йолан ҡаранаштар, йылмайырға тырышалар.*

**Ҡарһылыу:** Һаумыһығыҙ, кәҙерле балалар! Беҙ һеҙҙе һағынып көттөк!

**Балалар:** Һауми-һауми, Ҡарһылыу!

**Ҡыҙ:** Хәйерле көн, дуҫтар!

**Малай:** Яңы йыл байрамы менән һеҙҙе!

**Һарыҡ:** Мин бөгөн һеҙҙең менән хушлашам, балалар. Һеҙгә маймылды тапшырып китәм... Әгәр ҙә баҫтырып тота алһаҡ... *(Ҡарһылыу уның ауыҙын баҫа).*

**Ҡарһылыу:** Ҡәҙерле балалар, хәҙер былай итәбеҙ. Уйын уйнап алабыҙ: "Кемдә ниндәй уй бар?" тип атала ул. Бына һинең башында, күңелеңдә ниндәй уй бар? *(Бер балаға төртөп күрһәтә).*

**Бала:** Мин байрамға уйнарға килдем!

**Ҡарһылыу:** *(Икенсе балаға төртөп күрһәтә)* Ә һиндә ниндәй уй бар?

**Бала:** Мин Ҡыш бабайҙан бүләк алырға, йырларға, бейергә килдем!

**Ҡарһылыу:** *(Өсөнсө балаға)* Ә һиндә ниндәй уй бар?

**Бала:** Маймыл менән уйнарға килдем!

*Балаларҙың барыһы ла матур-матур уй-теләктәрен әйтеп сыға.*

**Ҡарһылыу:** Ҡара уй, сыҡ! Балалар һине ҡабул итмәй! Уларҙың уйҙары изге һәм аҡ!

*Ҡара уй алға сыға, маймылды етәкләп алған.*

**Ҡара уй:** Маймыл, һин саҡ ҡына көтөп тор, яйлап мин балалар менән дуҫлашып алайым, уларҙың уйҙарын яулайым да...

**Ҡыҙ:** Юҡ! Беҙҙең башта һиңә урын булмаясаҡ!

**Ҡара уй:** Ә ниңә, бая Айнур минең хаҡта уйланы ла инде...

**Ҡыҙ:** Айнур һинең хаҡта түгел, ә хоккей хаҡында уйланы! Ул спорт ярата, шуға ғына киреләнде, шулай бит, Айнур?

**Ҡара уй:** Һин уның өсөн яуап бирмә! Бына һинең, Айнур, ҡайһы саҡ тәмәке тартҡың, дәрестәр ҡалдырғың, алдашҡың килеп китмәйме ни? Ҡурҡма-ҡурҡма, мин булғанда былар һиңә зыян итә алмай...

*Айнур аптыранып китә. Айгөл алға сыға.*

**Айгөл:** Айнур спортсмен, ул хоккей ярата! Ул тәмәкесе лә, ялҡау ҙа, алдаҡсы ла була алмай!

**Ҡара уй:** Айнур, һинең өсөн ҡыҙҙар яуап бирәме? Төкөр барыһына ла, ҡара уйҙарыңа ирек ҡуй! Бына Маймылға мин барыһын да рөхсәт итәм, уға шундай рәхәт!

*Ҡара уй Маймылдың башынан һыйпаһа, теге йүгереп йөрөп эш боҙа башлай. Унан Ҡара уй ҡара яулығын килтереп сығара ла, балаларҙың баш остарында елпетә - сихырлай. Унан балалар ҙа шаша, ҡотора, уҙ-ара этеш-төртәшә башлай. Тора-бара залда оло ғауға сыға. Барыһы ла баҫтырыша, һуғыша, шау-шыулы музыка яңырай. Ҡарһылыу менән Айгөл балаларҙы тынысландырырға маташа. Шул саҡ залға Ҡыш бабай килеп инә. Уға иғтибар иткән кеше юҡ. Ул ҡарап-ҡарап тора ла, иҙәнгә таяғы менән туҡылдата. Ҡапыл музыка тына. Барыһы ла урындарында ҡатып ҡала.*

**Ҡыш бабай:** Был ниткән эш? Ниндәй ҡотороу уйыны бында? Мин урман-тауҙар үтеп, ашығып киләм, балалар һағынғандыр, көтәләрҙер, тип борсолам!

**Ҡарһылыу:** Асыуланма, Ҡыш бабай, бында бар бәлә Ҡара уйҙан сыҡты. Килде лә, балаларҙың башына үтеп инде. Хәҙер барыһының да башында шул Ҡара уй ғына!

**Ҡыш бабай:** Вәт кемдә икән этлек! Хәҙер урынына ултыртам мин уны!

*Тоғонан ынйылар алып, тирәяҡҡа һибеп сыға:*

**Ҡыш бабай:**

Һәр баланың күңеленә
Ынйы-мәрйен уй һалам!
Ҡара уйҙы баштарынан
Һыпырып, ҡырып алам!
Ҡара уйҙан таҙарынһын
Ауылдар һәм ҡалалар!
Шау-гөр килеп уйнап-көлһөн
Ололар һәм балалар!

*Балаларға йән инә, аптырашып бер-береһенә ҡараша. Ҡара уй йәшеренергә, боҫорға тырыша, тик уны баҫтырып тотоп алалар. Ул Маймылды ла етәкләп алырға итә. Ҡыш бабай Маймылды үҙе етәкләп ала, башынан һыйпай. Маймыл уға һырына.*

**Ҡыш бабай:** Ҡыуығыҙ Ҡара уйҙы, балалар! Киләһе йылда берәүҙең дә башын бутап, бәләләр сығарып, күңелһеҙлектәр сығарып йөрөмәһен! Маймыл йылын матур теләктәр, аҡ хыялдар менән генә ҡаршы алайыҡ!

*Ҡара уйҙы ҡыуып сығаралар. Күңелле музыка яңғырай.*

**Ҡыҙ:** Ҡыш бабай! Беҙ бит һине ҡаршы алырға матур итеп әҙерләнгәйнек!

**Малай:** Нисә көн репетиция яһаныҡ, ә барыһы ла көтөлмәгәнсә килеп сыҡты.

**Ҡыш бабай:** Зыян юҡ, балалар! Иң мөһиме, мин килеп еттем! Маймыл бында! Һеҙ килдегеҙ! Тимәк, байрам була!

**Балалар:** Байрам була! Була!

*Шыршы тирәләй йырлашып әйләнәләр.*

**Һарыҡ:** Миңә китергә лә ваҡыт етте, дуҫтар! Маймылға йыл тәхетен тапшырам! Һәм уға тыйнағыраҡ, етдирәк булырға кәңәш итәм!

**Маймыл:** Мин, әлбиттә, тырышырмын. Әммә миңә уйнарға ла, шаярырға ла ирек бирерһегеҙ инде...

**Ҡарһылыу:** Барыһы ла булыр, Маймыл, йыл - һинеке!

**Ҡыш бабай:** Имен йылға Маймыл шуҡлығы ғына зыян итмәҫ, шулай бит, дуҫтар!

**Һарыҡ:** Һау булығыҙ, балалар! Һау булығыҙ! Яңы йылда һеҙгә тик изге теләктәр генә ҡалдырам!

*Һарыҡ сығып китә.*

**Ҡарһылыу:**

Ап-аҡ ҡына булып йылдар килә,
Һәр берендә хыял-өмөт бар.
Бәхет кенә булып яуһын әйҙә
Елбер-елбер килгән ебәк ҡар.

**Маймыл:**

Шуҡлығымдан ҡотороһам да,
Яуыз түгел минең ниәт.
Килдем һеҙгә, күңелемдә
Йәйғор кеүек уйҙар тейәп.

*Артабан балалар уйнай-көлә, шиғыр уҡый, йырҙар, бейеүҙәр башҡара.*

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

✓ *Үҙеңдең уңыштарыңды күрә һәм баһалай белергә лә кәрәк. Ғөмүмән, сәнғәт, ижад өлкәһендә эшләүселәрҙе тәнҡит тә, маҡтау ҙа урап үтмәҫкә тейештәр, сөнки беренсеһе мин-минлелек тойғоһонан ҡотҡара, икенсеһе ышаныс өҫтәй.*



ИЖАДХАНА

# ТӨП ТӘНҠИТСЕМ - МИН ҮҘЕМ...

**Билдәле бер бейеүсе "Бейеү - поэма, ә ундағы һәр хәрәкәт - һүҙ", тигән. Эйе, бейеү - башҡарыусының ғына түгел, ә тамашасының да иң төпкөл кисерештәрен көсәйтергә һәләтле матур һәм ҡабатланмаҫ ижад. Үҙенә әллә күпме тойғолар һыйҙырған бейеү сәнғәте менән барыһы ла таныш, ләкин айырым кешеләр генә уның сихри асылы, гүзәллеге менән яҡындан аралаша. Шундай бәхетлеләрҙең береһе - Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүсеһе Эльвира МУЛЛАҒОЛОВА.**



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

**▸ Йәшәйеште маҡсатлы, мәғәнәле һәм кәрәкле итеүсе мөһим аспекттарҙың береһе - һөнәр. Һинеңсә, кеше һөнәрҙе һайлаймы, әллә яҙмыштың еңел "ҡулы" менән һөнәр кешене үҙенең ҡармағына "эләктерәме"?**

- Берәүҙәр ғүмерлек һөнәрен үҙе һайлай һәм оло тормош юлын уның менән бергә "үтә". Ә кемдәләр, киреһенсә, теге йәки был һөнәр үҙе килеп таба һәм башҡөллө үҙенә бойһондора. Мин үҙемдә нәҡ икенселәр рәтенә индерәм. Тыуған еремдә - Бөрйән районы Байназар ауылында - сәнғәткә ғашиҡ, йыр-моңға маһир кешеләр йәшәй. Тыуған тупраҡтың ижади мөхите минең күңелемдә лә бала саҡтан сәнғәткә һөйөү уятты, йыр тигән илаһи донъяға әйҙәне. Үҙемде белгәндән бирле гел йырлап йөрөүем хәтерҙә. Һәм күңелемдә лә гел генә киләсәгемде йыр сәнғәте менән бәйләү теләге йәшәне, ә апайым иһә бейеү тип янды. Ләкин яҙмыштың үҙ ҡануны, үҙ ҡағиҙәһе - апайым менән беҙҙең хыялдар алмашынып тормошҡа ашты һәм ул - йырсы, ә мин бейеүсе булып киттем. Шуға күрә һөнәрем мине үҙе һайлап алды, тип ысын мәғәнәһендә әйтә алам.

**▸ Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле күп бейеүселәр өсөн буй етмәҫлек хыял булып тора...**

- Бар донъяға билдәле ансамблдең бер ағзаһы булыу бәхете тейеүенә бик шатмын. Ансамблгә ураү-урау юлдар аша килмәнем. Тәҡдирем шул булғандыр инде - Учалы музыка училищеһында уҡып йөрөгәндә үҡ ансамблгә эшкә саҡырҙылар. Бындай мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырманым һәм ситтән тороп уҡыу булегенә күсеп, Өфөлә эш башланым.

Билдәле бейеүселәр, танылған сәхнә оҫталары менән бергә эш башлау, бер яҡтан, оло мәртәбә булһа, икенсе яҡтан, иңемә ҙур яуаплылыҡ һалды. Тәүге ваҡыттарҙа бик ҡыйынға тура килде, илаған саҡтарым да йыш булды, хатта бөтәһенә лә ҡул һелтәп, ҡайтып китергәмә икән әллә, тигән уйҙар ҙа тыуҙы. Ләкин күңелем менән оло сәхнәне яулап алыу, уның бер өлөшө булып китеү еңелдән түгел икәнен аңлап инем, шуға күрә, тешемде ҡыҫып, үҙ өҫтөмдә эшләнем, оҫталығымды камиллаштырҙым. Ауыр ваҡыттарҙа әсәйемә, уның аҡыллы кәңәштәренә, йылы һүҙҙәренә таяндым.

Ансамбль составында беренсе тапҡыр тамашасы алдында "Гөлнәзирә" башҡорт халыҡ бейеүе менән сыҡтым. Халҡыбыҙҙың мәшһүр, ҡабатланмаҫ бейеүе, берҙән, үҙенең ябайлығы менән арбаһа, икенсенән, ҙур көс, оҫталыҡ, һәләт талап иткән ауыр ижади бейеү. Уның коллектив бейеү булыуы яуаплылыҡты кәметмәй, ә номерҙа ҡатнашҡан һәр бейеүсенән йыйнаҡлыҡ, етди ҡараш һәм оҫталыҡ талап итә. Шуға күрә, ҙур тулҡынланыу менән көтөп алдым беренсе сығышымды. Ҡурҡҡан эш хәйерле була, тигәндәй, барыһы ла шыма үтте, сығышымдан үҙем дә, ансамбль етәкселеге лә ҡәнәғәт ҡалды. Беренсе уңышым миңә ышаныс өҫтәне, дәртләндерҙе, үҙемде ансамблдең айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп тойорға мөмкинлек бирҙе.

Сәхнәләге конкурентлыҡ тураһында күп һөйләйҙәр, күп миҫалдар килтерәләр. Ләкин мин хеҙмәттәштәр араһында килеп сығып торған ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡты конкурентлыҡҡа һылтамаҫ инем. Уйлап ҡараһаң, конкурентлыҡ ижадта, сәхнәләгә генә кҿҙәтелмәй, ул төрлө һөнәр кешеләре араһында ла булыуы мөмкин. Сәхнәлә генә түгел, ә ғөмүмән, тормошта төп конкурент - ул үҙең, үҙеңдең ҡурҡыуың, ялҡаулығың, гәмһеҙлегең. Ошоларҙы еңеп сыҡһаң, барыһы ла яҡшы буласаҡ.

**▸ Нимә ул һинең өсөн бейеү? Образ өҫтөндә эшләгәндә нимәгә иғтибарыңды күберәк йүнәлтәһең?**

- Донъялағы иң юғары ижад өлгөһөнөң береһе булған бейеү кешенең эске донъяһын сағылдырыусы, хис-тойғоларҙы тотоп тороусы йүгәнде ысҡындырыу мөмкинлеге бүләк итеүсе, матурлыҡ иленә юл асыусы, хәрәкәттең ни тиклем нәзәкәтле булыуын күрһәтеүсе сәнғәт. Йәшәйешем ошондай гүзәллек менән тығыҙ бәйле булыуына һәм бейеү сәнғәтендә үҙ урынымды табыуыма шатмын.

Кемдер йөрәгендәге тойғоларҙы һүрәт аша күрһәтә, икенселәр уны йырға һала, ә минең күңел дарьям бейеү аша асыла. Эске донъяң менән сәхнәләге образың бер-береһен тулыландырып килгәндә, бер-береһен яҡшы "аңлап" эш иткәндә генә һәләтле бейеүселәр рәтендә үҙ урыныңды табырға мөмкин. Ләкин был мөһим хәҡиҡәтте аңлау өсөн ваҡыт үтеүе кәрәк, бер бейеүсе лә кемдәндер талабы йәки өйрәтеүе буйынса ғына яҡшыраҡ, оҫтараҡ бейей башламай. Бейеүсе быға үҙе килергә тейеш. Тик шул саҡта ғына уның таланты яңы балҡыштар менән һуғарылып, образдары тулыланып, асылып, байып, тамашасыға барып етәсәк. Шул уҡ ваҡытта бейеүсенең һәр хәрәкәте теүәл, шыма, техник яҡтан камил булырға тейеш.

Һәр бейеүсенең ниндәйҙер кимәлдә актер булыуы мөһимдер, тип уйлайым. Ләкин артыҡ "уйнарға" ла ярамай, сөнки был яһалмалыҡҡа килтерә һәм бейеүҙең йәмен ебәрә. Коллектив бейеүҙә һәр кем үҙе образ тыуҙырырға тырышырға түгел, минеңсә, ә тотош коллектив менән дөйөм образды булдырыу өҫтөндә эшләргә тейеш. Яңғыҙ бейеүҙәрҙә генә образ өсөн бөтә яуаплылыҡ бер кеше өҫтөнә төшә һәм уны лайыҡлы башҡарыу бейеүсенән бөтә һәләтен, тырышлығын һалыуҙы талап итә. Быларҙың барыһына ла өлгәшеү өсөн тәбиғәт тарафынан бүләк ителгән талант ҡына етмәй. Уға өҫтәп үҙ өҫтөңдә туҡтауһыҙ эшләү, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ, оҫталыҡты камиллаштырыуға ынтылыш кеүек сифаттарҙы ла яҡын дуҫың итергә кәрәк.

Бейеүҙең уңышлы булыуында шулай уҡ музыка, костюмдар, сәхнә биҙәлеше лә мөһим роль уйнай. Улар бейеүсенең һәләте, хәрәкәттәрҙең камиллығы менән бергә үрелеп килгәндә генә матур, күркәм сәхнә байрамы тыуҙырырға мөмкин.

**▸ Тәнҡит, маҡтау һүҙҙәре тураһында һөйләшеп алайыҡ әле... Һинеңсә, ижад кешеһенә күберәк тәнҡитме, әллә маҡтау һүҙҙәре яуырға тейешме?**

- Ижади яҡтан үҫеү өсөн кемгәлер шелтәләү, ҡатылыҡ кәрәк булһа, икенселәргә тик маҡтау һүҙҙәре һәм йомшаҡ мөғәмәлә генә ярҙам итә. Миңә ике мөнәсәбәт тә берҙәй файҙалы. Әрләйҙәр икән, мин тағы ла нығыраҡ сәмләнеп бейейем, үҙем өҫтөндә күберәк эшләйем, репетициялар ваҡытында бөтә тырышлығымды һалам, ғөмүмән, ҡатылыҡ менән мине һындырырлыҡ түгел. Әгәр ҙә маҡтап ебәрһәләр, дәртләнеберәк баҫам, ҡанатланып бейейем, ләкин йүгәнде бушатмайым, эшемә ҡарата һүлпәнлек булдырмайым. Шелтәләү, тәнҡит һүҙҙәре миңә бер төрлө тәжрибә бирһә, маҡтап өндәшеүҙәре икенсе яҡтан ҙур тәжрибә өҫтәй.

Ләкин ижадымдың төп тәнҡитсеһе - мин үҙем. Сығыштарымдың һәр береһен ҡаты тәнҡит күҙлеге аша үткәрәм, оҡшамаған урыны булһа, уның өҫтөндә эшләйем һәм икенсе тапҡыр бейегәндә ул хатаны ебәрмәйем. Яҡындарым менең ижадымды һәр ваҡыт хуплап, маҡтап, миңә "перәник" кенә тотторор торһа, үҙем ҡамсыны ҡулдан ысҡындырмайым. Шулай ҙа кеше һәр ваҡыт үҙенең эшенән ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо кисерә алмай, үҙеңдең уңыштарыңды күрә һәм баһалай белергә лә кәрәк. Ғөмүмән, сәнғәт, ижад өлкәһендә эшләүселәрҙе тәнҡит тә, маҡтау ҙа урап үтмәҫкә тейештәр, сөнки беренсеһе мин-минлелек тойғоһонан ҡотҡара, икенсеһе ышаныс өҫтәй.

**▸ Гастролдәр бейеүсегә нимә бирә? Үҙебеҙҙәге һәм башҡа яҡтарҙағы тамашасыны нисек баһалар инең?**

- Гастролдәр - бейеүсе тормошоноң айырылғыһыҙ өлөшө. Ситтә сығыш яһау уны ижади яҡтан байыта, яңы тәьҫораттар, хис-тойғолар, кисерештәр бүләк итә. Шулай уҡ ижадсыға икенсе төбәктәге, илдәге залдың уны нисек ҡабул итеүен күреү ҙә мөһим, сөнки был бейеүҙе башҡарыуҙағы бертөрлөлөктән арындыра, үҙеңә икенсе күҙлектән сығып ҡарау мөмкинлеге бирә.

Күп илдәрҙә, Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә сығыш яһарға тура килә. Башҡортостан, Рәсәй тамашасыһы үҙенең мәҙәниәтенә, сәнғәтенә, ижади мираҫына һаҡсыл ҡарашы, һөйөүе менән күңелдәрҙе арбай. Сит илдә иһә беҙ, тәү сиратта, икенсе илдең мәҙәниәтен көүҙәләндереүсе булып торабыҙ. Репертуарыбыҙҙа төрлө халыҡтың бейеүе булһа ла, сит илдәрҙә башҡорт, урыҫ бейеүҙәренә иғтибар күберәк төшә.

Бейеү кино, театр сәнғәтенән айырмалы рәүештә, һүҙ менән оҙатылмай, ниндәйҙер өҫтәмә махсус әйберҙәр менән тулыланмай. Тамашасыға беҙ тик бейеүсенең хис-тойғолары менән һуғарылған һәм музыкаға "төрөлгән" хәрәкәттәр генә тәҡдим итәбеҙ. Шуға күрә уны аңлау өсөн ниндәйҙер кимәлдә әҙерлекле, рухи яҡтан бай тамашасы булырға кәрәктер, тип уйлайым. Ҡайһы бер сығыштар ваҡытында шундай тамашасыға юлыҡһаң - ул сығышты иғтибар менән ҡарай кеүек, әммә иң мөһимен күрмәй, тоймай. Шулай уҡ залда гәмһеҙ, битараф тамашасының да булыуы мөмкин. Улар күп түгел, ләкин бар. Бындай тамашасы менән үҙебеҙҙә лә, сит илдәрҙә лә осрашырға тура килә. Шулай ҙа, ҡыуанысҡа күрә, күпселек тамашасы бейеүҙең бар эстәлеген аңлап, нескәлегенә төшөнөп ҡарай. Ундай дәртле, дарманлы, күҙҙәренән осҡон сәсрәп торған тамашасы алдында сығыш яһауы ла ифрат күңелле һәм еңел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бейергә барыһы ла өйрәнә ала, тик уны юғары сәнғәт әҫәре итеү оҫталығы бөтәһенә лә бирелмәгән. Һоҡландырғыс, күҙҙе ҡамаштырырлыҡ, илһамландырырлыҡ сәхнә өлгөһө тыуҙырыу өсөн бейеүсенең һәләте сабырлыҡ, тырышлыҡ һәм үҙ эшенә бирелгәнлек менән тулыланып килергә тейеш. Бөгөнгө геройыбыҙҙың таланты нәҡ ошо сифаттар менән бергә үрелеп килеп, унан сәхнә күрке булған бейеүсе яһай ҙа инде.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Тик үҙ-үҙең менән көрәшеп, үҙеңде еңгәндә генә был сирҙән арынырға була. Икенсе төрлө әйткәндә, эскелеккә ҡаршы көрәш, ул иң беренсе нәүбәттә, ҡан менән аң һуғышы. Ҡан талап иткәндә аң менән еңеүе еңел түгел.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМ КҮПМЕ БИҘӘНӘ?

■ Британия ғалимдары иҫәпләп сығарыуынса, ҡатын-ҡыҙ биҙәнеү өсөн йылына 91 сәғәт исраф итә икән. Ғүмер оҙайлығын уртаса 70 йәш тип алабыҙ икән, ҡатын-ҡыҙ косметикаға ғына 43 аҙна бүлә. Әммә төрлө төбәктә йәшәгән гүзәл заттарҙы айырып ҡарай башлаһаң, был уртаса һандар бер-береһенән айырылып тора. Мәҫәлән, көньяҡта йәшәүселәр төньяҡта йәшәүселәргә ҡарағанда макияжға ваҡытты күберәк бүлә. Йылы яҡта көн итеүселәр араһында биҙәнеү өсөн көнөнә 45 минут тотонғандар 12 процент, һыуыҡыраҡ төбәктәрҙә йәшәүселәр араһында бындайҙар 8 процент ҡына. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 13 проценты бөтөнләй косметика ҡулланмай. 9 процент респондент биҙәнмәйенсә өйҙән сыҡмауын белдергән. 1 процент - спорт менән шөғөлләнгәндә лә макияж ҡуллана.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, айына бер тапҡыр ғына түшәк-ҡаралтыларын таҙаһына алыштырыусылар аллергия менән йышыраҡ яфалана. Шуға ла йоҡо бүлмәһе иң аллерген бүлмә иҫәпләнә. Исемлектең икенсе урынында ҡунаҡ бүлмәһе, унан һуң аш бүлмәһе тора. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, аллергияны түбәндәге аллергендар - саң талпаны, хайуандарҙың йөнө, үңәҙ тыуҙыра. Аллергияның иң беренсел билдәләре - сөскөрөү, күҙҙәр ҡысытыуы, тире бүртеп сығыуы.

■ Ҡайһы берәүҙәр ябығыу өсөн диета тотҡандан һуң ит ризыҡтарынан баш тарта. Бындай кешеләргә соя нигеҙендәге диета тоторға мөмкин, ти табиптар. Соя - тәбиғи продукт, ул насар холестерин күләмен кәметә, майҙарҙы яндырырға булышлыҡ итә. Әммә соя продукттарын ун көндән дә оҙағыраҡ ашарға ярамай. Диета мәлендә тулыһынса тәм-томдан, икмәктән, макарондарҙан, картуфтан баш тартырға кәрәк. Йәшел сәй һәм һыу эсеү файҙалы.

■ Табиптар әйтеүенсә, ғүмер оҙайлы булһын өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Бәхтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, АҠШ-та йәшәүсе Дэйзи Макфадден уларҙың миҫалына эйәреп, емеш-еләк, балыҡ, йәшелсә менән туҡлана, уға ноябрь айында 101 йәш тулған. Оҙаҡ йәшәүселәр кәңәш итеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай уҡ ҡайһы берҙә үҙеңә яраҡлаған аҙыҡтарынды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 13-сө һабаҡ: "Сирме, ауырыумы?"

Эскелек - сирме, әллә ауырыумы? Баш ауырығанда - ауырыу, оҙаҡҡа китһә - сир, тип әйтер берәү. Был һорауға яуап бирер алдынан тәүҙә сир менән ауырыу төшөнсәләренә аңлатма биреп китергә кәрәктер. Ысынлап та, көнитмешебеҙҙә йыш ҡабатларға мәжбүр булған ошо ике һүҙҙең мәғәнәһе, төп асылы нимәгә ҡайтып ҡала һуң?

Әйтергә кәрәк, беҙ күп осраҡта сир һәм ауырыу һүҙҙәрен бутайбыҙ, йәғни береһенең урынына икенсеһен әйтеп, яңылышабыҙ шикелле. Һүҙҙәрҙе бутау уларҙың төшөнсә булараҡ мәғәнәләрен аңлап бөтмәүҙән килеп сыға. Минеңсә, сирҙең мәғәнәһе, уның асылы кеүек үк, тәрәнерәк. Юҡҡа ғына "Сирен йәшергән - үлгән" тимәйҙәр. Медицина теллөгәте менән аңлатһаҡ, сир - ул хроник ауырыу, йәғни кешене оҙайлы йылдар, ҡайһы саҡ ғүмер буйы яфалаған михнәт. Сир кешенең ҡанында һаҡланып, булмышына күсәлер ул.

Ә ауырыуға килгәндә, әйтәйек, киҙеү, миҙгел-миҙгел булып, үтеп китә торған ыҙа, әммә сир кеүек михнәт түгел. Сир һүҙе ҡәтғи яңғырай, тимәк, ниндәйҙер ауырыу кисергән кеше: "Мин сирләйем", - тип әйтә икән, ул үҙенең түбәнге аңына сирҙе һалып ҡуя, үҙе лә ошо һүҙ энергетикаһына бирелә, һөҙөмтәлә, ысынлап та, сирләй башлай.

Араҡы эскән, хатта унда-бында, байрам уңайынан ғына булһа ла, йөҙәр грамм төшөргән кеше үҙенең оло сиргә тарығанын беләме икән? Ай-һай, белмәйҙер. Сөнки ул ниндәй ваҡыт арауығында һәм күпме эсеүгә ҡарамаҫтан, барыбер сиргә тарый. Хатта үҙ ғүмерендә бер тапҡыр йөҙ грамм ғына эскән кеше лә - сирле. Тағы ла, ҡасандыр эсеп, 12 йыл буйы бер тамсы ла ауыҙына алмаған кеше - шул уҡ эскесе, ҡатыраҡ итеп әйтһәк - алкоголик. Сөнки ҡандың алкоголь тәьҫиренән тулыһынса ҡотолоу ваҡыты 13 йыл. Был һанды мин уйлап сығарманым, тәжрибәле нарколог-тың дәлилдәрен генә килтерәм.

Әйткәндәрем ышандырырлыҡ булһын өсөн шундай сағыштырыуҙар килтерәйек. Әйтәйек, ҡош ояһын күҙ алдына баҫтырайыҡ әле. Яҙ еткәс, оя эсендәге йомортҡаларҙы туҡ-туҡ ярып, себештәр, бәләкәй ҡошсоҡтар донъяға ярала. Инә һәм ата ҡош балаларына ашарға ташып өлгөртә алмай мәж килә. Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡошсоҡтарҙың суҡыштары һәр саҡ икегә айырылған була, ауыҙҙары ябылмай тиерлек, үҙҙәре бер туҡтауһыҙ ашарға таптырып сырылдай. Улар өсөн ата-әсәһе эй өҙгөләнә: ергә төшә, селәүсен-бөжәктәрҙе эләктерә һалып, ояға осоп менә. Береһенә ҡаптырыуы була, башҡалары алдағынан да сағыуыраҡ итеп сырылдай, йәнә лә ашарға таптыра башлай. Хәйер, был күренеш барыбыҙға ла таныш. Был хәл көнө буйына дауам итә. Ҡошсоҡтарын туйҙырам тип ата-әсәһенең "сәсе ағара".

Беҙ алда һөйләгән хәлдәргә был ҡошсоҡтарҙың ниндәй ҡыҫылышы бар һуң, тиһегеҙме? Бар шул.

Баҡтиһәң, беҙ ҡабул иткән барлыҡ ризыҡтарҙың да ашҡаҙанда уларҙы эшкәртә торған һуты, аш һеңдергес ферменты була икән. Тик спиртлы эсемлектәр генә бында саҡырылмаған ҡунаҡ, йәғни уны был йортҡа әйҙүкләп тороусы юҡ. Шуға күрә лә, беҙ әҙ генә эсһәк тә, шарап градусының быуы еңелсә генә башҡа сыҡҡанын тоябыҙ. Нисек башҡа сыға икән ул, тиһегеҙме? Ашҡаҙанда ҡәҙер-хөрмәт күрә алмаған шарап үсегеп, бауыр аша ҡанға сыға ла китә икән ул. Үәт әй!

Етмәһә, спиртлы эсемлектәрҙе эшкәртеү өсөн ҡан "һауыттарында" һәм юлдарында махсус "автоном ферменттар" барлыҡҡа килә. Ана шул ферменттар инде, әлеге лә баяғы, астан-ас ҡошсоҡ балалары. Ҡош балалары, исмаһам, үҫеп етеп, ҡанат нығытҡас, ризыҡ эҙләп үҙҙәре осоп китә, артабан ата-әсәһен ыҙалатмай. Уларҙан айырмалы, фермент-ҡошсоҡтар ғүмер баҡый кеше елкәһендә йәшәргә өйрәнгән "әрәмтамаҡтар". Улар мәңге туя белмәй торған "бирәнҡорһаҡ". Кеше ни тиклем күберәк һәм йышыраҡ эскән һайын, шул тиклем ҡатыраҡ асыға һәм үҙҙәре "ашаған һайын", һандары ла меңәрләп-миллионлап арта бара. Бына һиңә кәрәкһә!

Беҙ, бигерәк тә иртәнсәк, эске килеү теләгенә ҡаршы тора алмайбыҙ. Ә нимә һәм нисек була һуң эске килеү теләге? Әйтер инем, ана шул ҡошсоҡ-ферменттарҙың "ашарға таптырып" сырылдауы, йәғни баш мейеһенә ебәргән SOS сигналдары икән дә. Һе, кисә үлгән булһам, бөгөн белмәгән булыр инем, тиһеңме?

Мин дә ҡасандыр быларҙың береһен дә белмәй инем, иртәнсәк рәхәтләнеп баш төҙәттем, ҡошсоҡтарға ем һибеп, ваҡытлыса тынысландырҙым, тик иртәгеһен "себештәрем" тағы ла артты, тағы ла тынысландырҙым, тик улар күп булғас, "емде" лә мулыраҡ һибергә тура килде. Әммә баш мейем тауыҡ кетәгенә әүерелеп барған саҡта ҡапыл һиҫкәнеп киттем һәм йөрәгемдең тибешен тыңларға булдым. Дөрөҫөрәге, уның тигеҙһеҙ тибеше бер аҙға туҡталыуымды, ҡолаҡ һалыуымды талап итте. Әммә йөрәгемдең тауышын ҡан тамырҙарымды, булмышымды яулап алған ҡошсоҡ-ферменттарҙың "оркестры" шауы күмгәйне. Хатта теге ашарға таптырыусылар баш мейемде үтеп, ҡолаҡ төбөмдә саң ҡағалар.

Шуның өсөн дә эсеүҙе ташлағандың тәүге көндәре, айҙары, йылы бик ауырға тура килде. Бер уйлағанда, хатта ашарға таптырып туҡтауһыҙ илаған сабыйыңа боролоп та ҡарамаған әсә кеүек тә тояһың үҙеңде. Уларҙың хәлен уйлап, ашарға бир, әммә биргән һайын улар тағы ла күберәк таптыра.

Эсеүҙән туҡталһаң, фермент-ҡошсоҡтар ҡайҙа була, ни эшләй, тиһегеҙме? Был һорауға ҡаршы һорау: кеше оҙаҡ ашамай торһа, ни өсөн йөҙө һурыла, ябыға? Сөнки ашҡаҙан тәнгә быға тиклем йыйылған һәм быуындарға ултырған артыҡ майҙы, бер һүҙ менән әйткәндә, "балласты" һурып алып, эшкәртә башлай. Шуның кеүек, сигнал ебәреп, туҡтауһыҙ сырылдап төңөлгән ҡошсоҡ-ферменттар, ахыр сиктә, бер-береһен ашай башлай. Уларҙың иң һуңынан ҡалған икәүһе, кеше эсеүен ташлағандан теүәл 13 йыл тулыуға, бер-береһен ашап һәләк була. Айыҡ тормош хаҡына, ҡандан ҡошсоҡ-ферменттарҙы ҡыуып сығарыу өсөн барған "Бөйөк Ватан һуғышы" ана шулай тамамлана.

Йә, хәҙер кемегеҙ, эскелекте сир түгел тип, әйтә алыр? Сирҙең дә ниндәйе бит әле - аҡсаға һатып алынғаны. Әле минең дә эсеүемдән ҡотолоуыма 13 йыл ваҡыт үтмәгән. 11 йылдан ашыу. Тимәк, мин һаман да эскесе булып иҫәпләнәм. Ниндәй оят һәм ҡурҡыныс!

Тик үҙ-үҙең менән көрәшеп, үҙеңде еңгәндә генә был сирҙән арынырға була. Икенсе төрлө әйткәндә, эскелеккә ҡаршы көрәш, ул иң беренсе нәүбәттә, ҡан менән аң һуғышы. Ҡан талап иткәндә аң менән еңеүе еңел түгел, әммә иң еңел ысулы ла бар бының. Ул да булһа, тыуғандан алып бөтөнләй эсмәү.

Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең иртәнсәк баштары ауыртыуына еңел генә ҡарай, йөҙ грамм ғына эсәм дә, барыһы ла үтәсәк, тип үҙ-үҙен ышандыра, дөрөҫөн әйткәндә, алдай. Шул сағында микроскоп аша уға үҙенең ҡан тамырҙарында нимәләр булғанын күрһәтергә ине һәм эскелеккә ҡаршы шунан да яҡшыраҡ сара ҡалмаҫ ине. Күҙ алдына килтерегеҙ, араҡы-шараптың шойҡаны ҡан тамырҙарына килеп инә, ундағы миллион ҡошсоҡ-ферменттар рәхәтләнеп "туй" үткәрә лә, таҡтан йоп була. Бер аҙҙан һуң уларҙан тағы ла шунсама "себеш" ярала. Артабан инде ике миллион әрәмтамаҡ ашарға таптыра башлай, "бәпес туйы" үткәрергә рәт талап итә.

Хәҙер фәнни-техник революция заманы, бәлки, быларҙың барыһын да кешеләргә күрһәтеү мөмкин булған көндәр ҙә килер. Әлегә шуны ғына белегеҙ: һеҙ рюмкаға үрелгән саҡта, ҡан тамырҙарығыҙҙағы суҡыштарын асып сырылдашҡан себештәрҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Бәлки, уларҙың бер-береһен ашар ваҡыты килеп еткәндер?

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

**Һуңғы йылдарҙа балсыҡ ашауға, уны ҡулланып дауаланыуға иғтибар бермә-бер артты. Минең тормошомда ла ул ярайһы ғына ҡулланылыш таба. Ваҡыты-ваҡыты менән мин уны ашайым, кәрәк саҡта балсыҡлы һыуҙы күҙемә тамыҙам. Кистәрен тешемде лә йыш ҡына балсыҡ менән таҙартып, йоҡоға талам.**

# БАЛСЫҠТЫ АШАРҒА ЛА...

## уның менән дауаланырға ла мөмкин

Йәй башында гайморит менән ауырып, танауымды тиштергәйнем. Ләкин был алым сирҙе еңеләйтмәне. Шунан танауыма балсыҡлы һыу тамыҙа башланым. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне. Сир үтте.



Шифалы һыуҙы мин Баймаҡ яғынан килтерелгән балсыҡтан эшләйем. Уны әҙерләү ауыр түгел. Бер сынаяҡ һыуға бер балғалаҡтан саҡ ҡына әҙерәк балсыҡ һалаһың да ағас ҡалаҡ менән болғатаһың. Болғаған ваҡытта теләк әйтәһең. Был ваҡытта китап уҡыу, кеше менән һөйләшеп тороу, телевизор ҡарау тыйыла. Кешенең ете биҙрә самаһы һыуҙан, ун биш ҡаҙаҡ балсыҡтан торғаны мәғлүм бит инде һеҙгә. Һөйәктәребеҙ тыуған еребеҙҙең балсығынан тора, бөтә үҫемлектәр шунан көс-ҡеүәт алып үҫә. Үҫемлектәрҙе ашап, беҙ ҡаныбыҙҙы байыҡтырабыҙ, һөйәктәребеҙҙе нығытабыҙ. Шуға, теләк әйткәндә эреләнеү, вайымһыҙлыҡ күрһәтеү тыйыла ла инде.

Һыуҙы биш минут самаһы талғын ғына болғатҡандан һуң, сынаяҡты тәҙрә төбөнә ҡуяһың. Дүрт сәғәт үткәс, балсыҡ ултыра, һыу өҫтә ҡала. Шул һыуҙы икенсе сынаяҡҡа ҡойорға кәрәк. Тағы дүрт сәғәттән һуң һыуҙың өстән бер өлөшөн, тап-таҙа булһа ла, сынаяҡта ҡалдырып, ҡалған өлөшөн быяла һауытҡа ҡойоп алаһың. Уны өс көн бүлмәлә тотһаң да, балсыҡлы һыу боҙолмай. Тик әҙерләгән ваҡытта тимер һауыт ҡулланырға ярамай. Буялмаған ағас һауыт ифрат яҡшы. Һыуҙы шишмәнән алыу яҡшыраҡ. Ҡайнатырға ярамай. Крандан ағып торған һыуҙы ҡулланмағыҙ, сөнки ул тимер торбалар аша үткәндә шифаһын юғалта.

Ишетеп беләһегеҙҙер, 1921 йылда Волга буйы төбәктәрен ҡаты аслыҡ солғап ала. Шул мәлдә балсыҡ күп кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалыуға ярҙам итә. Уны ашамлыҡтар менән бер рәттән баҙарҙарҙа ла һатҡандар. Аслыҡтан йонсоған кешеләр шул балсыҡ менән туҡланған. Аҙағыраҡ ғалимдар уның составында үҫемлек ҡалдыҡтары һәм башҡа органик матдәләр барлығын асыҡлаған. Ошо матдәләр кешене үлемдән ҡотҡарып алып ҡалыуға булышлыҡ иткән дә инде.

Үткән йәй мин осраҡлы рәүештә бер танышым менән балсыҡтың шифалы сифаттары хаҡында әңгәмәләшеп киттем. Ул Белорет районының бер ауылында урындағы халыҡтың әле лә аҡ балсыҡ ашауы хаҡында һөйләне. Был ғәҙәт бик борондан килә икән. Шуныһы ҡыҙыҡ, был ауылда уны тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына ашай. Бигерәк тә йөклө саҡта. Минең танышым ҡайынбикәһенә үҙенең дә ваҡыты-ваҡыты менән балсыҡ ашауы хаҡында әйткән. "Атаҡ-атаҡ, уны ирҙәр ҙә ашаймы ни? Беҙҙә уны ҡатындар ғына ашай, - тип ғәжәпкә ҡалған ҡайынбикәһе. - Минең ҡыҙым йөклө саҡта балсыҡты күпләп ашаны".

Шул уҡ танышым миңә үҙенең һеңлеһе тураһында ла һөйләп китте. Был ҡыҙ бала саҡтан күмер, көл, аҡбур ашап үҫкән. Шуның өсөн ағалары һеңлеһенә "Күмер" тигән исем таҡҡандар. Ошо ҡушаматты үҙе менән алып йөрөп, юғары белем ала, уҡытыусы булып, Ейәнсура районына эшкә китә. Шунда кейәүгә сыға, матур ғаилә ҡороп, бәхетле генә йәшәп китә. Үткән йыл шул ҡатын Өфөгә белемен камиллаштырыу өсөн уҡырға килә. Ағаһында туҡтай. Тәүге көндә үк курстан ҡайтҡас, тәҙрә төбөндә ултырған аҡ балсыҡты күреп ҡала. Танышым уны Баймаҡ районынан килтергән була. Һеңлеһе ярты литрлыҡ балсыҡты бер аҙнала ашап бөтөп, ағаһы менән еңгәһенә рәхмәттәр әйтеп, Ейәнсураһына кире ҡайтып китә. "Бигерәк оҡшаны балсығығыҙ, - ти ул ҡайтыр алдынан. - Мин балсыҡты Ырымбур өлкәһенән алдырып ашайым. Тик уның тәме икенсерәк". Танышым көлөмһөрәп: "Был бит Баймаҡ балсығы. Тыуған ауылындың эргәһенән алып килengән. Ата-бабаларыбыҙ шундай васыят әйтеп ҡалдырған: балсыҡты танһыҡ күрһәгеҙ, тыуған ерегеҙгә яҡыныраҡ урындан алып ашағыҙ".

Ашай торған балсыҡ Баймаҡ районында бер нисә урында сығарыла. Талҡаҫ күленән алыҫ булмаған урында күгелйем төҫтәге балсыҡ ятҡылығы бар. Ошо төҫтәге балсыҡ, әйткәндәй, иң файҙалыларҙан иҫәпләнә. Уны башҡа төбәктәрҙән һатып алам тиһәң, килоһы ярты мең һумға төшә. Бынан йөҙ-йөҙ илле йыл элек Рәсәйҙең күгелйем балсыҡ менән әүҙем сауҙа итеүе билдәле. Сауҙа итеүсе ойошмалар был тауарҙы алтынға ғына һатҡан - ҡағыҙ аҡса, әйберҙәр бындай балсыҡҡа торошло түгел, тип иҫәпләнгән.

Талҡаҫтан Ҡанаға илткән юлдың уң яғында аҡ балсыҡ ятҡылығы эшкәртелә. Ҙур булмаған тәрәнлектә ул матдә ҡатлам булып урынлашҡан. Мин, Әбдрәхим улы Самат, шул балсыҡты ашау өсөн дә, дауаланыу өсөн дә ҡулланам. Бик сифатлы балсыҡ - бармаҡ араһына һалып иҙһәң, өҫтө майланған кеүек тойола. Тел менән тейһәң, уға һәйбәт йәбешә. Иләп алһаң, он кеүек була үҙе.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы, профессор.**
**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*

# МУЙЫНҒА ЛА КҮНЕКМӘ КӘРӘК



**Арҡа, баш ауырта, баш әйләнә, күҙ алдары ҡараңғылана, ҡолаҡ ишетмәй йәки йыш шаулай, координация боҙолоу һөҙөмтәһендә атлап йөрөү насарая... Таныш билдәләрме? Эйе, тип яуап бирәһегеҙ икән, тимәк, муйын остеохондрозының тәүге билдәләрен күҙәтәһегеҙ. Хеҙмәтем компьютер менән бәйле булғас, даими уның артында ултырыу һөҙөмтәһендә яйлап муйын остеохондрозы барлыҡҡа килә башлағайны. Мин уны интернеттан алынған ошо күнегеүҙәр ярҙамында бөтөрҙөм. Бының өсөн әллә күпме ваҡыт та кәрәкмәй, бары тик күнегеүҙәр эшләүҙе үҙегеҙҙең ғәҙәтегеҙгә индереп алыу ғына мөһим.**

- Эйәгегеҙҙе эйегеҙ һәм башығыҙҙы тәүҙә уң яҡҡа биш тапҡыр, һуңынан һул яҡҡа биш тапҡыр тулы түңәрәк яһап әйләндерегеҙ.
- Эйәгегеҙҙе саҡ ҡына күтәрегеҙ һәм ошо уҡ күнегеүҙе ике яҡҡа ла бишәр тапҡыр ҡабатлағыҙ.
- Башығыҙҙы бишәр тапҡыр тәүҙә - уң, һуңынан һул ҡулбашҡа һалығыҙ, ҡолағығыҙ менән ҡулбашығыҙға тейергә тырышығыҙ.
- Башығыҙҙы тура тотоғоҙ. Көсөргәнештә булған мускулдарығыҙҙың ҡаршылығын еңеп, эйәгегеҙҙе мөмкин тиклем алға эйегеҙ. Баш түбәһе был ваҡытта өҫкә тартылырға тейеш.
- Усығыҙҙы маңлайығыҙға ҡуйып, маңлайығыҙ менән баҫығыҙ, муйынығыҙҙың мускулдары көсөргәнештә булһын. Күнекмәне етешәр секунд өс тапҡыр башҡарығыҙ.
- Муйын мускулдарын көсөргәндереп, һул сикәгеҙ менән өс тапҡыр етешәр секунд дауамында һул ҡулығыҙға баҫығыҙ. Һуңынан өс тапҡыр етешәр секунд уң сикәгеҙ менән уң ҡулығыҙға баҫығыҙ.
- Эйәгегеҙ тура, ҡулдарығыҙ соңҡала. Соңҡағыҙ менән ҡулдарығыҙға өс тапҡыр етешәр секунд дауамында баҫығыҙ.
- Ҡул бармаҡтарығыҙҙы тоташтырып, эйәк аҫтына ҡуйығыҙ. Эйәгегеҙ менән ҡулдарығыҙға өс тапҡыр етешәр секунд баҫығыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Икенсе сер

Хәҙер, әйҙәгеҙ, ҡайһы бер нәмәләрҙе асыҡлап үтәйек. Мин һеҙ балаларығыҙға, дуҫтарығыҙға, ғаиләгеҙгә ярҙам итергә тейеш түгелһегеҙ тимәйем. Бары тик уларҙың азатлығын сикләмәҫкә һәм үҙҙәренең үҫеше өсөн нимә кәрәк тип иҫәпләйҙәр, шуны эшләү хоҡуғын бирергә тейешлегегеҙ хаҡында ғына әйтергә теләйем. Һеҙҙең ярҙамығыҙ уларҙы яратыуҙы, хуплауҙы һәм ҡаҙаныштарын таныуҙы үҙ эсенә алырға тейеш. Былар үҫештең улар бары тик тыштан ала аласаҡ мөһим элементтары. Финанс ярҙамы менән дә һаҡ булырға кәрәк. Балаға матди ярҙам күрһәтеү теләгендә лә бер ниндәй насарлыҡ юҡ, әммә аҡсаны бары тик кире ҡайтарыу шарты менән генә бирергә кәрәк.

Үҙлеге булмаған кешеләргә теләгән нәмәләрен алыу өсөн үҙен уратып алыусылар менән манипулировать итеүҙән башҡа сара ҡалмай. Әгәр һеҙ үҙ көсөгөҙгә ышанаһығыҙ икән, үҙегеҙҙең башҡаларға йоғонто яһау һәләтегеҙ һәм уларҙы үҙегеҙҙең ихтыяжығыҙҙы ҡәнәғәтләндерергә мәжбүр итеүегеҙгә бәйле буласаҡһығыҙ. Маҡсатығыҙға өлгәшеү өсөн ситтән күрһәтелгән ярҙам менән файҙаланып, һеҙ улар һеҙгә күпме ярҙам итә ала, шунса ғына алға барасаҡһығыҙ. Әгәр һеҙҙең балаларығыҙ булһа, уларҙың иллюзиялар әсирлегендә ҡалыуына булышлыҡ иткән һәр аҙымығыҙҙы күҙәтеп барығыҙ, сөнки бының өсөн ул киләсәктә ҡиммәт түләйәсәк.

### Фаталь конформизм

Күптәребеҙ бер ниндәй мөһим ҡарар ҡабул итмәйенсә үҫә. Ололар даими рәүештә беҙҙе ҡарар ҡабул итеү мөмкинлегенән мәхрүм итеп, барыһын да үҙҙәре хәл итә. Әгәр беҙ фекер белдерергә йәки үҙ һүҙебеҙҙә торорға тырышһаҡ та, был бер ваҡытта ла иғтибарға алынмай. Һуңғы һүҙ һәр саҡ ата-әсәләр ауыҙынан сыға. Беҙ йә уларҙың талабы менән килешәбеҙ, йә уларҙың талабынан үҙебеҙгә ниндәй ҙә булһа файҙа сығарырға тырышабыҙ.

Өлкәнәйә башлағас, артабан үҙебеҙгә ҡарар ҡабул итергә тура киләсәген аңлайбыҙ. Был тойғолар бер аҙ ҡурҡыта ла, сөнки ябай үҫмер алда нимә көткәнен дә белмәйенсә тышҡы донъяға сыға. Ата-әсәләр һәм мәғариф системаһы бала тәрбиәләүҙәге ошо мөһим һәм кәрәкле элементҡа күҙ йома.

Тап ошо этапта күптәр конформизм тураһында фаталь ҡарар ҡабул итә. Бала саҡта беҙҙе йә буйһонорға, йә тыңламаусылыҡтың эҙемтәләрен ҡабул итергә өйрәтәләр. Шуға күрә оло тормошҡа аяҡ баҫҡас та күптәребеҙҙең конформизмды тормошҡа ябай һәм файҙалы ҡараш тип ҡабул итеүенә аптырарға түгел. Беҙ кәмәне сайҡалтырға тырышмайбыҙ, сөнки хуплау ишетергә теләү ҡыҙыҡ булған нимәлер эшләүгә ҡарағанда күпкә көслөрәк.

Конформизм - кешелектең иң бөйөк психологик фажиғәләренең береһе. Был емергес ғәҙәт ҡапҡанына эләгеп, беҙ йыш ҡына алдыбыҙға ҡуйған маҡсатҡа өлгөшә алмайбыҙ. Кемдер бөйөк кеше булырға һәм мөһим эште бойондороҡһоҙ башҡарырға теләй, әммә булдыра алмай. Хуплау алырға тырышыу уның юлында аша сыҡҡыһыҙ ҡаршылыҡ булып тора.

Конформистар бар көстәренә тирә-йүндәгеләрҙең хуплауын алырға тырыша, был хуплау бер ваҡытта ла етерлек булмай. Улар комплиментҡа өмөтләнеп йәки үҙ ҡылыҡтарына баһа алырға теләп бер кешенән икенсеһенә ташлана. Бала саҡта уларҙы ата-әсәләре һәм уҡытыусылар маҡтай, эштә - етәкселәр һәм коллегалар, никахта - ҡатыны йәки ире. Уларҙың эргәһендә һәр саҡ маҡтап-хуплап, башынан һыйпап торған кеше кәрәк. Был уларҙың түбән үҙбаһаһын күтәреп ебәрә. Һәр саҡ маҡтау һәм хуплау эҙләп, бындай кешеләр уңышлы һәм бәхетле тормош өсөн үҙҙәренән яуаплылыҡты алып, башкөлләй тирә-яҡтағыларҙан бәйлеләр. Улар психологик ҡолға әүерелә һәм үҙлектәре һәм бойондороҡһоҙлоҡтары булғанда тормоштары ниндәй була аласағын күҙ алдына ла килтермәй.

Беҙ алда нимә тураһында һөйләгәнде иҫләйһегеҙме? Ҡаһарманлыҡтың ҡапма-ҡаршыһында ҡурҡаҡлыҡ түгел, ә конформизм тора. Беҙ бер кемгә лә тормошобоҙҙо унынҫа ҡорорға йәки боҙорға, уның барышын контролләргә вәкәләт бирергә тейеш түгелбеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 14 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Петля Нестерова". Детективный сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.20, 03.05 "Сухое прохладное место". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
03.20 "Модный приговор".
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек". Ток-шоу (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-15". "С чистого листа". 1-я и 2-я серии, "Мальчик со скрипкой". 1-я серия. Детективный сериал (12+).
23.55 "Честный детектив" (16+).
00.55 "Как убивали Югославию. Тень Дейтона" (12+).
01.55 "Россия без террора. Мусульманские святыни", "Прототипы. Горбатый. Дело Алексеева" (16+).
02.30 "Сын за отца". Драматический сериал (16+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Автограф" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Море. Горы. Керамзит". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**15.45 "Преград.net" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.25 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Нефтекамск) - "Реактор" (Нижнекамск).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Гринберг". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**02.00 "Плачу вперед" (12+).**

## 15 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Петля Нестерова". Сериал (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят!" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Петля Нестерова" (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Структура момента" (16+).
01.35, 03.05 "Прощай, Чарли". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-15". Мальчик со скрипкой". 2-я серия, "Верное средство". 1-я и 2-я серии. Сериал (16+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
01.40 "Шифры нашего тела. "Печень", "Смертельные опыты. Химия". Док. фильмы (12+).
03.15 "Сын за отца". Драматический сериал (16+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Море. Горы. Керамзит". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**15.45 "Преград.net" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Биш дауа" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Автограф" (12+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Интервью" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "В стране женщин". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Говорящая с призраками". Сериал**

## 16 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Петля Нестерова". Сериал (12+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Петля Нестерова" (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Время, вперед!" К 100-летию Георгия Свиридова(16+).
01.35, 03.05 "Порочный круг". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-15". "Короткое замыкание", 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
23.00 "Специальный корреспондент"
00.40 "Демократия массового поражения". "Бэкфайр", "Бьюти" и другие. Сто лет дальней авиации" (16+).
02.45 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Море. Горы. Керамзит". Сериал**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**15.45 "Преград. Net" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Интервью" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Старый Новый год". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**

## 17 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.-5 "Контрольная закупка".
09.30 "Жить здорово!" (12+).
10.35 "Модный приговор".
11.35 "Петля Нестерова". Сериал (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Петля Нестерова". Сериал (12+).
13.30 Новости (с субтитрами).
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Время покажет" (16+).
19.00 "Наедине со всеми" (16+).
20.00 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
22.00 "Петля Нестерова". 7-8-я, заключительная, серии (12+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "Политика" (16+).
01.20 Кубок Первого канала по хоккею Сборная России - сборная Швеции.
03.30 "Модный приговор".
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Земский доктор-3". Драматический сериал (12+).
13.00 "Вести".
13.35 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-15". "Луна в скорпионе". 1-я и 2-я серии (16+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.40 "История нравов. Наполеон I", "История нравов. Наполеон III". Док. фильмы (16+).
02.35 "Летчик для Молотова. Один шанс из тысячи" (12+).
03.35 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00 "Будьте здоровы" (12+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Море. Горы. Керамзит". Сериал**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**15.45 "Преград.net" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.00 "Историческая среда" (6+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Охотник на лис". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Говорящая с призраками". Сериал**

## 18 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Петля Нестерова". Детективный сериал (12+).
14.30, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.35 "Вечерний Ургант" (16+).
23.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
02.00 "Фарго". Детективный сериал. 10-я, заключительная, серия (16+).
03.00 "Современные проблемы". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-3". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Новая волна-2015". Гала-концерт.
23.20 "Гадкий утенок". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
03.15 "Урок французского. Мирей Матье. Джо Дассен и другие..." (12+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донъя" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Море. Горы. Керамзит". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бахетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**15.45 "Преград.net" (0+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.25 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Нефтекамск) - "Ирбис" (Казань).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Йома" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Клод в помощь". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Говорящая с призраками" (16+).**

## 19 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Ночные ласточки". Сериал (16+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Ольга Аросева. Рецепт ее счастья"
12.00 Новости (с субтитрами).
12.40 "Идеальный ремонт".
13.40 "Теория заговора" (16+).
14.30 "Аффтар жжот!" (16+).
16.00 Кубок Первого канала по хоккею Сборная России - сборная Финляндии. Прямой эфир.
18.10 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 "Голос" (12+).
21.00 "Время".
21.20 Праздничный концерт к Дню работника органов безопасности Российской Федерации. Трансляция из Государственного Кремлевского Дворца.
23.25 "Что? Где? Когда?"
00.35 Кубок Первого канала по хоккею Сборная Швеции - сборная Чехии.
02.45 "Канкан". Худ. фильм (12+).
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Монро". Худ. фильм (16+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Тренды" (12+).
09.30 "Правила движения" (12+).
10.25 "Личное. Борис Клюев" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Две жены" (12+).
12.20 "Иллюзия счастья". Сериал. 4 серии (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Иллюзия счастья". Продолжение сериала (12+).
16.40 "Знание - сила". Телевикторина.
17.30 "Главная сцена". Полуфинал. Музыкальный конкурс.
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Мирт обыкновенный". Сериал. 4 серии (12+).
00.50 "Заезжий молодец". Мелодрама (12+).
02.55 "Приговор". Худ. фильм (12+).
04.55 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Монстры на острове" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.55 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Нефтекамск) - "Ирбис" (Казань).**
**15.30 "Дарю песню" (12+).**
**17.15 Межрегиональная лига КВН-Уфа**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин".**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Четвертый период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Где-то" Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бесталанная" (12+).**

## 20 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Ночные ласточки". Худ. фильм (12+).
08.10 "Армейский магазин"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Барахолка" (12+).
13.05 "Гости по воскресеньям".
14.00 Праздничный концерт к Дню работника органов безопасности Российской Федерации.
16.00 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир.
18.10 "Точь-в-точь". Шоу перевоплощений (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод". Криминальный сериал
24.00 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Финляндии - сборная Швеции.
02.10 "Модный приговор".
03.05 "Мужское/женское" (16+).
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.50 "Где находится Нофелет?". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.10 "Соседи по разводу". Комедия (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Пародии! Пародии! Пародии!!!" Выпуск 1. Фильм-концерт (16+).
16.15 "Я все преодолею". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Непобедимый. Две войны Кирилла Орловского". Док. фильм (12+).
01.30 "Полет фантазии". Худ. фильм
03.35 "Гений разведки. Артур Артузов"
04.35 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Осрашыу" (12+).**
**09.00 "Четвертый период" (6+).**
**09.30 Мультфильмы (0+).**
**10.00 "Физра" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Позывной "Барс" (6+)**
**16.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.00 "Полезные новости" (12+).**
**17.15 Межрегиональная лига КВН-Уфа.**
**18.30 "Любимое дело" (12+).**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.15 "История признания" (12+).**
**19.30 "Это мы!" (0+).**
**20.00 "Уфимская волна-2015".**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Байыҡ-2015" (12+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Уроки вождения". Худ. фильм (16+).**
**02.45 "Мона" (12+).**


## *ИҒЛАН*

Өфө ҡалаһының 3-сө Балалар стоматология поликлиникаһы (Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 16/1) ошонда теркәлгән 0 йәштән алып 18-ҙе тулмаған балалар һәм үҫмерҙәрҙе ҡабул итә.

Поликлиникала медицина хеҙмәте учреждениеның эш режимына һәм белгестәрҙең эш графигына ярашлы күрһәтелә. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома 8.00 - 20.00. Шәмбе - 8.00 - 16.00.

1 йәшкә тиклемге пациенттар мөрәжәғәт иткән көндә сиратһыҙ ҡабул ителә. Алдан яҙылырға кәрәкмәй.

1 йәштән өлкән балалар медицина тикшеренеүе үткәндә шулай уҡ алдан яҙылмайынса көнөндә үтә.

Тиҙ ярҙам мөрәжәғәт иткән көндә күрһәтелә.

**Табипҡа яҙылыу өсөн:**

● www.gosuslugi.ru йәки rb.k-vrachu.ru электрон адресы аша интернет порталы;

● (347) 246-32-18 телефоны аша поликлиника регистратураһы;

● Кеҫә телефондары аша 09383 номеры, стационар телефондар өсөн 246-93-83 номеры аша (поликлиниканың коды - 173) контакт үҙәге;

● Поликлиникала урынлашкан Инфомат аша.

Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса медицина ярҙамы алыу өсөн 14 йәшкә тиклем балаларға тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, 14 йәштән өлкәндәргә РФ гражданины паспорты менән мотлаҡ медицина страховкаһы полисы кәрәк.

✓ *Һәр бала - рәссам. Эш балалыҡтан сыҡһа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.*

*(Пабло Пикассо).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ТАУҒА ҠАРАП ТАШ АТМА

**(11 декабрь - Халыҡ-ара тауҙар көнө)**




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**47-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Кәрим. Йосопов. Маска. Айбар. Сәлиә. Гөлфиә. Айыҡлыҡ. Сирле. Аҡайыу. Алмаз. Әсә. Бешеү. Нужа. Оран. Гөлгә. Ершов. Арышы. Мәжитов. Лимузин. Ҡаҙылыҡ.

**Вертикаль буйынса:** Аҙнабаев. Алырымҡош. Лиознова. Йола. Рыялыҡ. Ҡаҡ.Күсем. Әрнеш. Ырыулы. Сөләймәнов. Мали. Мавра. Ныҡ. Сәс. Багаж. Илле. Ләме. Әсе. Үтәев.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Декабрь (Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (3) дүшәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (4) шишәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (5) шаршамбы | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (6) кесе йома | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 18 (7) йома | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (8) шәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (9) йәкшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Халҡыбыҙҙың зыялыларынан булған ғалим һәм яҙыусы **Мирас Хәмзә улы Иҙелбаевты - 70 йәшлек юбилейы**, киленебеҙ һәм еңгәйебеҙ - шағирә, йәмәғәт эшмәкәре **Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы Юнысованы** халыҡ шағирәһе исеме бирелеү менән ҡотлайбыҙ! Ҙур, матур ғаиләләрендә артабан да бәхет һәм ҡыуаныстар тыуып ҡына торһон. Именлек, бәрәкәтле ижад емештәре, оҙон ғүмер теләйбеҙ.

**Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе бөтөн туғандары һәм Өфөнән Фәүзиә менән Гөлфиә Мөхәмәтшиналар.**

*ҠУЛЛАНЫУСЫЛАРҒА*



# БЫЛ РИЗЫҠТАРҒА ҮРЕЛМӘ

**Көн һайын аҙыҡ-түлек магазинына йөрөйбөҙ. Ялтырап торған тышлы, күҙҙе ҡамаштырып үҙенә тартып ятҡан төрлө тәмлекәстәр, башҡа төрлө ашамлыҡтар сумкаға инеп "ятып", өҫтәл түренә ҡунаҡлай. Ләкин уларҙың ҡайһы берәүҙәре һаулыҡ өсөн үтә лә зарарлы булыуы тураһында хәбәрҙар түгелбеҙ. Магазин кәштәләрендәге ниндәй аҙыҡ-түлекте урап үтергә кәрәк?**

**1.** Еңелсә тоҙланған ҡыҙыл ыуылдырыҡ (икра). Ыуылдырыҡ - оҙаҡ һаҡлана торған аҙыҡ түгел. Тик туңдырылған йәки күп итеп тоҙлағанда ғына уның ғүмере "оҙая". Шуға күрә, тышында "еңелсә тоҙланған ыуылдырыҡ", тигән яҙыу булһа, уға рак һәм аллергия ауырыуҙарына сәбәпсе булыуы мөмкин уротропин матдәһе ҡушылған була.

**2.** Татлы кукуруз һәм кукуруз киҫәксәләре (хлопья). Уларға үт ҡыуыу юлдарына зарарлы булған шәкәрҙе алмаштырыусы матдә ҡушып эшләйҙәр.

**3.** Ароматизаторлы бутҡалар. Бөтә ароматизаторҙар ҙа - хатта тәбиғигә оҡшаштары ла - химик сәнәғәт продукттары. Шуға күрә уларҙы ашамау хәйерле.

**4.** Төрөлгән кекс һәм рулеттар. Составтарына ҙур күләмдә стабилизатор һәм консерванттар булыу арҡаһында был продукттар оҙаҡ айҙар буйына боҙолмайынса һаҡлана.

**5.** Осһоҙ сосискалар һәм колбасалар. Улар соянан эшләнгән аҙыҡтар. Бындай аҙыҡтарҙың 40 проценты сусҡа тиреһенән тора. Шулай уҡ уларға төрлө тәм өҫтәлмәләре аҫтында йәшереп, күп итеп сало, эс майы ҡушалар.

**6.** Иретелгән (плавленый) сыр. Составында тәбиғи продукт бик әҙ миҡдарҙа була.

**7.** Шоколад батондары. Тәмле һәм асығыуҙы баҫыусы шоколад батондары ҙур калорияға эйә булыу менән бер рәттән, төрлө буяуҙар һәм ароматизаторҙарға ла "бай".

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 декабрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры

**13 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**19-20 декабрь "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**17 декабрь "Урал батыр төнө"** Республика этнофестивале. Башлана 18.00

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**16 декабрь "Һатам! Иремде һатам!!!"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**17 декабрь "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия

**18 декабрь "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия

*✓ Һәр бала - рәссам. Эш балалыҡтан сыҡһа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.*

*(Пабло Пикассо).*



АҠМУЛЛА УҠЫУҘАРЫ

**Мифтахетдин Аҡмулла - XIX быуаттағы башҡорт поэзияһының иң күренекле вәкиле, уның ижады һуңғараҡ башҡорт милли әҙәбиәтенең үҫешенә ҙур йоғонто яһаясаҡ. Тормошҡа, йәшәйештең төрлө яҡтарына ҡарата үҙенең ҡарашы булған фәйләсүф-мәғрифәтсе милләттең рухи остазына әүерелә. Шуға бөгөнгө көндә лә Аҡмулланың тыуған халҡының, тыуған еренең шатлығын да, әрнеүен дә үҙ эсенә алған шиғырҙары актуаллеген юғалтмай. Шуның өсөн дә "Аҡмулла уҡыуҙары" ла йылдан-йыл билдәлелек яулай бара. Быйыл ул Евразия гуманистик форумы сиктәрендә ойоштоРола. "Мәҙәниәттә һәм мәғарифта Евразия халыҡтары мәғрифәтселәренең гуманистик мираҫы" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһында Аҡмулла исемендәге стипендиялар тапшырылды, билдәле ғалимдар сығыш яһаны. Гәзит уҡыусыларға мәғрифәтсе-шағирҙың бер шәлкем шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ.**

# БАЛАНЫҢ НИҺЕН МАҠТАЙҺЫҢ...

## атаның телен алмаған



АҠМУЛЛА

### Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!

Илтифат ит: уҡыуҙалыр шәрафәттәр,
Яһиллыҡтан килә ятыр ҙур афәттәр,
Уҡығандар күккә осор, һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, карәмәттәр

Уҡығанға был донъяла жәләл булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр хәләл булыр.
Ырыҫ, дәүләт шишмәһенән асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр.

Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай.
Сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.
Белемлелек - арыҫландан көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.

### Аттың ниһен маҡтайһың?..

Аттың ниһен маҡтайһың -
Бәйгеләрҙә сапмаған;
Дөйәнең ниһен маҡтайһың -
Алыҫ ергә бармаған;
Әҙәмдең ниһен маҡтайһың -
Яҡшы яғы ҡалмаған;
Донъяның ниһен маҡтайһың -
Ырыҫ-бәхет ҡунмаған;
Хакимдың ниһен маҡтайһың -
Яуыҙ йырын йырлаған;
Егеттең ниһен маҡтайһың -
Илде дошман сарлаған*;
Ҡатындың ниһен маҡтайһың -
Ҡағып түшәк һалмаған;
Баланың ниһен маҡтайһың -
Атаның телен алмаған;
Ҡыҙҙың ниһен маҡтайһың -
Ғәйбәт һүҙҙән ҡалмаған;
Мулланың ниһен маҡтайһың -
Үле менән теренең
Барын берҙәй ялмаған.

### Нәсихәттәр

(Ҡыҫҡартып алынды)

Иң әүүәл кәрәк нәмә - иман, тигән,
Әхирәт эштәренә инан, тигән.
"Хоҙай, кисер!" - тигән менән эш бөтмәйҙер,
"Иман шарты"н өйрәнмәһә - Иван, тигән.

Икенсе ҡиммәт нәмә - күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа - күмел, тигән.

Өсөнсө ҡиммәт нәмә - аҡыл, тигән,
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән.

Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын кәфөрләккә һатыр, тигән.

Дүртенсе ҡиммәт нәмә - шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһеҙлек - кәфөр, тигән.
Яткан ерҙән: "Хоҙай, кисер", - тигән - хурлыҡ,
Сәбәп эҙләп, тәҙ юл менән йүгер, тигән.

Бишенсе ҡиммәт нәмә - әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән - мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Кәфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.

Алтынсы ҡиммәт нәмә - сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
Һәр эштә сабырһыҙҙың тәбө - хурлыҡ,
Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән.

Етенсе ҡиммәт нәмә - ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас - юлдаш, тигән.

Алдыбыҙҙан киткәне юҡ хәүеф-хәтәр,
Был халыҡ, белә тороп, ғафил итер.
Ғәфләттән уяныу юҡ, оялыу юҡ,
Каруандар үтеп ятыр ҡатар-ҡатар.

*Сарлау - тултырыу, баҫып алыу

АТЫҢ КЕМ?

# ҠӘЛҒӘ КЕҮЕК НЫҠЛЫ УЛ



**Рәзилә менән Руслан Шәйхетдиновтар батыр һәм көслө, зирәк ике ул үҫтерә икән. Уларҙың кесе улы Баязит әле Өфө ҡалаһының 13-сө башҡорт башланғыс мәктәп - балалар баҡсаһына йөрөй. Баязитҡа алты йәш, ә уның ағаһы Батырханға ун йәш.**

- Минә исемде атайым үҙе һайлап ҡушҡан. Баязит - "крепость" тигәнде аңлата, тик башҡортсаһын онотом да ҡуйҙым. Ә Батырхан ағайымдың исеме "батыр, көслө кеше" тигәнде аңлата. Мин "хан" һүҙен бик аңламайым, әммә ағайымдың бик көслө икәнен беләм. Ул мине һәр ваҡыт яҡлай. Бер ваҡыт ике малай минә һуҡҡайны, ағайым мине йыуатты. Батырхан ағайым әле мәктәптә уҡый, шуға минең дә тиҙерәк мәктәпкә барғым килә. Атайым менән әсәйемә Өфөнөң 20-се башҡорт гимназияһына уҡырға барам тип әйттем, - ти Баязит. Ул Батырхан ағаһы менән ауылда өләсәләренә ҡунаҡҡа ҡайтҡанда еләк ашарға, урамда йүгереп уйнарға ярата икән. Исеме есеменә тура килеп, ҡәлғә кеүек ныҡ, ҡеүәтле, туғандарын һәм үҙ милләтен ҡурсалаусы булып үҫһен был малай.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бөхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# КҮРӘҺЕҢ БУЛҺА...

## тигеҙ ерҙә абынырһың

Еренә күрә ҡоланы, һыуына күрә йыланы, ҡыҙына күрә кейәүе, өйөнә күрә иләге.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр бала - рәссам. Эш балалыҡтан сыҡһа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.

**(Пабло Пикассо).**

Бәхетһеҙҙәр һәм насар йоҡлаусылар, гәзәттә, был сифаттары менән ғорурланырға ярата.

**(Бертран Рассел).**

Беҙ булған бөтөн яҡшы нәмәләрҙең ҡәҙерен һуңлап аңлайбыҙ.

**(Александр Блок).**

Табаныңды ялаусы бар икән, ул тешләшә башлағансы башына баҫып өлгөр.

**(Поль Валери).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше яңылыштан ғына икенсе бер кешегә зыян эшләй. Күрелгән ҡаза әллә ни ҙур булмай, ләкин зыян күреүсе был хәлде ғәфү итергә теләмәй, кирелһәнсә, юғалтҡандан күберәк файҙа алырға теләп, зарар итеүсегә "Минең зыянды ҡапла!" тип мөрәжәғәт итә.**

**- Зыянды ҡаплай алмайым шул, - тип яуаплай кеше, - ғаиләм ҙур, һинә түләрлек бер байлығым да юҡ...**

**- Улайһа, суд түләтер! - тип янай ҙа, зыян күреүсе судьяға китә.**

**Судья уларҙың икеһен дә үҙенә саҡыра, икеһен дә игтибар менән тыңлай һәм зыян күреүсенен, нәфсеһенә баш була алмайынса, зыянды каплarға түгел, ә байырға теләүҙән тейешенән күберәк хаҡ талап итеүен аңлай. Шунан ул был ҡомһоҙ кешегә былай ти:**

**- Һин зыян итеүсегә лә, миңә лә ваҡытты алғаның өсөн түләргә тейешһең...**

**- Улай булырға тейеш түгел, - тип туҙынып китә зыян күреүсе. - Мин зыян күрҙем һәм миңә зыянды ҡапларға тейештәр. Һин законды боҙаһың һәм мин һинә лә аҡылға ултыртасаҡмын...**

**Шулай ул ғәҙеллек эҙләп, донъя ҡыҙырып сығып китә. Ләкин эҙләгәнен таба алмай, бар ерҙә үҙенең дәғүәләрен ҡабатлай һәм уны бар ерҙән ҡыуалар. Аҙаҡҡы мәлдә ул Хоҙайға мөрәжәғәт итә. Хоҙай уны тыңлап та тормай һәм шулай ти:**

**- Мин барыһын да беләм. Ҡомһоҙлоҡ аҡылыңды яуламаған булһа, һин ғәҙеллек таба алыр инең. Әммә ҡомһоҙлоғоң алдан йөрөгәс, һиңә ғәҙеллек кәрәкмәй...**

**Зыян күреүсе Алланың һүҙҙәрен аңламай, ә өйөнә ҡайтып еткәндә ул, ғөмүмән, аңлауҙан туҡтаған була, сөнки ул аҡылынан яҙа. Шулай ул үҙенең ни теләгәнен дә белмәй ҡаңғырып йәшәп ята..."**


1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 5621